*Ахмаҡ һәм наҙан бәндәне ошо биш сифат аша танып була: ул сәбәпһеҙгә асыулана, урынһыҙ ерҙә һүҙ һөйләй, үҙенә ҡағылмаған эшкә ҡыҫыла, әленән-әле фекерен үҙгәртә, уға кем яуыҙлыҡ, кем изгелек теләгәнен дә айыра алмай.*

*(Г. Честертон).*


ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

14 - 20 АВГУСТ (УРАҒАЙ) 2010 ЙЫЛ

www.kiskeufa.ru | 2002 йылдан башлап сыға | Һатыуҙа хаҡы ирекле | №33 (399)


## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Эшҡыуарлыҡтың уңыш сере...**

үҙ-үҙенә һәм эшләгән эшенә ныҡлы ышаныу



5

**Үҙ юлыбыҙ ҡайҙа,**

ниңә барыһы ла америкаса?



6

**Атайым һөйләгән тарихтан...**

минең тарихсылыҡ башланғандыр



8-9

**Туңдырма тәмле лә...**

тик файҙалымы?



12

14 ТВ-программа


## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

### Рәсәй Федерацияһы Президенты Дмитрий Медведев бер сығышында: "Йәмғиәткә позитив энергияһын сығарырға булышлыҡ итергә кәрәк",- тигәйне. Быны нисек атҡарырға була?

*Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ, уҡытыусы:*

Тормош ҡапма-ҡаршылыҡтарҙан торғас, негатив һәр урында була һәм ул тәбиғи ҙә. Көндөң барлығын иҫбат итер өсөн - төн, яҡтылыҡтың барлығын күрер өсөн - яҡтылыҡ, изгелектең барлығын тойор өсөн яуыҙлыҡ кәрәк булған һымаҡ, позитивтың барлығын негатив раҫлай. Негатив бары тик ожмахта ғына юҡтыр ул. Шуға күрә негативтан ҡурҡырға ярамай. Бер үк ваҡытта донъяны позитивҡа көйләргә тырышыу негатив кешегә көсләп йылмайырға ҡушыу һымаҡ та килеп сығыр ине. Интернетта Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитовтың блогы асылып та өлгөрмәне, негатив унда ла барып тулды. Әйтерһең дә, быға тиклемге тормошобоҙ тик шундай кире күренештәрҙән генә торған. Шуға күрә бындай блогтарҙағы мәғлүмәт үтә субъектив, объективлыҡҡа дәғүә итә алмай. Нимә генә тимәйек, 1990 йылғы Башҡортостан менән 2010 йылғы Башҡортостанды сағыштырырлыҡ түгел. Әгәр ҙә хәлдәр шул тиклем негатив булһа, бындай яҡшы үҙгәрештәр бөтөнләй булмаҫ ине. Негативлыҡтың рупоры Жириновскийға ғына рәхәт, уның эсендәгеһе - тышында.

*Таңсулпан ҒАРИПОВА, яҙыусы:*

Минең "Бәхеткә ҡасҡандар"тигән сәхнә әҫәремдә әбей менән бабайҙың йортон һыу баҫа. Быны Туфан һыуы ҡалҡыуы, Ахырызаман етеүе тип аңлаған әбей үҙ донъяларында ятып үлеүҙе хуп күрә һәм быға бабайын да күндерә. Был - негатив фекерләү, һәр күренештең тик насар яғын күреү бәләһе. Беҙ тормоштағы бәләкәй генә уңышһыҙлыҡты, кире күренеште лә ошо әбей һымаҡ Туфан һыуындай күреп, башҡаларҙы ла ошоға ышандырырға тырышабыҙ. Ә бит, күптәрҙең ҡарашынса, хатта һәр бер кире тип нарыҡланған күренештең дә ыңғай яғы була. Һәр бер негативтың кире яғында позитив, ыңғай һыҙат йәшәй. Беҙгә ана шуны ла күреп өйрәнергә кәрәк. Миҫалға, быйыл бар донъяны яндырып, оло хафаға һалған эҫелекте генә алайыҡ. Минеңсә, Аллаһы Тәғәлә ергә ошондай көндәрҙе ебәреп, кешелекте алда торған ҙур һәләкәттән иҫкәртергә итәлер, кешеләр бындай климатҡа йылап өйрәнә торһон да, алдағы йылдарҙағы тәбиғәт катаклизмдарын еңел үткәрһен, тиҙер.

*Сәғит хажи ИСМӘҒИЛЕВ:*

Негативтың тамыры - яуыҙлыҡтан, яуыҙлыҡтың тамыры динһеҙлектән килә. Негативлыҡҡа ҡаршы көрәшәм, тип, кемдер нимәгәлер ҡаршы көрәш иғлан итһә, ул - һуғышты башлаусы ла. Яуыҙлыҡҡа ҡаршы көрәшеп, беҙ үҙебеҙҙе кемгәлер ҡаршы ҡуябыҙ, бер-береһенә ҡаршы тороусы ике яҡтың һанын һәм уларҙың агрессияһын арттырабыҙ. "Таш менән атҡанға аш менән ат", тигән мәҡәл тап шуның өсөн әйтелгән халҡыбыҙҙа.

Уйлап сығарылған дошман - иң яуыҙ дошман, һәм ул беҙҙең һәр беребеҙҙең күңелендә ултыра, иң тәүҙә шул дошманды еңергә кәрәк беҙгә. Хәҙерге ваҡытта донъяла иғлан ителмәгән Бөтә донъя һуғышы бара. Ул һуғыш - мәғлүмәт һуғышы, һәм ул һуғыштың башҡаларынан айырмалы емерткес көсө мең тапҡырға ҡеүәтлерәк. Матбуғат сараларында, бигерәк тә Интернетта негатив мәғлүмәт менән сығыш яһаусылар алдынғы ҡарашлы кешелеккә ҡаршы сығыш яһай. Негатив ҡарашлы журналист иһә уларҙың тирмәненә һыу ҡоя. Негативҡа ҡаршы көрәшергә ярамай, бары тик күберәк изгелектәр ҡылырға ғына кәрәк. Бары тик изгелек ҡылыу күпселектең йәшәү принцибына әйләнгән осраҡта ғына негативлыҡтан ҡотолоп буласаҡ.

*Рита ФӘТКУЛЛИНА, шағирә, филология фәндәре кандидаты:*

Кешенең фекерләүенә позитив йүнәлеш биреү уның күңелен үҫтереүгә йүнәлтелгән һәм шәхес үҫеше лә ошо шартта ғына мөмкин. Негатив менән шәхес тәрбиәләп тә, милләтте үҫтереп тә булмай. Тормошто алға әйҙәүсе төп көс тә бит күңелдәрҙәге өмөткә, яҡты уйға, ышанысҡа бәйле. Негатив кешене үҙ-үҙенә бикләй, кешеләрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуя, дошманлаштыра. Америкала Бөйөк депрессия йылдарында президент үҙенең указы менән аҙағы насар бөткән фильмдарҙы күрһәтеүҙе тыйған һәм ошо юл менән миллионлаған американдарҙың позитив энергияһына юл асҡан. Шуға күрә хәҙерге ваҡытта журналистарҙың, яҙыусыларҙың иң төп маҡсаты - кешеләрҙең күңелендә үҙ-үҙенә, туғандарына, иленә ҡарата мөхәббәт тойғоһо уятыусы һүҙ әйтеү. Тормошобоҙҙағы негативтан беҙҙе бары тик ошондай тойғо ғына ҡотҡара алалыр.

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

## ЯҢЫ РУБРИКА: "ХУЖАҺЫ НИНДӘЙ..."

# ҮҘЕБЕҘ ҠӘҘЕРЛӘРГӘ ӨЙРӘНҺӘК,

## башҡалар ҙа беҙҙең өлгөгә эйәрер

**"Хужаһы ниндәй..." тип ҡуйҙыҡ әле яңы рубрикабыҙ исемен. Материалдарҙың йөкмәткеһенә ҡарап, уны төрлөсә дауам итергә булыр. Ә бөгөнгә дауамы "Хужаһы ниндәй, ер-һыуы шундай" булыр. Бындай һүҙ әйтергә яңыраҡ ҡына Баймаҡ районындағы иң гүзәл төбәк - Талкаҫ күленә сәйәхәт ҡылыу сәбәпсе булды.**



(Дауамы 16-сы биттә).

СЕТЕРЕКЛЕ ҺОРАУ

# АХМАҠ МЕНӘН УҘЫШЫП... аҡылыңдан яҙма

**ҺОРАУ: Аҡыллының ҡәҙере ахмаҡ янында беленер, тигән мәҡәлде нисек аңлайһығыҙ?**

**Зәкирйән ӘМИНЕВ:**

Бала саҡта башҡа малайҙар тураһында әсәйгә инеп, шул малай шулай, тегеләй, былай, тип ошаҡлашһам, әсәйем: "Улым, һин үҙеңде ахмаҡ менән сағыштырма, башың булһа, аҡыллы кешенән фәһем ал", - ти торғайны. Ысынлап та, ахмаҡ янында бөтә нәмә лә сағыу һәм өҫтөн күренә күренеүгә, тик үҙемде ахмаҡ янында сағыштырып ҡарамаҫ һәм башҡаларҙың да мине улар менән сағыштырыуын теләмәҫ инем. Кешене ахмаҡ менән сағыштырыуҙан ни фәтүә? Аҡыллы менән аҡыллыны сағыштырыуҙың мәғәнәһе бар. Ахмаҡ янына кемделәр ҡуйып: "Бына был аҡыллы, исмаһам", - тип, уны ҡәҙерләй башлауҙың мәғәнәһе бармы? Мәҫәлән, атайым һәр ваҡыт уҡымышлы кешеләргә тартыла, берәй аҡыллы кеше булһа, уның менән һөкләнә торғайны. Ҡартасәйем дә аҡыллы кешеләр янында булырға тырышты. Ул кешене бер ваҡытта ла "алйот", "ахмаҡ" тип атаманы (араларында ахмаҡтары ла, алйоттары ла булғандыр инде), һәр ваҡыт: "Үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел", - тиер ине. Тимәк, берәүҙе лә иҫәргә һанарға ярамай. Иҫәрҙең дә берәй мәғәнәһе барҙыр, мөғайын. Шуға үҙеңде һәр ваҡыт аҡыллы кеше менән сағыштырырға, улар менән һөкләнергә, шундай булырға ынтылырға кәрәк.

**Зөһрә БУРАҠАЕВА:**

Мин был мәҡәл менән тулыһынса килешеп етмәйем, бәлки, шуға ла ул сетереклерәктер. Әлбиттә, дөйөм бер тәркөм эсендә кемдер үтә аҡыллы булып күтәрелә, ләкин ул бит уның эргәһендәгеләр тотош ахмаҡ булған өсөн күтәрелеү түгел. Аҡыллылыҡтың төрлө дәрәжәлә булыуы, төрлө өлкәгә ҡарағаны ла була.

Ғөмүмән, аҡыллы кеше бер ваҡытта ла үҙен ахмаҡ менән сағыштырырға тейеш түгел. Ахмаҡ менән аралашҡандан һуң: "Мин аҡыллы икән", - тигән һығымтаға килгән кеше үҙе ахмаҡ ул. Кеше ҡайҙа, кемдәр араһында ғына булмаһын, үҙенең баһаһын белергә тейеш. Ғөмүмән, кешене бер ҡасан да икенселәр менән сағыштырырға ярамай, был тик кире эҙемтәләргә генә килтерәсәк. Кеше һәр ваҡыт алға ынтылып, үҙен ҡәҙерләп, аҡылын үҫтерер йәшәргә тейеш. Үҙебеҙҙе һәм башҡаларҙы ахмаҡтар менән сағыштырыу дөрөҫ түгел. Былдай ғәҙәтегеҙ була ҡалһа, тиҙерәк ҡотолоу сараһын күрегеҙ.

ИШАРА

# ТӨШТӘР ИҪКӘРТӘЛЕР ҘӘ...

## беҙ генә ышанмайбыҙ

**Бала сағымда "матур төштәр күреүсе" тигән даным бар ине, тип һеҙгә яҙғайным бер мәл. Әйе, тормош юлын үткәндә төштәрҙең матурҙарын да, ҡурҡыныстарын да күрәһең инде. Бик арып йоҡоға талған мәлдәрҙә хатта төш күрмәй ҙә йәшәгән саҡтарың була. Ашауын ашап, йәшәүен йәшәп, күререндә күреп, пенсияға сығып, тынысланып, ашыҡмай йәшәй башлағас, тағы ла матур төштәр күреп йоҡлай инем.**

Шулай тыныс ҡына йәшәп ятҡанда ҡапыл ҡурҡыныс төштәр күреп, төн уртаһында уянып, дарыу эсә башланым. Йә һыуға батам, имеш. Йә берәй кеше менән һүҙ көрәштереп, ҡысҡырып илайым, йә һоро бесәйҙе ҡотҡара алмай ыҙаланам, йә аяҡҡулдарым бәйле, имеш. Йә әйтер һүҙемде әйтә алмайым, тауышым сыҡмай.

Юҡҡа ғына инмәгән икән былдай төштәр. Иң тәүҙә ашығыс рәүештә президентыбыҙҙы алмаштырҙылар. Элек БСТ-ның "Яңылыҡтар" тапшырыуында: "Беҙҙең республика иң көслө, иң тоторОҡло, иң ҡеүәтле", тип һөйләйҙәр ине, ҡапыл: "Беҙҙә эш хаҡы Рәсәйҙә иң түбәне, хатта ике тапҡырға", - тип һөйләй башланылар. Беҙ бик хәрт йәшәйбеҙ икән дәһә... Ә хәрт йәшәүебеҙҙең сәбәбен әйтмәйҙәр. Ниңәләр: "Башҡортостаныбыҙҙа йыйылған һалымдың 70 проценттан ашыуы Үҙәккә оҙатыла, илгә килмешәктәр тула икән, нисек һәйбәт йәшәп була һуң?" - тип тә өҫтәмәйҙәр...

Был юлы БСТ-ның "Яңылыҡтар" тапшырыуын тыңлап, аптырап, "Да, уш!" тип ҡуйҙым ("12 стульев" фильмында артист А. Папанов бөтә күренештәргә лә "Да, уш!" тип әйтә бит). Ә халыҡ ялыуҙар яҙырға йүгерҙе. Бер-береһе менән ирешә, ризаһыҙлыҡ белдерә. Етмәһә, Президенттың Интернеттағы блогы ла ялыуҙар, доңъяны ҡара итеп күрһәтергә тырышыусылар сығышы менән тулған, тиҙәр. Был күренеш ниндәйҙер ҡара йылдарҙы хәтерләтеп тә ҡуя әле ул. Тыныс тормош юҡҡа сыҡҡас, ҡайҙан матур төштәр ағылһын инде. Ҡурҡып, шомланып йәшәрбеҙме икән шулай артабан да?

Күптәрҙең бөгөнгө холҡо миңә "Коза Дереза" әкиәтен хәтерләтә. Унда, хужаһы нисек кенә ашатмаһын, саф һыу эсермәһен, ул кәзә бөтәһе ишетерлек итеп, илаҡ тауыш менән: "Асмын, һыуһайым", - тип безелдәй ҙә, безелдәй...

...Был риүәйәтте күптәр ишетеп беләләр. Йософ исемле егет төштәрҙе дөрөҫ юрау һәләтенә эйә булған. Бер саҡ Египеттың фирғәүене сәйер төш күрә. Йылғанан ете һимеҙ, туҡ һыйыр килеп сығып, яланда утлап йөрөй. Шул саҡ йылғанан тағы ла ете ябыҡ, йонсоу һыйыр килеп сыға ла, баяғы ете һимеҙ һыйырҙы ашай. Фирғәүен бөтә вәзирҙәрен саҡырып, был төштө юрауҙарын үтенә. Тик төштө береһе лә юрай алмай. Төш юраусы Йософто саҡыралар. Йософ: "Был төш менән Аллаһ фирғәүендә иҫкәртә. Египетҡа ете йыл буйы етеш, матур йылдар, ә һуңынан ете йыл ҡоролоҡ килер", - ти... Фирғәүен төш юраусы Йософто һалым йыйыусы итеп тәғәйенләй. Һәр хужалыҡ ете йыл буйы уңыштың биштән бер өлөшөн фирғәүенгә түләй. Ете туҡ йылда йыйылған ашлыҡтың һаны-хисабы булмай. Ете йылға һуҙылған ҡоролоҡ мәлендә бөтә ер йөҙөндә аслыҡ хөкөм һөргәндә, тик Египетта ғына аслыҡ булмай.

Һалымдың да, уңыштың да биштән бер өлөшөн генә йыйырға, тип әйтелгән бит был боронғо риүәйәттә... Ә беҙҙең илдә ошондай аҡыллы ҡанун һаңға һуғылмай...

**Фәүзиә ЯХИНА.**

ИҒТИБАР!

# МӨХТӘРӘМ МИЛЛӘТТӘШЕБЕҘ!



Өфө районының башҡорт теле уҡытыусылары.

***2011 йылдың беренсе ярты йыллығына гәзитебеҙгә яҙылыу башланыуын иғлан итәбеҙ. Һеҙ август аҙағына тиклем 2010 йылғы хаҡтар менән 2011 йылдың тәүге ярты йыллығына яҙыла алаһығыҙ. Ашығығыҙ!***

***Индекстарыбыҙ: 50665 (318 һум 24 тин), 50673 (354 һум 24 тин).***

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов республиканың дөйөм белем биреү учреждениеларын юғары тиҙлекле Интернет менән тәьмин итеү тураһында ҡарар ҡабул итте. Ҡарар белем биреү процесын мәғлүмәти-коммуникацион технологиялар нигеҙендә ойошторорға мөмкинлек бирәсәк.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитовтың Куйбышев тимер юлы етәксеһе Сергей Кобзев менән осрашыуында тимер юлы буйлап йөк һәм пассажирҙар ташыу эшмәкәрлеген камиллаштырыу мәсьәләләре ҡаралды. Осрашыуҙа Өфө тимер юлы вокзалы төҙөлөшөн дауам итеү тураһында ла һүҙ булды. 2006 йылда башланған төҙөлөш эштәре финанслау булмау сәбәпле туҡтап ҡалған һәм пассажирҙар өсөн ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Р. Хәмитов блогында мәғарифҡа арналған комментарийҙар һаны 1300-гә еткән. Саҡмағош һәм Бүздәк райондарында үткән республика август кәңәшмәһе алдынан Президент республика халҡына ошондай мөмкинлек биргәйне. Президентҡа мөрәжәғәт итеүселәр араһында етди мәсьәләләр күтәреүселәр ҙә, ҡатмарлы хәлдәрҙән сығыу юлдарын хәл итеүҙе һорауселар ҙа бар.

✓24 августан 5 октябргә тиклем http://pedsovet.org. сайтында Бөтөн Рәсәй интернет-педсоветы уҙасаҡ. Был сара быйыл 11-се тапҡыр ойошторола һәм виртуаль форумда белем биреү системаһында эшләүселәрҙең барыһы ла ҡатнаша ала. Быйылғы интернет-педсоветтың темаһы: "Уҡытыусының биш дәрәжәһе: уҡытыусы - шәхес, үҙ һөнәренең оҫтаһы, уҡыусы, тикшеренеүсе һәм гражданин". Бынан тыш, интернет-педсовет сиктәрендә ижади конкурстар һәм акциялар ҙа уҙғарыла. Докладтар 23 августҡа тиклем ҡабул ителә.

✓Ҡоролоҡ эҙемтәләрен бөтөрөү өсөн Башҡортостанға Федераль бюджеттан 3 миллиард 88 миллион һум аҡса бүленәсәк. Төбәктә бер нисә ай ҡоро һауа торошо күҙәтелә. Ҡоролоҡтан бигерәк тә ауыл хужалығы зыян күрҙе, 1 миллион 239 мең гектар майҙанда иген культуралары янып юҡҡа сыҡты. Документтарға ярашлы, быйыл ауыл хужалығының ҡоролоҡтан күргән зыян күләме 13 миллиард һумға барып баҫасаҡ. Дөйөм алғанда, әлеге мәлдә 1892 ауыл хужалығы предприятиеһы һәм фермер хужалыҡтары ауыр хәлдә иҫәпләнә.

*✓ Бына әле атайымдың әйткән һүҙҙәре хәтергә төшә башланы. "Беҙ - башҡорт", ти торғайны ул. Ә совет заманында ошо тамырҙарға балта сабып, нәҫел-нәсәбен белмәгән кешеләрҙе тәрбиәләргә тырыштылар.*



*АҘНА ШАҢДАУЫ*

**Был мәҡәлдең асылы ошо көндәрҙә тулыһынса асылды кеүек. Көндәр эҫеткән һайын, республикала эпидемиологик хәл-торош борсоуға һала бара. Бигерәк тә һуңғы көндәрҙә эсәк инфекцияһы менән сирләүселәрҙең артыуы күҙәтелде. Ә инде сирләүселәрҙең анализын лаборатор тикшереүҙәр уларҙың төрлө ҡуҙғытыусыларҙан - сальмонеллез, алтынһыу стафилококтан, йәғни боҙолған аҙыҡ-түлек ҡулланыуҙан барлыҡҡа килеүен асыҡлай.**

# КҮҘЕҢӘ НИ ЭЛӘГӘ...

## шуны ашҡаҙаныңа тултырма



Роспотребнадзор белгестәрен ауырыуҙарҙың төркөм-төркөм кешеләрҙе зарарлауы хафаландыра. Уҙған айҙа шундай ике осраҡ теркәлгән. Унда Өфө һәм Стәрлетамаҡ ҡалаһында йәшәүселәр гипермаркетта алынған аҙыҡ-түлекте ашағандан һуң сирләп киткән.

Эпидемиологик тикшеренеүҙәр ваҡытында аҙыҡ әҙерләү технологияһының, уларҙы һаҡлау ваҡытының һәм ташыу шарттарының, боҙолоуы, аҙыҡ-түлек әҙерләнгән биналарҙы, ҡорамалдарҙы, инвентарҙы һәм һауыт-һабаны йыуыу һәм таҙартыуҙа санитар талаптарҙың, аҙыҡ-түлек предприятиеларында һәм аҙыҡ-түлек блоктарында шәхси гигиена ҡағиҙәләренең үтәлмәүе асыҡланған.

Ошо эҫе көндәрҙә урамда һатылған йәшелсә-емеш тә инфекция сығанағы булып тора. Мәҫәлән, бер көндө беҙ ҙә ҡарбуз алып ашарға булдыҡ. Тик уның ерҙә ятҡан өлөшө йомшарып, әсей башлағайны. Шулай ҙа ашарға яраҡлы урынын таптыҡ. Ә белгестәр раҫлауынса, боҙола башлаған продукцияны бөтөнләй ашарға ярамай. Бәлки, тап улар эсәк инфекцияһы сығанағы булып торалыр. Шулай уҡ башҡа емеш-еләкте лә, саҡ ҡына ҡарая йәки серей башлаһа, ҡырҡып ташлайбыҙ ҙа, өҫтәлгә ултыртабыҙ. Уларҙа күк споралары булыу, әммә уларҙың әлегә күренмәүе ихтимал, тип иҫкәртә диетологтар. Алма кеүек ҡаты емештәрҙең боҙолған урындарын ҡырҡып ташларға мөмкин, ә груша, еләк, персик кеүек йомшаҡ эсле емештәрҙе ташларға ғына кәрәк. Уларҙа күк споралары таралған да инде.

Элегерәк телевизорҙан бар тауарҙы ла "үлтереп" маҡтаһалар, хәҙер күпселек каналдар сәләмәт тормошҡа йөҙ бора. Ундай тапшырыуҙар баҙар кәштәләрендә күҙҙең яуын алып, ауыҙ һыуын ағыҙып ятҡан емеш-еләкте матур килеш һаҡланһын өсөн нисек эшкәртеүҙәре тураһында һөйләп кенә ҡалмай, ә күрһәтә лә. Мәҫәлән, беҙ яратып ашаған бананда вирустар күп икән. Әллә ҡайҙағы йәһәннәмдә ятҡан тропиктан беҙгә килеп еткәнсе улар сереп, әллә нәмә эшләп бөтөр ине. Ә беҙҙә улар һары ғына тышлы булып, күҙ ҡыҙҙырып ята магазин, баҙар кәштәләрендә. Баҡтиһәң, уларҙы йәшел килеш йыйып, ҡумталарға тултыралар ҙа экспортҡа оҙаталар. Ә инде тәғәйен урынға килеп еткәс, махсус газ камераларында тыштарына шундай матур һары төҫ ингәнсе тоталар. Бындай газ камералары Башҡортостанда ла бар, имеш.

Йәки алманы ғына алайыҡ. Матур килеш һаҡланһын өсөн уның тышын парафин менән эшкәртәләр. Шуға ла һатыуҙан алынған, айҙар буйы ятып та төҫөн үҙгәртмәгән алманың тышын әрсеп ашарға тәҡдим итәләр. Һанай китһәң, күп инде ул. Нәфсене тыя алмай ашайбыҙ ҙа, һуңынан, ҡайҙан, нисек сирләп киттем икән, тип баш ватабыҙ...

Ғәҙәттә, магазиндарҙа һөт продукттарын, анығлап әйткәндә, сырҙарҙы, өлөштәргә бүлеп, махсус полиэтиленға төрәләр һәм уларға ауырлығын, датаһын, ғөмүмән, ниндәйҙер мәғлүмәт булған ҡағыҙ киҫәге йәбештерәләр. Яҡшылабыраҡ ҡараһаң, уларҙың ҡайһы берҙәренә бер нисә ҡат ҡағыҙ йәбештерелгән була. Ювелирҙар эшләгән тиерһең, шундай теүәллек менән башҡарыла улар, шулай ҙа бер нисә ҡат икәнен күрергә мөмкин.

Киҫкен эсәк инфекцияһы ғына етмәгән, ошо көндәрҙә Күгәрсен районында бер ир ат ите ашап, сирләп китеп дауаханаға эләгә. Ундағы симптомдар буйынса себер язваһы ихтималлығы күҙаллана. Ярай әле, диагноз раҫланмай. Ә бит һирәк булһа ла был сир ҙә килеп сығып, хәүефләндереп ҡуя.

Быйылғы йыл эҫелеге менән йонсотһа ла, ҡаты сир-сырхауһыҙ тигәндәй үтеп бара. Юҡһа, яҙғыһын шау-шыу күтәрмәһәк тә, йыл һайын ниндәйҙер район, бигерәк тә көньяҡ райондар, һыу аҫтында ҡала. Быйыл да был хәл ҡабатланды. Ә инде батып үлгән мал-тыуар әллә ҡайҙа китмәй, улар йылға төбөндә мәйет ағыуы сығарып ята бирә. Уларҙы һуңынан эҙләп, йылғаларҙы таҙартыу алып барыламы икән - билдәһеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тамаҡ тамуҡҡа төшөрә, тиһәләр ҙә, нимә ашағаныңды, нимә эскәнеңде белеү хәйерлерәк. Шуға аҙыҡ-түлек һатып алғанда уның яраҡлылыҡ ваҡытын, составын ҡарап алырға кәрәк. Өйгә ҡайтып, ҡаптарҙы аҫҡас, продукция шик тыуҙыра икән, уны ҡулланмауың хәйерлерәк. Бик булмаһа, кире алып барып бирә алаһығыҙ. Ҡулланыусылар хоҡуҡтарын яҡлау органдары әйтеүенсә, ҡулланыусы һәр ваҡыт хаҡлы!**

**Зәйтүнә НИҒМӘТЙӘНОВА.**

**• Йылдың тәүге яртыһында Башҡортостанда киҫкен эсәк ауырыуҙары менән сирләү күрһәткесе 9 процентҡа артҡан һәм 100 мең кешегә 226,8 кеше тәшкил иткән.**

**• Сальмонеллез менән сирләү - 42, билдәле этиологиялы киҫкен эсәк ауырыуҙары менән - 11, асыҡланмаған этиологиялы киҫкен эсәк ауырыуҙары менән сирләүселәр 15 процентҡа артҡан.**

**• Эсәк инфекцияһы үҫеше 63 административ территорияның 34-ендә теркәлгән.**

**• Өфө, Стәрлетамаҡ, Архангел, Мишкә районларында сирләүселәр һаны дөйөм республика күрһәткесенән 40 - 75 процентҡа артып китә.**

**• Сальмонеллез менән ауырыусылар былтырғы ошо кимәл менән сағыштырғанда 42 процентҡа артып, уртаса Рәсәй күрһәткесенән 39 процентҡа күберәк. Бындай күренеш Әлшәй, Иглин, Көйөргәҙе, Өфө районларында, Өфө, Бәләбәй, Күмертау ҡалаларында теркәлгән.**

**• Иң бысраҡ микроорганизмдар булып кондитер изделиелары, һөт һәм һөт продукциялары, балыҡ һәм балыҡ продукттары тора.**

**• Июлдән алып аҙна һайын киҫкен эсәк ауырыуҙары менән 500 самаһы кеше сирләй.**

*БЕҘ - БАШҠОРТТАР!*

# АТАЙ ҺҮҘЕ...

## хәтер яңырта

**Редакцияға ул күңелендә ташҡан, урғыған хис-тойғолары йоғонтоһонда килеп инде. Сығышы менән Борай районының хәҙер Вострецово тип аталған Ҡаҙансы ауылынан булған Венера апай Фәйзуллина юҡҡа ғына килмәгәндер, тип уйлап, яйлап ҡына төпсәшеп, сәбәптәрен эҙләй башланым.**

- Беҙҙең ауылда мәктәптә рус телендә уҡыттылар, артабан да уҡыу рус телендә дауам итте. Шуға ла туған телгә, үҙ тарихыбыҙға ҡыҙыҡһыныу булмағандыр. Бына әле, йылдар үткәс, олоғая килә атайымдың әйткән һүҙҙәре, һөйләгәндәре хәтергә төшә башланы, күңелде өйкәне. "Беҙ - башҡорт", ти торғайны ул. Ә совет заманында ошо тамырҙарға балта сабып, нәҫел-нәсәбен белмәгән кешеләрҙе тәрбиәләргә тырыштылар.

Йоҡоға талған хәтерем уянып, мин дә тамырҙарымды барлай башланым, Әнүәр Әсфәндийәровтың китабын энәһенән-ебенәсә уҡып, анализлап сыҡтым. Баҡтиһәң, беҙҙең ауылда элек-электән башҡорттар йәшәгән, һуңынан рустар күсеп килеп ултырып, рус ауылына әйләнеп киткән икән. Ике, өс быуынға тиклем генә аралашҡас, башҡаларҙы белмәйбеҙ ҙә, һөйләтергә ололар ҙа юҡ. Шуға бына Рәсәй Фәндәр академияһының Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына шәжәрәмде төҙөргә заказ бирҙем.

Быйыл Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары йәмғиәте менән Борай районына барып, осрашыуҙар үткәргәйнек. Шунда үҙем уҡыған мәктәпкә шәжәрәмдең күсермәһен берермен тип вәғәҙә иттем. Алла бойорһа, вәғәҙәмде үтәйәсәкмен, - тип һөйләп китте Венера апай.

Башҡортостан Республикаһы етәкселегенә, Шәжәрә байрамдарын үткәреү тураһында указ ҡабул итеп, моңһоҙҙарҙы уйланырға, маңҡортлоҡ һаҙлығына бата барыусыларҙы һөйрәп сығарырға этәргес биргән, күңелдәрҙә дәрт уятҡан саралар уҙғарыла башлауына сикһеҙ шат Венера ханым.

- Элек бит баш ҡалала башҡортса һөйләшкән кешеләрҙе осратыуы ауыр, осраһа ла, уларға сит планета кешеләренә ҡараған кеүек ҡарайҙар ине. Хәҙер халыҡтың үҙаңы уяна, улар тамырҙарын барлай, - ти ул. - Улым да рус мәктәбен тамамланы, балалар баҡсаһынан, мәктәптән, "Меня обозвали татарином, больше не пойду", тип илап ҡайта ине. Хәҙер ул да башҡортса өйрәнергә тырыша.

Ҡайҙа ғына эшләмәһен, ниндәй генә бурыс башҡармаһын, уны һәр саҡ намыҫ менән үтәп, хаҡлы ялға сыҡҡан Венера Ибраһим ҡыҙы был юлы ла алдына алған маҡсатына өлгәшер. Өлгәшеп кенә ҡалмаҫ, ауылдаштарының, райондаштарының да үҙ асылына ҡайтыуына ярҙам итер.

**Земфира ЙӘНТҮРИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ Ағымдағы йылдың ете айы эсендә "Өфө" аэропорты 840 мең пассажирҙы хеҙмәтләндергән. Сауҙа-клиринг палата мәғлүмәте буйынса, Рәсәй аэропорттары рейтингында Өфө аэропорты туғыҙынсы урында тора. Төркиә,Мысыр, Испания, Кипр, Гоа кеүек популяр туристик йүнәлештәргә Тунис өҫтәлгән. Өфөнән хәҙер Нягань, Төмән, Ханты-Манси ҡалаларына осорға була, Ереванға ла рейс асылған. Көҙ Душәнбе һәм Худжанд ҡалалары йүнәлешендә самолеттар пассажирҙарҙы хеҙмәтләндерә башлаясаҡ. Бынан тыш, 24 сентябрҙән "Өфө-Дубай" маршруты асылыуы көтөлә.

✓ Ағымдағы йылдың ете айы эсендә республика прокуратураһы бүлексәләре тарафынан тыйылған тартыу ҡатнашмалары әйләнеше менән бәйле 187 енәйәт эше ҡуҙғатылған. БР Прокуратураһы хәбәр итеүенсә, 85 эш судҡа тапшырылған, уларҙың 30-ы буйынса ҡарар ҡабул ителгән.

✓ Ирәмәл тауына етди хәүеф янай. 21-22 августа Магнитогорск ҡалаһының "Леший" клубы Ҙур Ирәмәл башына джиптарҙа ярыш ойоштороға йыйына. Был туралағы мәғлүмәтте улар үҙҙәренең сайтында урынлаштырған. Урындағы экологтар ҡеүәтле автотехниканың тәбиғәткә килтергән зыянын иҫәпләп бөтөп булмаясаҡ, ти. Етмәһә, бындай сараларҙан һуң янғын сығыу хәүефе лә бар.

✓ БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев үҙенең блогын (http://kbtolkachov.livejournal.com/) асты. Беренсе яҙмала билдәләнелеүенсә, киләсәктә йәмғиәттә сәйәси диалог булдырыу һәм уны контролдә тотоу маҡсатында сәйәси блогтар ҙур мөмкинлектәр бирәсәк.

✓ livejournal.com. ресурсында БР мәғариф министры Зиннәт Аллаяров та үҙенең блогын булдырған. "Асыҡтан-асыҡ һөйләшеүҙәр алып барыу өсөн республика мәғариф блогы асыу теләге күптән бар ине", - тип белдерә З. Аллаяров һәм тәүге темаларҙың береһе итеп август педсоветын һайлаған. Блогтың адресы: http://allayarov.livejournal.com/

✓ Мәләүез ҡалаһында республика хәләл тауарҙар күргәҙмә-йәрминкәһе үтте. Унда Башҡортостан, Силәбе, Белгород өлкәләре етештереүселәре үҙ тауарҙарын тәҡдим итте. Күргәҙмә сиктәрендә БР Диниә назаратының хәләл стандарт комитеты ағзаларының дөйөм йыйылышы үтте.

## ЕТЕ РАЙОН

**Дим.** Тимур командаларының заманы күптән үткән, хәҙер йәштәр икенсе төрлө, ҡиммәттәр ҙә үҙгәргән кеүек булһа ла, "Вместе" республика хәрәкәтенең рәйесе А. Мартынов етәкселегендәге "БР-ҙың Өфө ҡалаһы һәм Өфө районы волонтерҙары" ойошмаһы йәштәре бының киреһен раҫлай. Улар аҙна һайын ниндәйҙер ҙур эш башҡара. Август башында волонтерҙар "Дим-2" станцияһындағы күлдең тирәяғын тәртипкә килтерҙе. Ял итеүселәрҙән ҡалған сүп-сар 35 тоҡ булды.

**Калинин.** Йылҡыбай, Федоровка, Самохваловка, Базилевка ауылдары халҡының көнкүреш ҡалдыҡтарынан ҡотолоу буйынса үҙенсәлекле мөмкинлеге барлыҡҡа килде. Халыҡҡа бары тик "Каланы таҙалауҙың махсус автохужалығы" муниципаль унитар предприятиеһы маркировкаһы булған ҡыҙғылт-һары ҡапсыҡтар һатып алып, уны сүп-сар менән тултырып, сүп түгеүсе машина үткән маршрут юлына сығарып ҡуйырға ғына кәрәк. Махсус машина йәкшәмбе иртәнге һигеҙҙән туғыҙға тиклем йөрөй. 110 литрлы пакет 28,50 һум тора. Был суммаға сүп-сарҙы сығарыу һәм уны утилләштереү хаҡы ингән.

**Ленин.** Нижегородкала яңы магазин асылды. Ул - был биҫтәләге төүге ҙур проект. Халыҡҡа уңайлы булһын өсөн уның беренсе ҡатында аҙыҡ-түлек магазины урынлашҡан, икенсе ҡатында көнкүреш химияһы бүлеге һәм бөҙрәхана асыу планлаштырыла. 250 квадрат метр майҙанды биләгән "Радуга вкуса" магазины Рига, Благовар, Кирзавод урамдары киҫелешендә урынлашҡан.

**Совет.** "УЗЭМИК" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең мәҙәниәт һарайы эргәһендә хеҙмәт, һунар һәм декоратив нәҫел эттәренең күргәҙмәһе үтте. Һуңғы ун йылда әллә күпме махсус сығарылған тоҡом эттәре барлыҡҡа килеүен, тышҡы ҡиәфәтенә ярашлы, уларҙың темпераменты, характеры, хатта интеллекты үҙгәреүен дә асыҡланы был сара.

**Орджоникидзе.** Район хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияның ултырышы үтте. Унда төҙөлөш ойошмаларын, дауалау-профилактика учреждениеларын, дарыуханаларҙы тикшереү барышында асыҡланған хаталарҙы төҙәтеү буйынса башҡарылған эштәргә йомғаҡ яһалды. Шулай уҡ алтаҡталарҙа, бина эсендәге күргәҙмә әсбаптарҙа, фирма бланкыларында, штамптарҙа даими осраған хаталар тураһында ла һүҙ булды. Тикшерелгән ойошмалар етәкселеге менән айырым һөйләшеү буласаҡ һәм уларға хаталарҙы төҙәтеү өсөн ваҡыт биреләсәк.

**Октябрь.** 22 августа "Ҡашҡаҙан" мәҙәниәт һәм ял паркында үҙенсәлекле байрам ойошторола. Ул Рәсәй Федерацияһы флагы көнөнә арналасаҡ.

## ...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТӘН СӘЛӘМӘТЛЕГЕН...

## байрамда ла хәстәрлә




**Һәр йыл августың икенсе шәмбеһендә Рәсәйҙә Физкультурниктар көнө билдәләнә. Быйыл был дата үҙенең 70 йыллыҡ түңәрәк юбилейы менән дә иҫтәлекле. СССР Халыҡ комиссарҙары советының ҡарары менән булдырылған был көн Советтар Союзында спортты үҫтереүгә, совет спортсыларының танылыу яулауына этәргес бирә. Хәҙер инде тарихта ҡалып, беҙ телевизор экрандары аша ҡара-аҡ төҫтә генә күргән демонстрациялар, төрлө тантаналар спортсыларҙан башҡа үтмәүенә инанабыҙ.**

Ошо иҫтәлекле датаны ҡаршылау алдынан Өфө ҡала округы хакимиәтендә үткән матбуғат конференцияһында хакимиәт башлығы урынбаҫары Алексей Ощепков планлаштырылған саралар, эшләнгән эштәр менән таныштырҙы. Физкультурниктар көнөнә Өфөлә 8 универсаль спорт майҙансығы төҙөү ҡаралһа, әлеге ваҡытҡа уның бишеһе әҙер. Был майҙансыҡтар һәр районда булһа, Орджоникидзе районына иһә икәү тура килә. Был йәһәттән иғтибар ҡала янындағы ҡасабаларға ла бүленгән. Шундай ҡоролмалар Нуғай һәм Тимашево ауылдарында ла төҙөлгән.

Әлеге ваҡытта трамплиндарҙы проектлау эштәре бара. Бында инде 90 метрлыҡ трамплинды, күтәрелеү ҡоролмаһын эшләүгә федераль бюджеттан аҡса бүленгән. Киләсәктә 120 метрлы трамплин төҙөү ҙә күҙаллана.

Билдәләнеүенсә, киләһе йылдан Машина төҙөүселәр паркында ла, йәштәрҙең бөгөн нимә менән ҡыҙыҡһыныуын өйрәнеп, экстремаль спорт төрҙәре (мәҫәлән, скейтборд) буйынса бер майҙансыҡ эшләү ихтималлығы бар.

Әлеге ваҡытта мегаполиста 31 бассейн иҫәпләнә. Киләсәктә Рәми Ғарипов исемендәге Башҡорт республика гимназия-интернаты туҡталышында, Софья Перовская урамында һәм Сипайлово биҫтәһендә тағы берәр бассейн төҙөләсәк.

Матбуғат конференцияһында ошо көндәрҙә үтәсәк саралар менән дә таныштырҙылар. Физкультурниктар көнө сиктәрендә "Динамо" стадионында ҡала округы предприятиелары һәм ойошмалары араһында Спорт фестивале уҙғарыласаҡ. Унда 30-ға яҡын предприятие һәм ойошма ҡатнашасаҡ. Сара программаһына мини-футбол, волейбол, йөҙөү (эстафета), шахмат, бильярд, өҫтәл теннисы, еңел атлетика эстафетаһы һәм арҡан тартыу кеүек ярыштар ингән. Еңеүселәр иҫтәлекле кубоктар, миҙалдар менән бүләкләнәсәк.

14 августа Ҡашҡаҙан мәҙәниәт һәм ял паркында күптән түгел генә асылған Урам баскетболы үҙәгендә "Оранжевый мяч - 2010" Бөтә Рәсәй турниры үтәсәк. Урам баскетболы - йәйгеһен егеттәрҙе генә түгел, ҡыҙҙарҙы ла үҙенә ылыҡтырған иң популяр һәм күмәк кешене йәлеп иткән уйындарҙың береһе. Мендәрсә йәш кеше шул уйын тип йән ата. Тимәк, улар хәҙерге ҡала тормошонон кире йоғонтоһона бирелмәй. Икенсе яҡтан, бында музыка ла тыңларға мөмкин. Әйткәндәй, ошо шәмбелә 11 сәғәттә башланасаҡ ярыштар менән бер рәттән, хип-хоп йүнәлешендәге рэп фестивален үткәреү ҙә ҡаралған. Унда Өфөнөң популяр 106 Клан, MC Высоцкий, "День и Ночь" һ.б. төркөмдәре сығыш яһаясаҡ.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## БЕЛЕМ УСАҒЫ

# ИҒТИБАР ҮҘӘГЕНДӘ - балалар баҡсалары

**Башҡортостан балалар тыуыу һәм әсәлек капиталын алыусылар һаны буйынса Рәсәйҙә алдынғы урындарҙа иҫәпләнә. Республикала яңы мәктәптәр әленән-әле сафҡа индерелә торһа ла, балалар баҡсалары менән хәл һаман киҫкен ҡала, сират көтөүселәр һаны ла йылдан-йыл арта бара. Республика Президенты был проблемаға тәүҙә үк иғтибар итеп, үҙенең рәсми блогында: "Ни өсөн мәктәптәр төҙөлә, ә балалар баҡсалары асылмай? Ошо шарттарҙа нисек кешеләрҙе күберәк бала табырға өндәмәк кәрәк?" тип яҙғайны. Яңыраҡ Рөстәм Хәмитов "Балалар баҡсаһы" махсус республика программаһы буйынса эш башланыуы тураһында белдерҙе.**

БР Президенты балалар баҡсалары менән хәл киҫкен булғанда төбәктең демографик үҫеше ыңғай яҡҡа үҙгәрмәйәсәген белдереп, министрлыҡтарға яңы балалар баҡсалары төҙөү һәм элеккеләрен кире ҡайтарыу тураһында программа ҡабул итергә ҡушты. Балалар баҡсаларына булған сираттар кәмеү йәш әсәләргә яңынан эшкә сығырға мөмкинлек бирәсәк, был үҙ сиратында ғаиләнең финанс етешлеген тәьмин итеп кенә ҡалмай, ә төбәк иҡтисадында кадрҙар проблемаһын хәл итеүҙә лә ҙур роль уйнаясаҡ.

Башҡортостанда 2008-2012 йылдарға иҫәпләнгән "Республикала мәктәпкәсә йәштәге белем системаһын үҫтереү" тигән маҡсатлы республика программаһы 2007 йылда уҡ ҡабул ителгәйне, әлбиттә. Уның сиктәрендә, мәҫәлән, Өфө ҡалаһында муниципаль балалар баҡсалары селтәрен киңәйтеү өсөн нимәләрҙер эшләнә, ҡайһы бер балалар баҡсаларын автономлы учреждение итеп үҙгәртеү эше лә әүҙем ҡулланыла. Өфө ҡала округы хакимиәтенән белдереүҙәренсә, әлеге ваҡытта баш ҡалала 207 балалар баҡсаһы һәм 12 башланғыс мәктәп-балалар баҡсаһы эшләй, уларҙа 36 меңдән ашыу бала тәрбиәләнә. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, әлеге ваҡытта 15 мең бала балалар баҡсаһына мохтажлыҡ кисерә. Шуға ла урындағы етәкселәр халыҡтың һорауы буйынса мәктәпкәсә йәштәге белем биреүҙең инновацион формаларын: ғаилә балалар баҡсалары, мини-балалар баҡсалары, консультатив һәм уйын үҙәктәре төҙөүҙе лә планлаштыра, ә күп балалы ғаиләләр базаһында альтернатив балалар баҡсаһы төркөмдәре баш ҡалала күптән булдырылған һәм уңышлы ғына эшләп килә.

2010 йылдың башына республикала даими йәшәүсе халыҡ һаны 4 миллион 65 мең кешегә етте, йәғни республика халыҡтың тәбиғи артымы буйынса Волга буйы округында лидерҙар рәтендә тора. БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, йылдың тәүге яртыһында тыуым һаны 3,1 процентҡа күтәрелгән. Тимәк, балалар баҡсалары менән килеп тыуған проблема, ысынлап та, тиҙ арала хәл ителешен көтә.

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓ 3 сентябрҙә Өфө ҡала округы хакимиәтенең Муниципаль милек менән идара итеү комитеты шәхси торлаҡ төҙөлөшө өсөн тәғәйенләнгән ер участкаларына аукцион үткәрә. Унда Нуғай ауылында урынлашҡан 31 лот һатыуға ҡуйыласаҡ. Иң ҡиммәтле ер участкаһының башланғыс хаҡы - 557 мең һум, уның майҙаны 2401 квадрат метр. 1424 квадрат метр майҙанлы иң осһоҙ участканың хаҡы 66 мең һум. Аукционда ҡатнашыу йәки өҫтәмә мәғлүмәт алыу өсөн 30 августа тиклем комитетҡа 9-ҙан 18 сәғәткә тиклем мөрәжәғәт итергә. Уның адресы: Октябрь проспекты, 56/3, 519 кабинет. Тел.: 279-03-59, 279-04-26.

✓ Райондарҙа башҡорт йәштәре ҡоролтайҙары үтә. Бөрйән районында ул булып үтте лә инде. Уның эшендә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы башҡарма комитеты етәкселәре лә ҡатнашты. Ошондай ҡоролтайҙар был арала Әбйәлил һәм Ейәнсура райондарында ла үтәсәк.

✓ Бынан 30 йыл элек - 1980 йылдың 12 августа Өфө "миллионлы" ҡалаға әүерелә. Миллионынсы сабыйҙары бирәү генә булған башҡа миллионер ҡаларҙан айырмалы рәүештә, БАССР етәкселеге Өфөлә бындай сабыйҙар өсәү булырға тейеш, тип хәл итә. Башҡорт, татар һәм рус милләтле "миллионынсы" балаларға һәр ваҡыт кәрәгенән артыҡ иғтибар бүленә, ә бына хәҙер 30 йәшкә еткән "миллионынсылар" журналистар менән аралашырға тырышмай.

✓ 4-5 сентябрҙә баш ҡаланың Йәштәр мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда ("Аграр университет" туҡталышы) VII махсуслаштырылған башҡорт балы сауҙа-күргәҙмәһе уҙасаҡ. Бал йәрминкәһе барышында "Иң әүҙем район", "Иң сифатлы бал", "Иң яҡшы йыһазландырылған һатыу нөктәһе" номинациялары буйынса конкурстар ойошторола. Еңеүселәргә Совет районы хакимиәтенең дипломдары һәм ҡиммәтле бүләктәр тапшырыласаҡ.

✓ Рязань өлкәһенең янғындан зыян күреүселәре өсөн Өфөнән гуманитар ярҙам йөгө оҙатылды. Гуманитар ярҙам тураһында ишетеү менән 5 августан 12-нә тиклем өс меңдән ашыу өфөлө әйберҙәр ҡабул итеү пунктына мөрәжәғәт итте. Әле Нижний Новгородтың янғындан зыян күреүселәре өсөн мәрхәмәтлек акцияһы иғлан ителгән. Йөк киләһе аҙнала оҙатыласаҡ.




# ОЛОЛАР ӨСӨН НӘСИХӘТ

## Тырышлыҡ ҡағиҙәһе

• Тәрбиәләнмәгән һәм эшләнмәгән ерҙә ғәҙәттә булғандарынан бер нәмә лә етешмәгән кеүек эшһеҙ тороусы аҙам балалары ла бер файҙа килтермәйҙәр. Шуның өсөн донъяла мәңге торасаҡ, әхирәткә иртәгә китәсәк кеше кеүек тырышып йәшәгеҙ.

• Йәнәб-и Аллаһ ғәмәл менән бойорған һәм ғәмәлгә күрә яза (бүләк) бирергә вәғәҙә иткән. Бәндәнең вазифаһы - Аллаһы Тәғәлә үҙе бойорған әмерҙәрен башҡарыу өсөн булған өсөн, өҫтөгөҙгә төшкән ғәмәлдәрҙе ихлас һәм тырышлыҡ менән үтәгеҙ. Улар ҡабул була йәки булмаясаҡ, Йәнәб-и Аллаһтың бәндәләрҙең ғибәҙәттәренә һис мохтаж түгел тип һөйләү, ялҡаулыҡҡа быларҙы сәбәп итеү кеүек нәмәләр менән шөғөлләнмәгеҙ. Сөнки бындай нәмәләр бәндәнең вазифаһы түгелдер.

• Һис бер нәмәһе юҡ кеше фәҡир түгел, һөнәре һәм тырышлығы юҡ кеше фәҡирҙер. Үҙе өсөн тырышҡан кешегә эш һәр ваҡыт ярҙам итер. Тырыш кеше матур йәшәр, ялҡау кеше аслыҡтан үлер. Был донъяның тормошо һәр кемдең үҙ ғәйрәтенә аманат ителгән. Шуның өсөн донъяла тороу һәм көн үткәрер өсөн һис кемгә ышанмайынса, үҙ ғәйрәтегеҙгә өмөт итегеҙ һәм үҙегеҙ өсөн үҙегеҙ тырышығыҙ.

• Ризыҡ ни ҡәҙәре бүленгән һәм билдәләнгән булһа ла, уны эҙләү һәм теләү бәндәләргә бойоролғандыр. Шуның өсөн үҙ ризығығыҙҙы үҙегеҙ эҙләгеҙ. Һис кемгә күктән алтын яуғаны һәм ерҙә үлән үҫкән кеүек үҫеп торғаны юҡтыр.

• Зирәк булһағыҙ, зирәклеккә ышанып, йәки һөнәрле булһағыҙ, һөнәргә таянып, эшһеҙ һәм хәрәкәтһеҙ тик ятмағыҙ. Сөнки тырышыу күрелмәгән һәм хәрәкәт ителмәгән хәлдә, зирәклек һәм һөнәрҙән файҙа хасил булмай.

• Шәриғәт ҡушҡандан тыш ялҡаулыҡ һәм нәфсе артынан йөрөү аҙам балаһына ауырыу килтерә, тәбиғәтен боҙа һәм фәҡирләндерә. Шуның өсөн бер ваҡытта ла эшһеҙ тормағыҙ, ялҡаулыҡ һәм шөһрәт әсире булмағыҙ. Аҡылығыҙҙы буш һәм эшһеҙ аҫрамағыҙ.

• Донъяла үткән көндәрегеҙҙә, әхирәттә файҙаһы тейәсәк ғәмәлдәргә иғтибар итегеҙ. Яҡшы белегеҙ, донъяла туҙан ҡәҙәр изгелек иткән кеше әхирәттә яҡшы яза (бүләк) күрер, туҙан ҡәҙәр уҫал ғәмәл иткән кеше әхирәттә уҫал яза күрер. Һәр кемдең ғәмәле әхирәттә билдәле булыр, һәр ғәмәлдең язаһы (әжере) ҡаршы килеп алыр.

• Донъя сәфәрендә булған ваҡытта үҙегеҙгә кәрәкле эштәрҙе туҡтатып тормағыҙ. Сөнки донъя ел тиҙлеге менән үтер, вафат көнөнә тиклем файҙалы эштәр өсөн тырышығыҙ. Һис ялыҡмағыҙ. Үҙегеҙҙән һуң матур исем ҡалдырыу өсөн эшләгеҙ. Сөнки аҙам балаһы вафат булғас та матур исеме вафат булмайынса мәңге ҡалыр.

## Һөнәр һәм сәнғәт әҙәбе

• Эшегеҙҙе ашыҡмайынса, матур һәм тейешлесә, һәр нәмәһен үҙ ваҡытында эшләгеҙ. Фекерегеҙҙе боҙасаҡ әйберҙәрҙән һаҡланығыҙ һәм саралар күрегеҙ. Бер эште башлағас, матурлап тамамларға тырышығыҙ. Сөнки эште башлап юлда ҡалдырыуға ҡарағанда, һис башламай тороу тағы ла хәйерлерәк.

(Дауамы бар).

АТА-ӘСӘЛӘР ЙЫЙЫЛЫШЫ



**Бөгөн бала тәрбиәләү эше менән кем генә, ниндәй генә органдар, учреждениелар шөғөлләнмәй ҙә, был өлкәлә ниндәй генә закондар ҡабул ителмәй! Бала тәрбиәһе бөтә замандарҙа ла оло хәстәрлек булдымы икән? Әллә ул бөгөн генә шулай үткер торамы? Яңы уҡыу йылын башлар алдынан, мәғариф буйынса кәңәшмәләр барған мәлдә ошондай һорау менән бер нисә кешенең башын ҡатырып алдыҡ.**

# ҮҘ ЮЛЫБЫҘ ҠАЙҘА,

## ниңә барыһы ла америкаса?

**Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы, педагог:**

- Тәрбиә мәсьәләһе бөгөн айырыуса киҫкен тора. Уның сәбәптәре күп әлбиттә, шуларҙың береһе - мәғариф системаһында тәрбиә эшенең һүнеп ҡалыуы, уның дөйөм белем биреү процесы менән бергә алып барылмауы. Һуңғы йылдарҙа, ысынлап та, мәктәптәрҙә балаларға фәҡәт дөйөм белем биреү эшенә генә иғтибар ителә, ә тәрбиә юҡ кимәлендә. Был шунан да асыҡ күренә: ғәҙәттә, йыл да августа үтә торған мәғариф кәңәшмәләрендә, башҡа отчет документтарында мәктәпте нисә бала миҙалға бөтөрөүе, нисәүһенең юғары уҡыу йортона уҡырға инеүе тураһында билдәләп кителә, тимәк, мәғариф учреждениелары эше ошо критерийҙар буйынса ғына баһалана. Ә илебеҙҙең, республикабыҙҙың ябай граждандары булараҡ, артабан элекке уҡыусылар ҡайҙа һәм нисек эшләп йөрөй, ниндәй ғаилә ҡорған, балаларын нисек үҫтерә, йәғни тәрбиәләй - был хаҡта беҙ бер ни белмәйбеҙ. Ата - улды, инә ҡыҙҙы белмәгән был заманда быуындар бәйләнеше лә, туғанлыҡ ептәре лә өҙөлдө. Юҡҡа ғынамы ни, юғары белемле хулигандар, эскеселәр, әрәмтамаҡтар күбәйҙе йәмғиәтебеҙҙә. Белем булһа ла, тәрбиә юҡлыҡтан бит был! Олатайҙар, өләсәйҙәр, ырыу тәрбиәһе өҙөлдө. Урбанизация, глобалләшеү баҫып алып килә. Ошондай заманда бала үҙ ҡарамағына яңғыҙ тороп ҡалды. Ғаиләлә атай ҙа, әсәй ҙә булған хәлдә лә, яңғыҙ үҫәләр, сөнки өлкәне менән кеселәрҙең йәш айырмалары ҙур, шуға бергә уйнап үҫмәйҙәр; ата-әсә көнө буйы эштә. Һеҙөмтәлә туғанлыҡ хистәре, унан ҡала халҡың менән бәйләнеш һәм тарихи хәтер ептәре шулай өҙөлә.

Бөгөнгө көндә тәрбиә эше халыҡ педагогикаһынан айырылды - бөтә бәлә шунда. Дөрөҫ, башҡорт мәктәптәрендә һуңғы 18 йылда халыҡ педагогикаһына, тарихыбыҙ, ауыҙ-тел ижады, йолаларыбыҙ һәм рухиәтебеҙҙең аҫыл хазиналарына нигеҙләнеп эшләнгән "Тормош һабаҡтары" программаһы уҡытылып килде, ләкин бына Мәскәү чиновниктары эш айышына төшөнөп тормайынса, был фәнде милли компонент иҫәбенә индереп, ҡыҫҡартып ҡуйҙы. Киреһенсә, көсәйтергә кәрәк бит уны. Бөтә милли (рус, татар, сыуаш һ.б.) мәктәптәрҙә лә һәр халыҡтың үҙ педагогикаһы нигеҙендә эшләнгән ошондай предмет булдырырға кәрәк, тип иҫәпләйем, сөнки дөйөм әхлаҡ ҡанундарынан тыш, һәр халыҡтың үҙенә генә хас аҫыл йәшәйеш өлгөләре, ғәҙәттәре, холоҡ-фиғел, рухиәт хазиналары, илһөйәрлек, телһөйәрлек традициялары бар. Әхләк, эске әҙәп тойғоһо, рухи байлыҡ, кешене кеше иткән бөтә сифаттар, быуаттар буйы һыналып килгән халыҡ педагогикаһында һалынған һәм һәр халыҡтың үҙенә генә хас тәрбиә ҡанундарын бер ниндәй ҙә уртаҡ, дөйөмләштерелгән педагогика алмаштыра алмай. Бөгөнгө көндә тәрбиә мәсьәләһе тураһында һүҙ сыҡҡанда, бына ошоларҙы онотторға ярамаҫ ине.

**Илшат ӘМИНЕВ, 83-сө Михайловка һөнәрселек училищеһы директоры:**

- Нисек кенә парадоксаль тойолмаһын, миңә бөгөн илдә барған күп процестар тәрбиәгә ҡаршы йүнәлтелгән һымаҡ булып китә. Мәҫәлән, рекламаны ғына алып ҡарайыҡ. Эшкә, мәктәпкә барған юлда бағана һайын эленгән һыра рекламалаусы таҡта, плакаттар сыбарлай ҡала урамдарын. Өйгә ҡайтһаң, телерекламаларҙан тынғы юҡ. Шунан меҫкен үҫмер ни эшләргә тейеш инде? Әлбиттә, унда тәмләп ҡарау теләге тыуа, аҙаҡ өйрәнеп китәләр.

Бөгөн компьютерлаштырыу заманында тәрбиә, әхләҡ ҡанундарына етди хәүеф янай: бала глобаль ау тотҡоно сифатында үҙ иркенә ҡуйылды, Интернеттың виртуаль донъяһында йәшәй. Көс ҡулланыу, һуғыш, үлтереш һәм башҡа төр әхләҡһеҙлек күренештәре, порнофильмдар ҡарай. Ата-әсә көнө-төнө эштә. Бына ошондай шарттарҙа ниндәй тәрбиә тураһында һүҙ булыуы мөмкин? Бар, әлбиттә, үҙҙәренең матур ғаилә өлгөһөндә яҡшы, тәртипле балалар тәрбиәләүсе ата-әсәләр ҙә, тик улар бик аҙ. Шуға ла бөгөн балаларҙы физик яҡтан ғына түгел, рухи йәһәттән дә сәләмәт итеп тәрбиәләү айырыуса мөһим. Уларҙың буш ваҡыты ҡалмаһын, төрлө секцияларға, ярыштарға, олимпиадаларға йөрөһөн ине балалар. Ә быны өсөн беҙҙә ярайһы һәйбәт шарттар булдырылған: һәр район, ҡалаларҙа спортһауыҡтырыу комплекстары төҙөлгән.

Үҙебеҙҙең уҡыу йортонда беҙ тап ошо йүнәлештә эшләргә тырышабыҙ. Михайловка баш ҡалабыҙ янында ғына булыуға ҡарамаҫтан, Өфөнөн спорт инструкторҙары, физкультура уҡытыусылары бик теләп килә һалмай беҙгә: эш хаҡы бигерәк бәләкәй. Әле бына йүнен табып, училищела уҡыусы 20-30 егетте көрәш төрҙәренә ылыҡтырмаҡсыбыҙ. Һирәкләп булһа ла театрҙарға йөрөйбөҙ. Үҙебеҙҙә мәҙәни-тәрбиәүи сараларҙы йәнләндерергә тырышабыҙ.

**Сәбилә СӨЛӘЙМӘНОВА, педагогия фәндәре кандидаты:**

- Ата-әсә балаһын тәрбиәләүҙе тулыһынса мәктәпкә генә ҡайтарып ҡалдырҙы ла ҡуйҙы хәҙер. Ә бит ғаилә тәрбиәһе - иң мөһиме. Мәҫәлән, үҙемдең өләсәйем миҫалынан сығып әйтәм: мин ғүмер буйы ул биргән һабаҡтарҙы тотоп йәшәйем. Өлкәндәрҙең, ир-аттың юлын ҡыймау, буш биҙрәләр менән кеше юлына сыҡмау, юҡҡа-барға һыу, ризыҡ түләфләмәү, тәбиғәтте, йылғаны күрәләтә бысратыуға юл ҡуймау һәм башҡа шуның кеүек бәләкәй генә тәртип өлгөләренә ҙур мәғәнә һалынған, улар шуныһы менән ҡиммәт. Әхләк ҡиммәттәре, әҙәп ҡанундары бик күп, борон уларҙы тылҡыған том-том китаптар булмаған, улар халыҡ аҡылына яҙылған. Халыҡ балаһы тәрбиәләүгә бөтә аҡылын һалған. Совет осоронда ана шул халыҡ тәрбиәһен бик һаңға һүкманылар, бушбоғаҙ атеистар үҫтерҙеләр. Әле бына шул идеологияның әсе емештәрен татыйбыҙ, сөнки тап ана шул совет осоронда халҡыбыҙ тарихын да, әсә телен дә, рухи ҡиммәттәребеҙҙе лә, шәжәрә тамырҙарын да белмәгән, һаңға һүкмаған нигилистар, манҡорттар барлыҡҡа килде, ана шулар быуындар бәйләнеше өҙөләүгә килтергән сәбәптәрҙең береһе булып торҙо ла инде. Бындай хәлдән үҙ асылыбыҙға ҡайтыу ғына ҡотҡарасаҡ беҙҙе.

**Асрар БАЙҒОТЛИН, күп балалы ғаилә башлығы:**

- Йәшәйешебеҙҙең әлеге осорон арҡа һөйәкһеҙ организмға оҡшатам мин. Ә бит кешене кеше итеүсе иң элек - ул аҡыл һәм әхлаҡ ҡиммәттәре. Беҙ, күрәһең, үҙ аҡылыбыҙҙы юғалтҡанбыҙ: һәр нәмәлә, һәр өлкәлә ике күҙебеҙ фәҡәт Көнбайышта йә булмаһа Америкала. Улар ни ҡылана, беҙ ҙә, кәрәкме, юҡмы, маймыл һымаҡ шуны ҡабатлайбыҙ. Ә бит беҙҙең йәшәү һәм башҡа төрлө шарттар ҙа, аң-белем кимәлебеҙ ҙә, уй-фекерләү һәләте лә - ҡыҫҡаһы, менталитет бөтөнләй башҡаса. Беҙ үҙ юлыбыҙ менән барырға тейешбеҙ, "америкаса тәрбиә" иш түгел беҙгә. Бөгөн шуға күрә лә тәрбиә мәсьәләһе белем биреүгә ҡарағанда беренсел торорға тейеш, тиғән фекерҙәмен. Мәктәп баланы тәрбиәләмәй, киреһенсә, уның тәртибен, булған ғына әхлаҡ принциптарын боҙоуға, үҙгәреүгә алып килеүе бик ихтимал. Тәрбиә менән ныҡлап ҡына ғаиләлә шөғөлләнергә кәрәк, сөнки һинең балаларың үҙеңдән башҡа бөгөн берәүгә лә кәрәк түгел. Иң тәүҙә, минеңсә, замандыбыҙ афәттәренә, бигерәк тә социаль һәләкәттәргә ҡаршы тора алырлыҡ ныҡлыҡ, рухи көс һәм аҡыл йылдамлығы тәрбиәләү фарыҙ балала.

Мин быныӊ менән, мәғариф системаһы тәрбиә эшенән ситләшергә тейеш, тип әйтмәйем, ләкин беҙ күптән инде ошо факт алдына ҡуйылғанбыҙ. Ҡана ла бит, пионер, комсомол замандарында, тәрбиә эше гөрләп торһа! Әле ул саҡтағыны кире ҡайтарыу тип түгел, шундай йәнлерәк, ылыҡтырғыс тәрбиә саралары эшләү тураһында әйтәм. Тәрбиә мәсьәләһе буйынса махсус дәүләт Программаһы булдырыу күптән өлгөргән мәсьәлә. Дәүләт үҙ ҡанаты аҫтына бала тәрбиәһен алмаһа, мәктәп кенә был өлкәлә бер эш тә ҡыра алмаясаҡ.

Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА
яҙып алды.

*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш




Үҙенә һағауылдар һайлап алғас, ул төн уртаһына тиклем шундай ҡотorған хәлгә килде һәм үҙе лә, кешенән бигерәк, демонға оҡшай башланы. Был ваҡытта тауыш һәм бейеү үҙгәрә төштө, һәм ен күреүсе, иғтибарлап, бар булған тәҙрәләргә баҡты. Ахырҙа, яман енбәрейҙе күргәндәй хәлгә килеп, үҙенең мылтығын алды, маһир уҡсы ҡош атырға барғандағы кеүек, шым ғына тәҙрәгә табан яҡынлашты һәм шул тиклем ҡаты итеп атып ебәрҙе, хатта беҙ һелкенеп киткән башҡорт аласығы аҫтында баҫылып ҡалмайыҡ, тип хәүефләндек. Унан һуң ул үҙенең һағауылдары оҙатыуында, бик ҡаты ҡысҡырып, ҡулында яланғас ҡылысын тотҡан килеш, өйҙән атылып килеп сыҡты һәм, ҡылысын бер туҡтауһыҙ болғайболғай, Ыҡ йылғаһына тиклем йүгереп барҙы. Уның әйтеүенсә, яраланған ен һыуға төшөп киткән, һәм ул хужаны, шайтан, йәғни ен-бәрей башҡаса уның ҡатынына инеп йөрөмәйәсәк, тип өмөтләндерҙе. Ул ышандырырлыҡ булһын өсөн шайтан ултырған ерҙәге яңы ғына аҡҡан ҡанды һәр теләгән кешегә күрһәтте, уны беҙ ысынлап та күрҙек: ҡандың ни рәүешле барлыҡҡа килеүенә төшөнөү ауыр түгел; ул көрәш башланыр алдынан шайтан килгәнен теүәлерәк белеү һылтауы менән ихатаға сыҡҡайны. Ошо мәсхәрәне тамамлағас, ул шул уҡ төндә ҡайҙалыр ғәйеп булды; иртә менән беҙ ошо ауылды ҡалдырып киткән мәлдә сирле ҡатын да һуңғы һулышын ала ине. Уйлауымса, ошолай итеп ен ҡыуыу күбеһенсә сирлеләрҙең үлеме менән бәйле була; ен күреүсенең иптәштәре менән ҡысҡырышы һәм туҡылдауынан барлыҡҡа килгән хафаны күҙ алдына килтерһәң, ен-бәрейҙәр тураһындағы уйҙырманың ни өсөн ҡот осорорлоҡ булыуы асыҡлана.

Сирлене яҙмыш ҡарамағына тапшырып, Ҡыҙыл Мәсеттән 45 саҡырымдарҙа булған Вознесенскийҙағы ҡаҙна иҫәбендәге баҡыр иретеү заводына юлландыҡ. Был заводҡа юл Ыҡ йылғаһы буйлап бара. Ул, башҡа Урал йылғалары кеүек үк, ташлы һәм үтә шәп ағымлы булып, урманһыҙ бейек тауҙар менән уратып алынған: әммә йылға ағымы ыңғайына Ағиҙелгә яҡынлаша барған һайын, был тауҙар урмандарға байыраҡ була бара. Тауҙарҙың бейеклеге, шулай уҡ Ыҡ йылғаһының бормаланып ағыуы һәм юл ыңғайында уға ҡойоусы бәләкәй генә Мәғреш, Шишимәш (автор Шишимашь тип яҙа, бәлки, был йылғасыҡ Шишмә тип аталғандыр. - **Ред. иҫк.**), Пшәле, Шыланча йылғалары 46 саҡырым арауыҡта беҙҙе ун ике тапҡыр йылға кисергә мәжбүр итте; ике тапҡыр Күсейөклө (автор Кусеюклю, тип алған, бәлки, Кесе Ыҡлы, тип уйларға кәрәктер. - Ред. иҫк.), ун мәртәбә - Ыҡ аша.

...Йәйге юл менән заводтан 15 саҡырым алыҫлыҡта, Ағиҙел йылғаһы ярын тәшкил итеп, Шүлгән Таш тип исемләнгән бер тауҙа статский советник Рычков әфәнде тарафынан тасуирланған данлы Ағиҙел мәмерйәһе урынлашҡан...

Мәмерйәнең ниндәй булыуын һүрәтләүҙән башҡа, уның нисек барлыҡҡа килеүе тураһында ла әйтеп үтергә кәрәк. Советник Рычков әфәнденеке, тип иҫкә алынған фараздарға ярашлы, ул был мәмерйәнең бик боронғо замандарҙа кеше ҡулдары тарафынан яһалыуы хаҡында фекер йөрөтһә лә, уның бөтә дәлилдәре лә ныҡлы түгел: ысынлап та, ошондай мөһабәт нәмәне яһау мөмкин дә түгел, һәм кәрәге лә юҡ. Әгәр ҙә беҙ мәмерйәнең бүлектәренә ентекләберәк ҡараһаҡ, тауҙағы ошо дәү бушлыҡтың һыу тарафынан яһалыуы аңлашылып тора. Тәҙрәләр ауышлығы, тишелгән һәм ишек кеүек күренгән стена аралыҡтары бер бүлектең икенсеһенән һуң яралғанын, һыуҙың бер оянан сығып, икенсеһен йыуыуын раҫлап тора.

Урыны-урыны менән тәртипһеҙ рәүештә өйөлөп ятыусы таштар, һис шикһеҙ, мәмерйә барлыҡҡа килгәндән һуң күп ваҡыт үткәс кенә емерелеп төшкән. Беҙ бында Рычков әфәнде тикшергәндә булмаған таштарҙы күрҙек; уларҙың ҡайһылары аҫылынып тороп, емерелеп төшөү хәүефе тыуҙыра.

Башҡорт әкиәттәрен ситтә ҡалдырып торам: ошо еңел фекерле һәм хөрәфәттәргә ышаныусы халыҡтың әкиәти һүҙенән әллә ниндәй һығымталар эшләп булмай. Һыуҙың ни рәүешле тауға үрләүе хаҡында ла бар дөрөҫлөгөндә ышаныслы итеп әйтә алмайым: Йылкысыҡҡан күленәнме (автор "Елкичи Кичан", тип яҙа. - **Ред. иҫк.**), бәлки, башҡа йыраҡтағыраҡ урынданмы...

Юлдар үтеп сығарлыҡ булмау сәбәпле, Вознесенский заводынан һуң Ағиҙел йылғаһын ҡалдырып китергә мәжбүр булдыҡ һәм Уралдың үҙенә табан йүнәлдек, сөнки Кананикольский заводына, насар булһа ла, юл һалынған ине.

Вознесенскийҙан ошо заводҡа тиклем 50 саҡырым, ошо арауыҡ тулыһынса урман менән ҡапланған, ә ҡарағас урмандары бигерәк тә күп ине. Ошо урман нисек матур булһа, уның торошо ла шул тиклем йәлләүгә лайыҡ ине. Боҙолмаған ағас бик һирәк күренә. Яҙҙарын башҡорттарҙың далаларҙа һәм урмандарҙа үрт һалыу менән артыҡ мауығыуы бында бигерәк тә асыҡ күренә; ҡарағас, башҡа ағастарға ҡарағанда сайыры күп булғас, бик тиҙ тоҡанып китә. Шуға өҫтәп, башҡорттарҙың ҡыш көнө тейен тотоу менән бәйле сәйер һәм беҙ элек иҫәпкә алмаған ғәҙәте ошо урмандарҙы ҡырыуға аҙ булышлыҡ итмәгәндер. Ҡыуылып йөрөүҙән хәлдән тайған һәм арыған тейен йыуан ботаҡҡа ятып, башҡорт уҡтарынан йәшенә: әммә был сара ла уны ҡотҡара алмай. Башҡорттар, үҙҙәренең көсөнән бигерәк, урманды ла йәлләмәйенсә, биш тинлек табыш алыу өсөн йыш ҡына йыуан-йыуан ағастарҙы ла йығып ташлай...

Беҙҙең ҡарағастың тағы ла бер өҫтөнлөгө бар: иң ҡарт ағастар тәбенге (камедь) тип аталған ҡуйы һут бирә, быны беренсе булып доктор Валериани әфәнде билдәләгән; дәүләт Медицина коллегияһы күп тәжрибәләр нигеҙендә уны бөтә яҡлап та тиерлек Сенегал тип аталған ғәрәп тәбенгеһенә оҡшаш, тип тапҡан, ә барлыҡ айырма уның ерәнерәк төҫтә булыуынан ғибәрәт. Ул Ырымбурҙа ғәрәп тәбенгеһе ҡулланылырға тейешле барса табиби осраҡтарҙа һөҙөмтәле файҙаланыла ла инде. Бындай тәбенге үҙенән-үҙе йыуан ағас төптәрендә, бигерәк тә ағас ҡабығы һыҙырылған урында йыл һайын биш фунтҡа тиклем йыйыла...

Ҡарағаста үҫеүсе губка унда сайырҙың күп булыуы арҡаһында башҡорттарҙа эс йомшартыу сараһы сифатында ҡулланыла. Уның менән улар малдарын да дауалай: уларҙың тышҡы яраларына губка порошогын һипкәс, яра тиҙ уңалыу менән бергә, был бөжәктәрҙе яраға ҡүкәй һалыуҙан һәм ҡортлауҙан тотҡарлай.

Башҡорт ҡатындары, көнсығыш халыҡтарына эйәреп, ҡарағас сайырын сәйнәй, ә сәйнәп бөткәнен ташлай. Был сара менән улар теште́рен аҡ хәлендә тоторға тырыша...

...Шул уңайҙан Башҡортостандағы заводтарҙың башҡа заводтар алдында файҙа алыу мөмкинлеге ҙурыраҡ булыуы хаҡында ла иҫкә алып китәм. Башҡорттар, йөрөмтәл халыҡ булараҡ та, атлы булыуҙары арҡаһында ла аҙ ғына хаҡҡа мәғдән ташый һәм башҡа завод ихтыяждарын үтәй...

...Йөрөүе ҡыйын булған ерҙәрҙән 25 саҡырым үтеп, кискә табан Бөрйән тип аталған башҡорт олоҫона килеп еттек; бында ул саҡта старшина Таулыҡай етәкселек итә ине. Бөрйән атамаһы беҙҙә 1755 йылда булған Бөрйән болаһы менән бәйле хәүеф уятты: шуның өсөн беҙ бар булған һаҡланыу сараларын күрҙек, бигерәк тә ошо бунттың таш эшкәртеүсе Брагин арҡаһында килеп сығыуын иҫкә алып; беҙҙе лә таш эштәре ҡыҙыҡһындыра ине бит. Әммә хәлдәр торошо беҙҙең хәстәрҙәребеҙҙең юҡҡа ғына булыуын күрһәтте. Бөрйәндәрҙең үҙ йорттарында ла, Ҡырғыҙ урҙаһында ла ҙур еңелеүгә дусар булыуы арҡаһында бөтөнөһөнән дә ярлыраҡ йәшәүен иҫәпләмәгәндә, беҙ уларҙа бер ниндәй ҙә айырымлыҡтар күрмәнек. Әммә таштар бөтә болаға сәбәпсе булғас, беҙ был ерҙә иҫкә алынған Брагиндың төҫлө таштар приискыһында ҡалған эҙҙәрен табырға тырыштыҡ. Таулыҡай ауылынан йөҙ саҡырым тирәһендә Талҡаҫ күле буйында урынлашҡаны уның иң мөһим приискыларынан һаналған.

Шул ерҙәргә тиҙерәк барып етеү өсөн беҙ һыбай ҡуҙғалдыҡ һәм Урал аша сыҡҡас, Һаҡмар янында ҡуна ҡалдыҡ; көслө ямғыр юлыбыҙҙы дауам итеүҙе тотҡарланы. Һаҡмарға 20 саҡырымлап барып етмәҫтән, Шырлы йылғаһы янында һуҙылып сығып торған тау һыртына килеп терәлдек, ул саф кварцтан хасил булып, Ҡортло йылғаһы буйында булғанын яҙғаныбыҙса, ярыҡтары шундай уҡ ҡарағусҡыл матдә менән тулы ине; шул урындан биш саҡырымда башҡорттар исемен әйтә алмаған тау һыртында боронғо мәғдән ҡаҙыу урыны бар, бындағы кварцта баҡыр һәм ҡарағусҡыл алтын билдәләре күренә. Бына ошо осраҡлыҡ беҙгә кварцты ентекләберәк ҡарап, бөтөн Уралды хасил иткән кварцты тикшереүҙә бер генә осраҡты ла торғоҙоп ҡалдырмаҫ өсөн сәбәп булды. Урал кварцҡа, ә Һаҡмар тауҙары - шифер һәм ҡом ташҡа бай, уларға слюда киҫәксәләре күпләп ҡушылған; шуға күрә беҙ бында слюда табасағыбыҙға ныҡ өмөтләнә инек.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

*ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!*



# "ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ..."

**1812 йылдың 12 июнендә Франция ғәскәрҙәре Рәсәйгә ҡаршы һуғыш башлаған. Рус тарихсылары Беренсе Ватан һуғышы тип атаған был һуғышта рус, украин, белорус, Волга буйы һәм башҡа ерҙәр халыҡтарынан тыш, башҡорттар ҙа ҡатнашып, дошманды еңеүгә ҙур өлөш индергән. Яман-яҡшы булһа ла, уртаҡ Ватаныбыҙ һаналған Рәсәйҙе һаҡлап, яу ҡырында ятып ҡалған һәм Париж урамдарын айҡап, Елисей яландарында ҡурай тартып, дан-шөһрәт менән әйләнеп ҡайтҡан батырҙарыбыҙ бер ваҡытта ла халыҡ хәтеренән сыҡмаҫ.**

1805-1807 йылдарҙағы һуғышта Австрия, Рәсәй һәм Пруссияның берләшкән көстәренең еңелеүенән һуң, Наполеон Францияһы Көнбайыш Европа өҫтөнән тулыһынса хаҡимлыҡ итә башлай. Бының менән генә риза булмаған император Наполеон Бонапарт шул уҡ ваҡытта Рәсәйҙе баҫып алырға ла әҙерләнә.

Француздарҙың Рәсәйгә һөжүм итеү ҡурҡынысы артҡас, рус хөкүмәте ғәскәр һанын арттырыу сараһын күрә. 1811 йылдың апрелендә Ырымбур хәрби губернаторы Григорий Волконскийға башҡорттарҙан 2 полк һәм Волганың уң ярында йәшәгән, ләкин Ырымбур губернаторына буйһонған керәшен, Ставрополь ҡалмыҡтарынан 1 полк төҙөргә бойороҡ бирелә. Быға тиклем 2 типтәр, 2 Ырымбур казактары һәм 2 Урал казактары полкы төҙөлгән була.

Наполеон Рәсәйгә баҫып ингәс, император Александр I халыҡтарға манифест менән мөрәжәғәт итә. Манифест һәм губернаторҙың Ватанды һаҡларға саҡырған яҙмаһы сиркәүҙәрҙә, мәсеттәрҙә, ауылдарҙағы йыйындарҙа һ.б. ерҙәрҙә уҡыла. Бынан һуң Башҡортостанда йәшәүселәрҙән күп кенә кеше ил сигенә китергә теләк белдерә. Улар араһында, документтарҙан күренеүенсә, ағалы-ҡустылы Әбделхалик һәм Нәзир Әбделмәмбәтовтар, йорт старшинаһы (бер нисә ауылдың башлығы) Әбүталип Абдрахманов ситтән бер ниндәй ярҙам алмайынса улы менән китергә әҙер була. Ә үҫмер егет Яким Домашнев, ағалары артынан һуғышҡа ебәреүҙе һорап, Өфө пехота полкына килә. Нуғайбәк станицаһы атаманы Серебряков, үҙ иҫәбенә 53 казакты тулыһынса ҡоралландырып, изге эш эшләй. Башҡорттар һәм башҡа рус булмаған халыҡтар араһында ватансылыҡ, илһөйәрлек күтәрелештәрен күреп, 1818 йылда Сергей Глинка былай тип яҙа: "Не только стародавние сыны России, но и народы, отличные языком, нравами, верою и образом жизни, народы кочующие - и те, наравне с природными россиянами, готовы были умереть за землю русскую. Мордва, тептяри, мещеряки, черемисы ревностно и охотно шли на службу: башкирцы оренбургские сами собой вызывались и спрашивали у правительства, не нужны ли их полки".

1812 йылда Ырымбур губернаһының күп кенә өйәҙҙәрендә иген уңмай, ләкин аслыҡҡа һәм фәҡирлеккә ҡарамаҫтан, башҡорттар, казактар һуғышҡа үҙҙәренең кейем-һалымы, ҡоралдары менән бара. Шуныһы ла үҙенсәлекле: һуғыш ваҡытында башҡорттар һәм урыҫ казактары араһында һуғыштан ҡасыу кеүек күренештәр булмай.

1812 йылдың июль - октябрь айҙарында 18 башҡорт атлы полкы ойошторола. 1812 йылдың аҙағында һәм 1813 йылдың башында тағы ла 8 полк төҙөлә. Әйтеп үтелеүенсә, 2 полк 1811 йылда уҡ барлыҡҡа килә. Шулай итеп, башҡорттар барлығы 28 полкты һуғышҡа оҙата. Башҡорттар йәшәгән һәр кантон йәки өйәҙ бер йәки өс полк биргән. Мәҫәлән, Пермь, Екатеринбург, Красноуфимск башҡорттары - 20-се полкты, Ҡурған башҡорттары - 19-сы полкты, Троицк башҡорттары - 18-се полкты, минзәләнекеләр - 3-сөнө һәм 5-сенең бер өлөшөн, Бәләбәй һәм Бөгөлмә башҡорттары 4-се полкты һәм 5-се, 12, 20-се полктарҙың бер өлөшөн, Верхнеуральск башҡорттары - 14-се, 15-се полктарҙы, стәрлетамаҡтар 12-се һәм 13-сө полктарҙы әҙерләй.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

**✓ *Элек Ҡаранай тураһында халыҡ белгән, XIX быуатта ауылына бер урыҫ килеп, уның тураһында һорашып та йөрөгән. Минеңсә, уның Игнатьев булыуы мөмкин.***

# АТАЙЫМ ҺӨЙЛӘГӘН минең тарихсылыҡ

**Һәр замандың үҙ тарихы, үҙ геройы була. Тарихи ваҡиғалар ҙа, шәхестәр ҙә үҙ заманында бер төрлө генә ҡабул ителмәй. Ҡыйыу фекерҙәр һәм шәхестәр һәр саҡ бәхәс, икеләнеү тыуҙырыусан. Йылдар үткәс кенә кем хаҡлы, кем хаҡһыҙ икәнен, ниндәйҙер ҡыйыу һүҙҙе тап һин әйтергә тейеш булғанлығыңды, тап ул һинең миссияң булыуҙы аңлайһың. Стәрлетамаҡ ҡалаһында тыуып, төҙөүсе булып эшләп йөрөгән еренән ҡапыл тарих менән ныҡлап шөғөлләнә башлаған Салауат Усман улы Таймаҫовтың тәүсығанаҡҡа - архив материалдарына нигеҙләнгән фекере лә тап мәлендә, үҙ ваҡытында әйтелә. Хәҙер уның эҙләнеү-һығымталары әллә ни бәхәс тыуҙырмай, тарихсы хеҙмәте лайыҡлы баһалана. Бөгөн гәзит уҡыусыға уның ҡайһы бер уйланыуҙарын тәҡдим итәбеҙ.**

## Тарихҡа илткән һуҡмаҡ

Атайым сығышы менән Стәрлебаш районының Ҡаранай ауылынан. Бәләкәйҙән уның Ҡаранай батыр Моратов тураһындағы хикәйәттәрен тыңлап үҫтем. Сөнки беҙ үҫкән заманда Пугачев ихтилалы батырҙарынан ни бары Салауат Юлаев ҡына яҡшы билдәле ине. Ҡаранай, башҡа батырҙар тураһында һүҙ ҙә булманы. Ғөмүмән, тарихты электән ярата инем. Етенсе кластан тарих менән ныҡлап ҡыҙыҡһына башланым һәм етди хеҙмәттәр уҡыным. Әммә уларҙағы рәсмилек, урындағы, милләттәр тарихына өҫтән, һанламай ҡарау ылыҡтырманы, киреһенсә, үҙенән ситкә этәрҙе. Мәктәпте тамамлағас, Өфө дәүләт нефть техник университетын тамамлап, инженер дипломына эйә булдым. Ләкин инженер һөнәрен һайлаһам да, булмышым менән тарихсы инем. Айырыуса атайым һөйләгәндәр һәр ваҡыт хәтерҙә йөрөнө. Ул үлгәс, хәтер һандығымды аҡтарып, иҫке ҡоролошто яңыһына үҙгәртеп ҡора, демократия елдәре иҫә башлағас, ҡала гәзитенә һәм "Советская Башкирия"ға мәҡәлә яҙып ебәрҙем. Баҫылып сыҡҡас, үҙем дә аптыраным. Шунан башыма уй төштө: яҙырға ҡәләмем бар икән. Мәҡәләләрем донъя күргәс, тарихты өйрәнеүгә ныҡлап тотондом, архивтарҙа шөғөлләнә башланым. Шунда күп батырҙарыбыҙҙың онотолоуға дусар булыуын ныҡлы аңланым.

## Ҡаранай Моратов тураһында дөрөҫлөк

Атайымдың һөйләүе буйынса, Ҡаранай 1773 йылғы ихтилалдың билдәле башлыҡтарының береһе була. Ул "халыҡ батшаһы"ның саҡырыуын Салауат Юлаевтан алда ишетә һәм уға барып ҡушыла. 1773 йылдың октябренән Пугачевтың эмиссары сифатында сығыш яһай, манифестар тарата, башҡорттарҙы көрәшкә күтәрелергә саҡыра. 19 ноябрҙә отряд штурм менән Стәрлетамаҡ пристанен ала. Һуңынан Табынск ҡолай. 24 ноябрҙә Ҡаранай Моратов һәм Ҡасҡын Һамаров, Ҡанбулат Юлдашев етәкселегендәге дүрт мең башҡорт Өфөгә килеп, юлын артабан дауам итә. Уға алыштың иң яуаплы участкаһы - Ҡаҙанды алыуға әҙерлек ышанып тапшырыла. Пугачевтың стратегик планында Ҡаҙанды алыу Мәскәүгә поход менән бәйле була. Ҡаранайҙың отрядында рустар, башҡорттар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, мишәрҙәр туплана. Ҡаты алыш шарттарында Рәсәй халыҡтарының дуҫлығы нығына. 1774 йыл башында Ҡаҙан өйәҙенең һәм Кама буйының барлыҡ территорияһы тиерлек баш күтәреүселәр ҡулында була. Ошо уҡ йылдың мартында хөкүмәт ғәскәрҙәре пугачевсыларҙы еңә. Әммә ихтилал усағын һүндереү мөмкин булмай. Майҙа Пугачев ихтилалының икенсе, тағы ла мөһимерәк этабы башлана. Властар тарафынан "беренсе яуыз" һәм "төп бур һәм боласы" тип аталған Ҡаранай Моратов Башҡортостандың көньяғындағы хәрәкәтте етәкләй. Уны тотоусыға ҙур наградa вәғәҙә ителә. Октябрь һуңында Ҡаранай батша ғәскәрҙәре ҡулына эләгә. Йәшерен комиссия начальнигы генерал П.С.Потемкин Екатерина Икенсегә: "Баш күтәреүселәрҙең башлығы Ҡаранай Моратов Ҡаҙанға килтерелде", - тип доклад яһай. Артабан уны Мәскәүгә оҙаталар. Пугачевты язалағандан һуң, Екатерина Икенсе манифест сығара, унда бунт эштәре мәңгелек онотолоуға һәм йәшерен һаҡланыуға дусар ителә, тикшеренеүҙәр туҡтатыла. Ауыр язанан Ҡаранай Моратов та азат ителә. Ҡулға алынып, Мәскәүгә оҙатылған ваҡытта: "Бер йылдан ҡайтмаһам, мине көтмәгеҙ", - ти. Ул Пугачевты язалағанды үҙ күҙҙәре менән күреп ҡайта. Уны кире ҡайтарыуҙың сәбәбе лә бар. Элек хәҙерге кеүек мәғлүмәт таратыу саралары булмаған, ә Әбей батшаға үҙенә ҡаршы баш күтәргән кешене ниндәй язаға дусар итеүен халыҡҡа еткерергә кәрәк була. Ҡаранай - абруйлы башҡорт башлығы. Әгәр ул ҡайтып күргәндәрен түкмәй-сәсмәй һөйләһә, халыҡ аңына ҡурҡыу тойғоһо инеп оялаясаҡ.

***Ҡаранайҙың отрядында рустар, башҡорттар, татарҙар, сыуаштар, мариҙар, удмурттар, мишәрҙәр туплана. Ҡаты алыш шарттарында Рәсәй халыҡтарының дуҫлығы нығына. 1774 йыл башында Ҡаҙан өйәҙенең һәм Кама буйының барлыҡ территорияһы тиерлек баш күтәреүселәр ҡулында була. Ошо уҡ йылдың мартында хөкүмәт ғәскәрҙәре пугачевсыларҙы еңә. Әммә ихтилал усағын һүндереү мөмкин булмай. Майҙа Пугачев ихтилалының икенсе, тағы ла мөһимерәк этабы башлана. Властар тарафынан "беренсе яуыз" һәм "төп бур һәм боласы" тип аталған Ҡаранай Моратов Башҡортостандың көньяғындағы хәрәкәтте етәкләй. Уны тотоусыға ҙур награда вәғәҙә ителә.***

Риүәйәт буйынса, Ҡаранай һуңынан Ырымбур эргәһендә һәләк була. Уның тураһында материалдар эҙләгәндә шул асыҡланды: баҡтиһәң, Ҡаранай Моратов XVIII быуатта Башҡортостанда ихтилал күтәргән Алдар батырҙың ейәне икән. Ҡаранайҙың ҡустыһы - Рысай батыр. Әммә уның тураһында бер генә документ та тапманым. Күрәһең, ул ағаһы менән йөрөгән һәм уның күләгәһендә ҡалған. Бары тик атайым:

Рысай киткән Мәскәүгә,
Ең-итәген һыҙғанып.
Ҡаранай ауылы илап ҡалды
Рысай батырын ҡыҙғанып, -

тип бәйет әйтә ине. Бары ошо юлдары ғына хәтеремдә ҡалған. Ошо юлдарҙан сығып, Ҡаранай менән Рысайҙың икеһен бергә ҡулға алғандар, тип күҙалларға ғына ҡала. Уны аҫалар, тик арҡан сыҙамай, өҙөлә. Икенсе тапҡыр аҫалар. Ул йәлләдтең һаҡалын услап тотоп, уны йолҡоп ала. Был турала миңә атайым һөйләне. Халыҡ хәтере оҙон бит ул, риүәйәттәр беҙгә шулай килеп етә. Ана шул онотолған батырҙарҙың исемдәрен ҡайтарыу булды тәүге эшем. 2000 йылда 1773-1774 йылдарҙа Башҡортостандағы ихтилалдар темаһына китап нәшер иттем, уға Пугачев ихтилалында ҡатнашҡан һәм етәкселек иткән старшиналарҙың милли составын өйрәнеп, 80-дән ашыуының башҡорт полковнигы булыуын асыҡлаған библиографик белешмә ингән. Шул йылда уҡ диссертация яҡланым.

Элек Ҡаранай тураһында халыҡ белгән, XIX быуатта ауылына бер урыҫ килеп, уның тураһында һорашып та йөрөгән. Минеңсә, уның Игнатьев булыуы мөмкин. Башҡорттар ҡурҡып, бер нәмә лә өндәшмәгән, тип һөйләй ине атайым. Ҡаранайҙың ҡоралдары, кейемдәре Бикташ исемле бабайҙа 1904 йылға тиклем һаҡланған. Һуңынан ошо йортта янғын сыҡҡан.

## Барымтамы, ҡарымтамы?

"XVIII быуатта башҡорт-ҡаҙаҡ мөнәсәбәттәре" - өсөнсө китабым. Мин уны ете йыл яҙҙым. Был бик ауыр эш булды. Сөнки материалдар тәүсығанаҡтарҙан - архивтан алынды, ә шулай булырға тейеш, тигән күҙаллауҙан сығып яҙылманы.

Борон-борондан башҡорт менән ҡаҙаҡ үҙ-ара татыу һәм дуҫ йәшәгән. 1735-1740 йылдарҙағы ихтилалда башҡорттар ҡаҙаҡтар менән бергә баш күтәргән. Урта жуз ҡаҙаҡтары башҡорттарға:"Мы ведаем - у вас сделалась война с белым царем, и вас рубят, и мы с вами одного рода и одной веры, и ежели вам будет от русских студено, то к нам пришлите, и если хотите хана, мы вам хана дадим, если хотите салтана, то салтана пришлем, буде похотите мириться, то без нас не миритесь, а станем мириться вместе", - тигән. 1737-1738 йылдарҙа ҡаҙаҡтарҙың бер өлөшө ихтилалда ҡатнаша. Урта жуз хакимдарының береһе Барак солтан хатта башҡорттарға ярҙамға үҙенең улы Шығайҙы ебәрә. Ихтилал баҫылғас, Бөрйән, Ҡыпсаҡ, Тамъян, Үҫәргән башҡорттары, алдан һөйләшеп-килешеү буйынса, ғаиләләре менән ҡаҙаҡтарға барып һыйына. Шуға ла рустар ҡаҙаҡ менән башҡорттоң араһын боҙорға, тигән маҡсат ҡуя, һәм быға өлгәшә лә. Бының сәйәси мотивтары бар. Ошо ситуацияла Неплюев ҡаҙаҡ ханы Нуралиға баҫым яһай һәм башҡорт ирҙәрен ҡыуырға, уларҙың мөлкәтен туҙҙырырға, ҡатындарын бүлешеп алырға, тигән талап ҡуя. Башҡорт-ҡаҙаҡ ихтилалында был һынылыш мәле була. Һуңынан Нурали хандың мосолмандарға ҡаршы ҡылығын ғәйепләп, ҡаҙаҡ хажийы Күсем (Ҡушум):"Был килгән иштәктәрҙе (башҡорттарҙы) таламағыҙ, үлтермәгеҙ, ҡулға алып, башҡаларға тапшырмағыҙ, юҡһа, Аллаһыҙ булырһығыҙ...", ти. Шулай итеп, башҡорт-ҡаҙаҡ ихтилалы башҡорт-ҡаҙаҡ һуғышына әүерелә.

## Ихтилалға этәргән сәбәп

1734 йылдың 10 ноябрендә бәләкәй генә Өфөлә мөһим ваҡиға була: бында империяның баш ҡалаһынан, Анна Иоанновнаның указы буйынса, Сенаттың обер-секретары, статский советник Иван Кирилов етәкселегендә экспедиция килә. Уның төп өлөшөн 130 кеше - офицерҙар, диңгеҙ һәм тау эше белгестәре, топографтар, төҙөүселәр, рәссамдар, иҡтисадсылар, канцелярия хеҙмәткәрҙәре, руханиҙар һәм сауҙагәрҙәр тәшкил итә. Уларҙы ҡоралланған бер нисә мең һалдат һәм казак оҙатып йөрөй. Өйәҙ үҙәгендә ярты йыл самаһы әҙерлек эштәре бара, унан һуң экспедиция Башҡортостандың көньяҡ сигенә йүнәлә. Был ҙур ихтилалға этәргес була. Башҡорттарҙа ярһыу тыуҙырған экспедиция ниңә ойошторолған һуң?

Ҡайһы бер сығанаҡтар уны Башҡортостан сигендә нығытма төҙөү өсөн ойошторолған, тип билдәләй. Ырымбур экспедицияһына Рәсәй менән Урта Азия халыҡтары араһында сауҙаны ойоштороу бурысы ла йөкмәтелгән була. Йыйылма тарихи хеҙмәттәрҙә лә был ваҡиғаға ошондай уҡ аңлатма бирелә. Аңлатманың йәшерен мәғәнәгә эйә булыуы был ваҡиғаны төрлөсә баһалауға сәбәпсе булғандыр, моғайын.

1730 йылдың 20 июлендә Өфөгә башҡорт тарханы Алдар батыр Иҫәкәев оҙатыуында Әбелхәйер хандың илселәре килә һәм воевода Бутурлинға

***✓ Ислам ошо территорияға Х быуатта, Ибн Фаҙлан етәкселегендәге Бағдад хәлифәтенең ошо ерҙәрҙән үткән мәлендә инә башлаған, тип раҫлана. Ә уларҙың тәржемәсеһе аҫаба башҡорт - мосолман була.***

# ТАРИХТАН... башланғандыр



ҡаҙаҡтарҙың Рәсәй ҡанаты аҫтына инергә теләүен белдерә. Делегация Мәскәүгә ебәрелә. Был ваҡытта Анна Иоанновнаның һарай даирәһе Мәскәүҙә урынлашҡан була. Әбелхәйерҙең мөрәжәғәте хуплау таба, сөнки Рәсәй хакимдары Петр I тәхеттә ултырғанда уҡ Көнсығышҡа юл асырға тырыша.

1731 йылдың 19 февралендә Анна Иоанновна ҡаҙаҡтарҙы Рәсәй подданныйлығына ҡабул итеү һәм Ҡаҙағстанға сит ил эштәре коллегияһы тылмасы, суҡындырылған татар А.И. Тевкелев етәкселегендә илселек ебәреү тураһында грамотаға ҡул ҡуя. Тевкелевҡа бирелгән "Инструкция"ла тәү сиратта ҡырғыҙ-ҡайсаҡ ханының ни сәбәптән Рәсәй подданныйлығына инергә теләүен асыҡлау бурысы ҡуйыла. Рәсәйҙең көньяҡ-көнсығыш сигендә яңы ҡала, бигерәк тә ҡәлғәләр һыҙаты төҙөү хаҡында алдан бер һүҙ ҙә булмай. Тевкелевтан ханды Өфөгә аманаттар бирергә ризалатыу ғына талап ителә.

Тевкелевтың йөҙҙән ашыу башҡорт һәм Өфөнән өс тиҫтә дворян, һалдат һәм казак ҡатнашҡан дипломатик миссияһы 1731 йылдың октябренән 1733 йыл башына тиклем дауам итә. Әкренләп ҡәлғә төҙөү идеяһы ысынбарлыҡҡа әүерелә. Тевкелев ҡайтҡандан һуң, хөкүмәт Сенаттың обер-секретары Кириловҡа яңы экспедиция проектын әҙерләргә ҡуша. Кирилов күләмле план төҙөй. Ырымбур төҙәләсе уның тәүге пункты ғына була; артабан Орск урмандарынан хәрби суднолар эшләү, уларҙы һүтеп, Арал диңгеҙенә ташыу, бында хәрби флотилия төҙөү, диңгеҙгә хужа булыу, Һырдарья үҙәнендә пристань асыу, унан һуң йылға буйлап Урта Азия үҙәгенә үтеү һәм ҡоро ерҙән Бадахшан менән Һиндостанға етеү билдәләнә. Был мәлдә Башҡортостанда һуғыш сығыуы тураһындағы уй Кириловтың да, әкиәттәгеләй перспективалар менән мауыҡҡан уның кешеләренең дә башына инеп тә сыҡмай. Киреһенсә, Кирилов башҡорттарға яҡшы мөнәсәбәттә була, экспедиция составында уларҙың хеҙмәтенә иҫәп тота, сөнки ул билдәләүенсә, башҡорттар "шведтар һәм поляктарға ҡаршы ғына түгел, шулай уҡ төрөктәр һәм ҡырымдарға ҡаршы сығыштарҙа ла тоғро хеҙмәт итте". Министрҙар Остерман менән Черкасскийға Өфөнән яҙған хатында Кирилов, башҡорттарҙы "нигеҙһеҙ рәүештә әүәлгесә ҡысырыҡлауға дусар итәбеҙ", тип иҫәпләп, Татищевты башҡорт ерендә заводтар төҙөү ниәте өсөн тәнҡитләй.

1734 йылдың көҙөндә Өфөгә Кирилов етәкселегендә ҙур ғәскәри контингент килеүе башҡорттарҙы һағайта. Улар Тевкелев миссияһында ҡатнашҡан старшиналарҙың эшмәкәрлеген хупламай, уларҙы "ҡуштандар" тип атай. Өфө эргәһендә Әҙи мәсете бинаһында бөтә халыҡ съезы уҙғарыла.

Әүәлдән килгән йола буйынса, батша указы уҡып ишеттерелер, тип көтөү юҡҡа ғына була. 1735 йылдың 15 августында Ырымбурға (хәҙерге Орск ҡалаһына) нигеҙ һалып, Кирилов батшабикәгә "Яңы Рәсәй"гә эйә булыу айҡанлы ҡотлау ебәрә. Әммә ул ваҡиғаларҙы ашыҡтырған булып сыға, сөнки был осорҙа Башҡортостанда ихтилал тоҡана. Уның етәксеһе Нуғай даруғаһының Юрматы улыҫы муллаһы Килмәк Нөрөшев була. 1 июлдә Ергән тауы эргәһендә уның яугирҙәре хөкүмәттең төп көстәре менән берләшеү өсөн Өфөнән Орскиға китеп барған полкка һөжүм итә һәм уға ҙур зыян килтерә. Башҡортостандың көнбайышында, Ҡаҙан даруғаһында Тамъян улыҫы башҡорто Аҡай батыр Күсемовтың отряды эш итһә, Себер даруғаһында һәм Урал аръяғында Ҡара Табын улыҫы башҡорто Йосоп батыр Арыҡов халыҡты көрәшкә күтәрә. Баш күтәреүселәр Минзәлә, Табын, Өфөнө уратып ала, Үрге Яйыҡ ҡәлғәһенә һәм Себер ҡаласыҡтарына һөжүм итә. Шулай итеп, экспедицияға ҡаршылашыу тиҙ арала дөйөм ихтилалға әйләнә.

***Был осорҙа Башҡортостанда ихтилал тоҡана. Уның етәксеһе Нуғай даруғаһының Юрматы улыҫы муллаһы Килмәк Нөрөшев була. 1 июлдә Ергән тауы эргәһендә уның яугирҙәре хөкүмәттең төп көстәре менән берләшеү өсөн Өфөнән Орскиға китеп барған полкка һөжүм итә һәм уға ҙур зыян килтерә. Башҡортостандың көнбайышында, Ҡаҙан даруғаһында Тамъян улыҫы башҡорто Аҡай батыр Күсемовтың отряды эш итһә, Себер даруғаһында һәм Урал аръяғында Ҡара Табын улыҫы башҡорто Йосоп батыр Арыҡов халыҡты көрәшкә күтәрә. Баш күтәреүселәр Минзәлә, Табын, Өфөнө уратып ала, Үрге Яйыҡ ҡәлғәһенә һәм Себер ҡаласыҡтарына һөжүм итә. Шулай итеп, экспедицияға ҡаршылашыу тиҙ арала дөйөм ихтилалға әйләнә.***

Башҡорттарҙың күтәрелеше тураһындағы тәүге имеш-мимештәр хөкүмәтте борсоуға һала. Министрҙар Кириловты эшенең әҙәмтәләрен ҡуҙаллай һәм иҫкәртә алмауҙа гәйепләй, экспедицияның эшен туҡтатып торорға бойора. Кирилов тәүҙә ихтилалдың күләмен хөкүмәттән йәшерергә тырыша. 7 сентябрҙә ул, баш күтәреүселәрҙе ҡаты һәм ҡәтғи саралар менән баҫтырырға иҫәп тотоп, Ырымбурҙы ҡалдырып, Нуғай даруғаһы аша Өфөгә йүнәлә. Дипломатик хеҙмәттәре өсөн Ҡаҙағстанда полковник дәрәжәһен алған Тевкелев Себер даруғаһында яҙалау менән шөғөлләнеп йөрөй. Хөкүмәт төбәкте тиҙ арала тынысландырыу өсөн махсус Башҡорт комиссияһы ойоштора. Сентябрҙә комиссия начальнигы генерал Александр Румянцев яны ғәскәр менән Минзәләгә килә. Башҡорттар, үҙ сиратында, ҡәтғи алышҡа әҙерләнеп, татарҙарҙы, мишәрҙәрҙе, сыуаштарҙы, мари һәм удмурттарҙы баш күтәрергә өндәй; ихтилал башланғас та Килмәк 17 кешенән торған делегацияны ҡаҙаҡтар менән һөйләшергә ебәрә.

Декабрь аҙағында Кирилов Петербургка килә һәм батшабикәгә указ проектын тәҡдим итә. Уның асылы түбәндәгеләргә ҡайтып ҡала: хеҙмәт итеүсе мишәрҙәр, татарҙар, типтәрҙәр, сыуаштар һәм башҡорт ерендә йәшәүсе урыҫ булмаған башҡа халыҡтар аҫабаларға аренда түләүҙән азат ителә (был уларҙың власҡа ыңғай мөнәсәбәттә булыуына килтерәсәк); башҡорттарға тимерлектәр һәм ҡорал тотоу тыйыла; ғәйебен танып килеүсе һәр башҡорт штраф итеп бер ат бирергә тейеш; әсирлеккә алынғандар язалап үлтерелергә тейеш; бынан ары дөйөм башҡорт йыйыны тыйыла; махсус рөхсәт булмай тороп, мәсеттәр һәм башҡорт мәктәптәре төҙөү тыйыла; ырыуҙың юғары ҡатлам кешеләре властан төшөрөлөп, тәғәйенләнгән улыҫ старшиналары менән алмаштырыла; урындағы урыҫ хакимиәте башҡорт ерҙәрен үҙ теләге менән тартып алып, ҡалалар, ҡәлғәләр, заводтар һ.б. төҙөү хоҡуғына эйә була. Был указ 1736 йылдың 11 февралендә сыға.

1737 йылдың 14 апрелендә Кирилов вафат була. Уның үлеменән һуң экспедиция тарҡала, Ырымбур комиссияһы итеп үҙгәртелә. Яңы учреждение начальнигы итеп Василий Татищев тәғәйенләнә, төрөктәр менән һуғышҡа киткән Башҡорт комиссияһы начальнигы Румянцевты генерал Леонтий Соймонов алмаштыра. Улар баш күтәреүселәргә ҡаршы ҡаты алымдар менән һуғыша, башҡорттар менән ҡаҙаҡтар союзын емереү өсөн бөтә тырышлығын һала. 1740 йылда ғына төбәктә тыныслыҡ урынлаша.

1735 - 1740 йылдарҙағы ихтилал Ырымбур экспедицияһының тәүге пландарын юҡҡа сығара. Кирилов һәм Тевкелев XVII быуаттағы урыҫ юлбашсыларының данлы эштәрен ҡабатлай алмай. Уларҙың юлына баштан изге төбәген һаҡлаусы башҡорттар ҡаршы төшә.

## Ислам Башҡортостанға ҡасан ингән?

Беҙ ғаиләлә 8 бала үҫтек. Байрамдарҙа ата-әсәйҙәр йыйылып табын ҡорғанда, был баланың ниндәй һөнәре бар, был бала нимә эшләй белә, тип беҙҙе йырлата, бейетә, шиғыр һөйләтә инеләр. Барыһы ла үҙенең һөнәрен күрһәтә. Сират миңә етһә, тотам да Ҡөрьәндең бер сүрәһен уҡыйым. Сөнки совет осоронда ла атайым Усман Әхмәтвәли улы менән әсәйем Мөслимә Заһретдин ҡыҙы диндә бер ваҡытта ла ташламаны. Мин дә уларҙан ишетеп, дин тәглимәтен күңелемә һеңдереп барғанмындыр инде. Әммә мәктәп, һуңынан йәмғиәт диндә күңелдән ҡыҫырыҡлап сығарҙы. Тик аҫҡы аңда бала саҡтан һалынған мәғлүмәт барыбер үҙенекен итте. Дин тарихы менән дә ҡыҙыҡһынып киттем.

Башҡортостан тарихы буйынса китаптарҙа Ислам ошо территорияға Х быуатта, Ибн Фаҙлан етәкселегендәге Бағдад хәлифәтенең ошо ерҙәрҙән үткән мәлендә инә башлаған, тип раҫлана. Ә уларҙың тәржемәсеһе аҫаба башҡорт - мосолман була. Әммә XVI быуат уртаһында Ҡаҙан тарихсыһы Шәрәфетдин ибн Хисаметдин раҫлауынса, 630 йылда уҡ Мөхәммәт бәйғәмбәр болғар ханы Айҙарға Ислам динен таратыу өсөн үҙенең арҡаҙаштарын Абдрахман ибн Зөбәйерҙе, Зөбәйер ибн Джейдты, Талха ибн Усманды ебәрә. Шәрәфетдин шулай уҡ Ислам динен ҡабул иткән беренсе башҡорттарҙың береһе Әй буйында йәшәүсе аҫаба Айыҡкол Заит (Заһит) улы, тип белдерә. Шулай уҡ Айыҡколдан тыш Ислам ҡабул иткән 10-лаған кешенең исеме бирелә һәм улар аҫаба тип әйтелә. Башҡортостанда Исламдың иртә таралыуын кире ҡаҡҡыһыҙ итеп дәлилләүсе факт бар - ул Стәрлетамаҡ ҡалаһы эргәһендәге VII-IX быуаттарға ҡараған мосолман ҡәберлеге. Ул әле Левашовка ҡәберлеге тип атала. 1940 йылда бында "Сода" ойошмаһын төҙөү өсөн соҡор ҡаҙалар. Шунда Бағдад тәңкәләре, динарҙар, башҡа аҡса табыла. Улар VIII-IX быуат менән билдәләнә. Был табыштар Исламдың таралыу ваҡытын да күрһәтә.

Ғөмүмән, Башҡортостандың киләсәге булырҙай башҡорт үҙенең тарихын белергә тейеш, һәм уға был аң Аллаһы Тәғәләнән бирелергә тейеш, тип иҫәпләйем. Сөнки был донъяға һәр кеше үҙенең миссияһы менән тыуа. Тимәк, был тормошта һин уны үтәргә бурыслыһың.

**Шулай итеп... Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай, тигән мәҡәлдә саҡ ҡына үҙгәртеп, бала саҡта мейеңә һалынған ынтылыш барыбер үҙенекен эшләй, тиергә була. Ер аҫтынан шишмә бәреп сыҡҡан кеүек, күңелеңдәге теләк һәр саҡ тышҡа ырғый.**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ**
**яҙып алды.**

✔ ***Шул уҡ тауыш, шул уҡ ҡараштар... "Эй, Аллам, ете йыл буйына бер үк йырҙы бер туҡтауһыҙ һуҙа. Ярай әле, ошо йыр бар, аҡылынан яҙыр ӣә һәләк булыр ине бит", тип уйланым шул саҡта. Йыр йәшәтә...***



ӘХМӘР ҮТӘБАЙҘАН - НОВЕЛЛАЛАР

# ЙЫРЛАУСЫ

Мин уны тәүге тапҡыр ятаҡта йәшәгән дуҫымдың бүлмәһендә күрҙем. Дөрөҫөрәге, үҙен күреп тә өлгөрмәнем, бүлмәгә инер-инмәҫтән, йырлаған тауышын ишеттем. Дуҫым таныш булмаған икенсе берәү менән өҫтәл артында сәй эсә, ә ул бүлмәнең ҡап уртаһына баҫып тороп мөхәббәт йырын башҡара:

Һин киткәнгә мин түҙермен,
Йөрәгем түҙер микән?..

Уны йырлай тип тә әйтеп булмаҫ ине. Шул уҡ ваҡытта ул йырсы ла түгел, сөнки йырсы булыр өсөн кешелә көмөндә тәбиғәт тарафынан бирелгән моң, күңелдән урғылған аһәң, ритм тойғоһо булырға тейеш. Ә быларҙың береһе лә юҡ әлеге кешелә. Ул бары тик йырлаусы ғыналыр. Беҙҙә бит күп кенә "йырсы"лар (улар мине ғәфү итһендәр, мин уларҙы тырнаҡ эсенә алдым) үҙҙәренең был ғәмәле менән кешеләргә оло уңайһыҙланыу, ытырғаныу тойғолары тыуҙырыуға ҡарамаҫтан, ғүмере буйы сәхнәлә йырлап маташа. Ниндәйҙер "халыҡ", "атҡаҙанған" дәрәжә-титулдарына ла өлгәшә хатта, тик үҙҙәрен халыҡ хатта сәхнәгә сығып, йырын башҡарып бөтмәҫ элек үк онота. Йырлаусы яңы танышымдың йырлай белмәгән көйөнә ни өсөн "ауыҙ бысратыу"ның серен аңлай алмайынса, күҙҙәренә ҡараным... һәм барыһын да аңланым. Был кеше үҙе тарыған тормош хәленә сыҙай алмайынса, йырлай бит. Тап шулай. Йән яныуын ҡайҙа ҡуйырға белмәйенсә шулай итә. Бисара йән. Оҙаҡ илауҙан күҙҙәре ҡыҙарған, ҡабаҡтары шешмәкләнгән, ҡараштары өҫтәл артындағы икәүгә төбәлһә лә, күңеле бер ҙә генә был бүлмәлә булғанға оҡшамаған.

Мин уның йырлап бөткәнен түҙемһеҙлек менән көтөп алдым да, тәүҙә дуҫым, аҙаҡ уның янында ултырыусы кеше, һуңынан "йырлаусы" менән ҡул биреп күрешеп таныштым. Шунда уҡ башланған әңгәмәбеҙ хәл белешеү юҫығына боролоп та өлгөрмәне, "йырлаусы"быҙ тағы ла баяғы йырын башлап ебәрмәһенме. Аяныс ине уны тыңлауы, кисерештәрен ҡабул итеүе. Ғәҙәттә беҙ бит йыр башҡарыусынан үҙебеҙгә күңел зауыҡы, рухи кинәнес алабыҙ, ҡыуанабыҙ, йыуанабыҙ, ә был кеше бөгөрөндә телгеләгән, елегендә һурған кеүек. Был хәл тағы ла бер минут дауам итһә, йөрәгем шартлар кеүек. Сыҙаманым, дуҫыма: "Һөйләшергә һүҙ бар", - тигән ишара ташланым да, бүлмәләге берҙән-бер "аулаҡ" урынға - ванна бүлмәһенә саҡырҙым.

-Нимә ул тутыйғош кеүек, бер туҡтауһыҙ бер үк йырҙы йырлай ул? - тип һораным дуҫымдан икәүҙән-икәү ҡалғас. - Башҡа йыр бөткәнме?

-Ҡайғыға тарыған. Егерме йыл бергә йәшәгән ҡатыны үлеп ҡалған, шуға һағышлана, - тине дуҫым тәмәкеһен тоҡандырып.

-Ҡайғырһа, бер туҡтауһыҙ йырларға тимәгәндер бит, тауышы ла ташҡа үлсәйем...

-Ул бер аҙна буйына йырлай инде, йоҡлағаны ла юҡ үҙенең. Ҡатынын ерләгәндән алып шул хәлдә...

-Улай икән... Нимә фәҡәт йырларға һуң уға, башҡа төрлө лә тынысланырға була бит...

-Йыуатып ҡараныҡ, эсергә лә тәҡдим иттек, Үҙе йоҡлай ҙа алмай: "Йырлаған саҡта ғына онотолоп торам", ти. Үҙе бығаса ғүмерендә бер тапҡыр ҙа ауыҙ асып йырлап ҡарамаған...

-Улай икән...

Был бүлмәлә оҙаҡ ҡала алманым. Сығып киттем. Ҡайғыға тарыусының инрәүен күтәреүҙән дә ауыр йөк юҡ икән донъяла. Ул көндән һуң ете йыл үтеп тә китте. Был ваҡыт арауығында хәтһеҙ ваҡиғалар булып уҙҙы. Бүлмәһендә "йырлаусы" менән осрашҡан дуҫым да көтмәгәндә донъялыҡтан китеп барҙы. Унын менән һуңғы тапҡыр осрашҡанда теге "йырлаусы"ның һаман да шул йырҙы һуҙыуы хаҡында әйтте дуҫым.

Япраҡ эҫелектән шаңғырап торған Өфө урамы буйлап китеп барһам, таныш тауышты ишетеп тетрәндем:

Һин киткәнгә мин түҙермен,
Йөрәгем түҙер микән?..

Туғыҙ ҡатлы йорттоң ҡояш нуры төшмәгән ышығында ер өҫтөндә лыпып ултыра "йырлаусы" танышым. Үҙен тауышынан ғына таныным. Йөҙөн һаҡал-мыйыҡ баҫҡан, һурығып, ябығып киткән. Ныҡ үҙгәргән, һын-килбәтенә, төҫ-башына асарбаҡ сүрәте ингән. Шул уҡ тауыш, шул уҡ ҡараштар... "Эй, Аллам, ете йыл буйына бер үк йырҙы бер туҡтауһыҙ һуҙа. Ярай әле, ошо йыр бар, аҡылынан яҙыр ӣә һәләк булыр ине бит", тип уйланым шул саҡта. Йыр йәшәтә...

# ҺУҢЛАНЫМ...

-Ағай, һиңә барыһын да телефон аша әйтә алмайым. Ошо арала ауылға ҡайтырға тырыш, һөйләшербеҙ, шунда әйтермен...

-Белмәйем, ҡустым, тиҙ арала ғына ҡайта алмаҫмын ул. Етмәһә, алыҫ юлға командировкаға йыйынам. Нимә, шул тиклем сер түгелдер әйтә торғаның. Телефон аша ғына әйт тә ҡуй...

-Юҡ, ағай, телефон аша бумай. Сер ҙә түгел, әммә был хаҡта күҙгә-күҙ ҡарашып һөйләшергә кәрәк...

-Моғайын, өйләнергә йөрөмәйһеңдер. Әйт һуң...

-Юҡ, ағай, улай бумай, осрашҡас, йәме? Тик тиҙерәк ҡайтырға тырыш...

"Эх, әгәр ҙә атайымдың үлерен алдан белгән булһам, бер телем икмәккә алмаштырыр инем", тип әйткән ти аслыҡтан миктәгән бер бала. Эйе, ҡайттым мин ауылға, ошо һөйләшеүҙән һуң бер ай үткәс кенә. Тик ҡустым баҡыйлыҡҡа күсеп өлгөргәйне. Һөйләшеп өлгөрмәнек, уның миңә ҙур сер итеп асырға теләгәне нимә булғанын тәки белмәй ҡалдым. Үкенес. Беҙ бәндәләр мәңгегә тыуғандай донъя мәшәҡәттәрен беренсе урынға ҡуябыҙ шул...

Ҡустымды күмеп, өсөн уҡытҡас, башҡа туғандарым менән өйөнә киттек. Ҡырҡын тултырһа ла, ҡустым мәрхүм һаман да өйләнмәгәйне. Әйтеп тә, димләп тә ҡараныҡ, ыжламаны: "Нимә өйләнергә һуң? Барыбер үләбеҙ бит, кеше балаһын ыҙалатып...", - киң мәғәнәлә итеп көлә лә ҡуя торғайны ул...

Яңғыҙ ғына йәшәһә лә, өйө бик бөхтә булды уның. Саң ҡундырманы. Беҙҙе йорто эсендә хужаһыҙ етем ҡалған тогро бесәйе ҡаршыланы. Хатта инде йүгермәләп йөрөй. Ни эшләргә белмәй, ике бүлмә араһында өҙгөләнә. Ни өсөн өҙгөләнгәне лә аңлашыла. Аҡлы-ҡаралы ҡойроғон локатор һымаҡ туптура күтәреп йөрөгән был йән эйәһенә элек тә бик ғәжәпләнеп ҡарап торғаным бар ине. Был юлы Алаҡай мине таң ҡалдырҙы. Элек минән һәр саҡ йүгереп ҡасҡан йән эйәһе был юлы диванға ултырыуым булды, уң ҡулым буйлап яурыныма һикереп килеп менде лә, мыйыҡтарын минең ҡолаҡ тирәләй йөрөтөп мыяуларға кереште. Тәүҙә уның был ҡылығына таң ҡалып, иғтибар итмәҫкә тырыштым, аҙаҡ бик тә бик маҙаһыҙлай башлағас, яурынымдан ҡыуып төшөрҙөм. Тик Алаҡай бер яурынымдан ҡыуып төшөрөүгә, икенсеһенә ырғып менеп, тағы ла ҡолағым төбөн ҡытыҡлап мырылданы. Ҡатыраҡ тотоноп ҡыуып төшөргәс, өй ишеген тәпәйе менән асып, өйҙән сығып ҡасты...

Ул саҡта бесәйҙең был ҡылығын үҙемсә ҡустымды юғалтыуҙы йән эйәһе шулай ауыр кисерәләр, тип нарыҡланым. Кем белә, бәлки, мине үҙенең хужаһына ла оҡшатҡандыр, тип тә уйланым. Ағаһымын бит. Ошо ваҡиғанан һуң ярты йыл самаһы ваҡыт үткәс, бер фильм ҡараным да, асырғаныуымдан йөрәгем ярыла яҙҙы. Бәндә баҡыйлыҡҡа күсеп, ҡырҡы үткәнсе, уның йәне ике донъя араһында, хәтерҙә йөрөй икән. Йән хатта бесәйҙәрҙең иң нәзәкәтле урыны һаналған мыйығына уралып та, уларҙы тегеләй-былай йөрөтә, донъялыҡта башҡарып өлгөрмәгән ғәмәлдәрен атҡарырға әйҙүкләй икән. Ә бит Алаҡай, яурыныма баҫып, теге саҡта ҡустым телефон аша әйтергә теләгәнде миңә еткерергә тырышҡан бит. Һуңлағанмын...



# ҠОН

Мәрхүмдең мәйетен ләхеткә төшөргәс, ер өҫтөндә тупраҡ өйөмө барлыҡҡа килде. Яҙыулы ҡәбер ташы, рәшәткә ҡуйылып, аят башҡарылғас, мәрхүмдең туғандары килгән халыҡҡа хәйер таратып сыҡты. Шунан һуң ауыл муллаһы ҡәбер янынан китер саҡта барса халыҡҡа: "Был ниндәй кеше ине?"-тигән һорау ташланы. "Яҡшы кеше ине", - булды килеүселәрҙең яуабы.

Барыһы менән бергә шул һүҙҙәрҙе ҡабатлаған Тамъян әллә ни эшләне. Исмаһам, кешесә аралашып, ғәфү үтенеп тә өлгөрмәне элекке дуҫынан. Араларынан ел үтмәҫ, себен безләп осмаҫ, ауылдың Ишәйе менән Ҡушайы ине улар. Төпһөҙ ыштан кейгән мәлдәренән бергә. Өйҙәре лә күрше генә. Бергә мәктәпкә барҙылар. Әрмегә лә бер үк ваҡыттта саҡырылдылар. Юлдары Өфөлә айырылды: Тамъян - һауа десанты ғәскәрҙәрендә, Талип элемтәсе булып хеҙмәт итте. Хатлашып торҙолар.

Талип бер айға алдараҡ әрменән ҡайтып төшөп, Тамъян ҡайтҡанда ауылда элемтәсе булып эшләп йөрөй ине. Тамъяндың ата-әсәһе егеттең дуҫтарын, туғандарын ҡунаҡҡа саҡырып, шатлыҡ уртаҡлашырға булды. Талип әрменән ҡайтып төшөү менән ғашиҡ булып өлгөргән Рәйсәне алып килде. Ҡалаҡҡа һалып йотмалы сибәр ҡыҙ ауыл мәктәбендә ҡырҙан килеп уҡытып йөрөй ине.

Әрмелә ҡатын-ҡыҙ наҙына сарсаған Тамъян да Рәйсәне бер күреүҙә оҡшатып, үлеп ғашиҡ булды ла ҡуйҙы. Араҡы шауҡымына тиҙ бирелгән кисәге һалдат йәйин тура килтереп Рәйсәне бейергә саҡырҙы. Рәйсә Талипҡа ҡараны, егет иһә дуҫының теләгенә ҡаршы килмәне. "Дуҫым менән бейегәндән ни булған?" тип уйлағандыр инде. Десантсылар кейеме тәненә һылашып торған, Талиптан күпкә ҡалҡыуыраҡ, матурыраҡ егеткә Рәйсә шул көндә тартылды ла ҡуйҙы.

Айырылмаҫ ике дуҫтың араһына ҡара бесәй инеп ултырҙы. Эш шуға барып етте, элекке ике дуҫ: "Кем еңһә, Рәйсә шуға була", - тигән шарт менән ауыл ситендәге ҡайынлыҡҡа һуғышырға сыҡты. Йән аямай уҫмаҡлаштылар. Әгәр ҙә ауылдаштары килеп сығып, айырмаһа... Әлбиттә, махсус рәүештә кеше үлтерергә өйрәтелгән кисәге десантсы өҫтөн сыҡты. Хурлыҡты күтәрә алмаған Рәйсә ауылдан китеп барҙы, Тамъян менән Талиптың юлдары ғүмерлеккә айырылды.

Ике ай буйы дауаханала һынған ҡабырғалары уналыуын көткән Талип ниндәй тойғолар кисергәндер, һәр хәлдә, унан сыҡҡанда егеттең күңеле шаҡтай ултырып өлгөргәйне, егет ғазаптарын йотоп йылмайырға тырышты. Күңелһеҙ кисерештәр солғанышында оҙаҡ йөрөмәне. Сыныфташ ҡыҙына өйләнде лә, донъя көтөргә тотондо, ауылдан ситкә сығып йөрөмәне. Тамъян менән дуҫлығынан маңлайының аҫ яғында, ике күҙе араһында десантсының "мөһөрө" булып йөй тороп ҡалды. Әллә уның ярылған маңлайын тегеүсе дауахана табибтары тәжрибәһеҙ булды, әллә Тамъян "оҫталығы", яралары уңалһа ла, шуныһы тороп ҡалды. "Тамъян мөһөрө" тип атаны ул йөй ҡайҙан икәнен һорашҡандарға.

Тамъян иһә ауылдан сығып китте. Тәүге маҡсаты Рәйсәне эҙләп табыу ине. Тапты, тик ҡыҙ уға аҡ тештәрен күрһәтмәне. Институтҡа уҡырға инде, тик күңеле ятманы, бер төркөм әрмеләштәренә эйәреп оҙон аҡса артынан Себер яғына сығып китте. Унда ла бер урында ла йүнләп эшләй алмай, ун биш йыл буйына ил

гиҙеп, был тәҙәләштән теге төҙәләшкә күсеп йөрөнө лә, туҡтауһыҙ эсеүҙән тиҙ арала йөҙөнә ҡартлыҡ сырайы ҡунып, тыуған ауылына ҡайтып ауҙы. Бер нисә тапҡыр өйләнеп тә ҡараны, тик һәр осраҡта ла ныҡышмалылығы етешмәүе арҡаһындамы, башҡа сәбәптәнме, ҡәләштәре уны бер-бер артлы ташлап китә торҙо. Был саҡта инде биш бала атаһы булып өлгөргән Талип ауылдың абруйлы кешеһенә әүерелеп, емертеп донъя көтә ине инде.

Улар ауылда бер нисә тапҡыр йөҙмә-йөҙ осраштты, тик араларҙары "Һин һаумы? Мин - һау..."ҙан ары уҙманы. Дуҫынан ғәфү үтенергә, ярлыҡау һорарға бер нисә тапҡыр ынтылды Тамъян, тик һәр ынтылыуы Талиптың маңлайындағы йөйҙө күреү менән ҡыҫыр сәбәләнеү, асырғаныу менән алмашынды. Элекке дуҫынан ярлыҡау һорау менәнме ни, ул бит уның һәммә ғәләм күреп торған еренә үҙенең әшәкәлек мөһөрөн баҫҡан, уны мәңгелеккә ғазаплы иткән. Ҡала алманы Тамъян ауылда. Янғыҙ әсәһе үлеп ҡалғас, ауылдағы йортон һатты ла, район үҙәгенә барып, алама ғына өй һатып алып, шунда йәшәй башланы. Үҙе һымаҡ янғыҙаҡ асарбаҡтары ла табылды. Ундабында ялланып ҡына тамаҡ туйҙырҙы, тапҡан-таянғаны эсеүҙән уҙманы...

Ҡыҫҡаһы, тормошо килеп сыҡманы уның. Шулай йәшәп ятҡанында Талиптың вафат булып ҡалыуы хаҡында ишетте. Йүгерҙе ауылына. Исмаһам, һуңғы тапҡыр Талипты күреп, уның йәнһеҙ кәүҙәһенән булһа ла ярлыҡау һорарға ниәтләнде. Һуңланы. Мәрхүмдең әхирәт ҡулдәгенә төрөлгән мәйетен ләхеткә төшөрөп өлгөргәйнеләр. Йыназа эштәре тамам булғас, ауылдаштары кемеһе ат арбаһына, кемеһе машинаға ултырып, ауыл яғына ҡуҙғалды. Тамъян зыярат уртаһында дуҫының ҡәбере янында бер үҙе ҡалды. Ҡәбер ташына ҡулы менән тотоноп, бик оҙаҡ торҙо ул. Ни өсөн шулай иткәнен үҙе лә аңламаны. Яза көтә ине шикелле. Яҙаны татыуға ҡарағанда көтөүе ғазаплыраҡ икән шул. Тамъян үҙен уратып алған тынлыҡта бары тик зыярат эсендәге сәскәләктә зыу килешкән бөжәктәрҙең генә тауышын ишетте. Ара-тирә инкештәр деүелдәй, бал ҡорттары зеүелдәй. Тамъян мөғжизә көткәндәй, күҙҙәрен йомдо. Шул саҡ уның маңлайының аҫ яғын, ике күҙ араһын нимәләр "сем" иттерҙе.

Маңлайы шешеп, күҙҙәре йомола башлағас, район дауаханаһында уның маңлайын ярҙылар, шеште һурып алғас, тегеп ҡуйҙылар. Әллә табиптар тәжрибәһеҙ булды, әллә бал ҡорто зәһәр саҡты, маңлайының аҫ яғында, ике күҙе араһында йөй барыбер тороп ҡалды. "Талип дуҫым мөһөрө", тип ҡыуанды Тамъян көҙгөгә ҡараған һайын. Шул мәлдән алып уның тормошо ҡырҡа үҙгәрҙе. Тамъян өйөнә һырыған асарбаҡтарҙы ҡыуып ебәрҙе. Эсеүен ташланы. Өйләнде...

*ЯҢЫ РУБРИКА: "КӨЛКӨФӨ"*



# ТАМАҠ ТАМУҠҠА ТӨШӨРӘМЕ?

## Йәки туйҙа тамаҡ туйҙырыуыбыҙ тураһында

**"Алдар менән Ерәнсә ҡоро" рубрикаһы гәзитебеҙҙең иң популяр яҙмалар серияһына әүерелеп китте. Беҙ был рубриканы алып барыуҙа әүҙем ҡатнашҡан авторҙарыбыҙға, бигерәк тә Әбйәлил районынан Әнүәрә апай Хәйбуллинаға рәхмәтебеҙҙе еткерәбеҙ. Баҫмабыҙҙың баш ҡалабыҙҙың матбуғат органы булыуын иҫтә тотоп, шундай уҡ характерҙағы яңы рубрика асырға ҡарар иттек. "КөлкӨфө" тип атала ул. Көлкө һәм Өфө һүҙҙәренән торған был рубрика аҫтында баҫылған материалдарға конкурс та иғлан итәбеҙ. Енеүселәрҙе йыл аҙағында иҫтәлекле бүләктәр көтә. Ә материалдар түбәндәгесә: конкурста ҡатнашҡан һәр кем үҙ тормошонон баш ҡалабыҙға бәйле ошондайыраҡ хәлдәрҙе һүрәтләргә тейеш.**

Исмәғәзәм дуҫым менән үткән быуаттың 1980-1985 йылдарында институтта бергә уҡыныҡ. Ниндәй генә мажаралы ла, сетерекле лә (бөгөн уйлаһаң - көлкөлө) хәлдәргә тарыманыҡ һәм һәр ваҡыт ниндәйҙер мөғжизә менән ул хәлдәрҙән именаман сыға килдек. Шундай хәлдәрҙең береһе.

Студент кешегә, Буранбай Исҡужин әйтмешләй, кеҫәлә "трамвайлыҡ та тинһеҙ ҡалған" саҡтарҙы татырға ла тура килә. Ундай саҡтарҙа беҙҙең меню түбәндәгесә була торғайны: "Иртәнге ашҡа - сәй, төшкө ашҡа - сәй, киске ашҡа - сәй". Шундай көндәрҙең береһендә ял көнө дуҫым менән Өфө урамдарын ҡыҙырырға тотондоҡ. Үҙебеҙсә, ашҡаҙанда бүре олоуын төрлө юлдар менән баҫырға ла тырышабыҙ. Универмагҡа инеп, ул саҡтарҙа иң ҡиммәтле һаналған йөнлек тиреһенән тегелгән тундарҙы кейеп ҡараған булабыҙ, һатыусылар менән башҡа төрлө фасондар тураһында әңгәмә алып барабыҙ, тегеләр беҙгә төрлөһөн тәҡдим итеп ҡарай. Тундарҙы кейәбеҙ ҙә, көҙгө алдына сығып баҫып, кейемдең беҙгә килешмәгән яҡтарын һанарға тотонабыҙ. Йәнәһе, бигерәк ябай, бынау ере килештереп тегелмәгән, ауыр, атлауы уңайһыҙ, һ.б. Шулай мәж килеп йөрөй торғас, һатыусылар ҙа беҙгә шикләнеп ҡарай, үҙ-ара бышылдаша башланы. Сығып тайҙыҡ.

Урамдағы колонканан бөрйәнсә "кәкере тамаҡ" (полдник) ашап алғас, ул саҡтағы Ауыл хужалығы институты туҡталышындағы "Галле" ресторанының ҡаршыһына барып баҫтыҡ. Ресторандан шау-гөр килгән тауыштар ишетелеп тора. Беҙҙең эс көтөрләй. Күңелле тауыштарҙы тыңлап, үҙебеҙҙе йыуатып аҙ ғына булһа ла торорға ҡарар иттек. Шул саҡ...

Эйе, ресторандың киң ишектәре шар асылып китте лә, унан йөҙәрләгән кеше эркелеп килеп сыҡты. Килеп сыҡтылар ҙа, гөр килеп гармунға бейергә тотонмаһындармы. Үҙебеҙсә - башҡортса. Беҙ урталыҡта тороп ҡалдыҡ. Был мәл туйҙың "ҡоҙа - ҡоҙаны, ҡоҙағый - ҡоҙағыйҙы" танымаҫ хәлгә еткән иң ҡыҙған мәле булған икән. Беҙҙе лә ҡултығыбыҙҙан эләктереп алып, әйләндерергә тотондолар. Ундай саҡта бейемәҫ ерҙән бейерһең. Апаруҡ тыпырлатып, тын алырға ла өлгөрмәнек, төркөм беҙҙе үҙе менән ресторан эсенә алып инеп тә китте. Ҡаршылашһаҡ, мотлаҡ тапала инек. Студент кешегә туй өҫтәле ожмах ризығына тиң инде ул. Ҡоҙалар, ҡоҙасалар менән шау-гөр килешеп, ары-бире йотҡолап, ныҡ ҡына итеп ашап алдыҡ. Тағы бейеү, "тансы-мансы"башланды. Урталыҡта һыңҡылдата баҫҡан Исмәғәзәм дуҫым миңә күҙ ҡыҫты ла, ситкә саҡырҙы. Аулаҡта ҡалғас, ҡолағыма шыбырҙаны: "Араларында айныҡ кешеләр бар икән. Беҙҙең "саҡырылмаған ҡунаҡ" икәнлекте таный башланылар, буғай. Ысҡындыҡ. Мин "берҙе" ҡуйынға тыҡтым..."

**Шулай итеп...**

**Исмәғәзәм дуҫым менән шулай саҡырылмаған ҡунаҡ булып, туйға инеп тамаҡ ялғап сыҡтыҡ. Тамаҡ тамуҡҡа ғына төшөрмәй, туйға ла саҡырылмаған ҡунаҡ сүрәтенә индерә икән ул. Йәл, ул саҡта хужаларға рәхмәт әйтеү мөмкин түгел ине. Форсаттан файҙаланып, әле килеп әйтәбеҙ рәхмәтте. Рәхмәт хужаларға!**

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

*АҒИНӘЙ ҺҮҘҘӘРЕ*

# ҠОРО ҠУЛДАН...

## иманлы йөҙ ояла

- Көн дә күршеңдең хәлен бел - күрше хаҡының һигеҙ төрө барлығын иҫеңдә тот.
- Тәкәбберләнмә, тиҫкәрелектән һаҡлан - икеһе лә аянысыл яҙмышҡа этәрә.
- Тыйнаҡһыҙ менән юлға сыҡһаң, ҡырҡ тыйыу яһап сыҡ, бәләгә юлығыуың, оятҡа ҡалыуың ихтимал.
- Тәкәбберҙән тәңкә, һарандан һарҡа, ҡомһоҙҙан ҡом, ҡарундан ҡар һорама: дүртеһе лә бер төптән сыҡҡан ыу ағас, үҙ кәрендә һурырҙар.
- Тейешле ерҙә теленде елле итеп хутҡа ебәр, теймәҫ ерҙә тыя алмаһаң, утҡа һелтәр.
- Иҫәрҙе сукындырһаң, башы сатнай тигәндәй, үтә аҡыллыланып китмә - ғилемлектең дә сиге бар.
- Гел өйрәтмә, аҡыл һатма, үҙеңде лә иҫтә тот - май шәмеләй янып бөтөүең бар.
- Үҙем күп беләм, тип маҡтанма - ундай һүҙҙәр белекһеҙҙең белеме.
- Ситкә ҡунаҡҡа барһаң, тәймәләй ҡустәнәс ал - ҡоро ҡулдан иманлы йөҙ ояла; үҙеңдекенә йылы һүҙ ҙә еткән: өйрә бешерһә, өйрәк ашаным, сәй ҡуйһа, бал эстем, тип һөйөндөр.
- Яҡшы эштән ялтанма - яҡшылығын татырһың, яманынан ялтанмаһаң, ялҡынында янырһың.
- Яраткан ризығыңды аша - ауыҙыңдан тәм китмәҫ, күңелең ятҡан эшең башҡар - тәнеңдә көсөң бөтмәҫ.
- Мал ҡаҙаһы ваҡ ҡаҙа, ил ҡаҙаһы оло ҡаҙа - сағыштыр ҙа баһа бир.
- Ғәйбәт - бөтә яҡҡа ел туҙҙырған ҡош ҡауырыйы, йыйып та булмай, тота ла алмайһың.
- Кеше ғүмере - яртылаш байыған ҡояш: донъя ҡыуып, уҙғанын күрмәй ҡалма.
- Көсөң етһә - тейеш ерҙә йоҙроғондо, етмәһә - өй яғына табаныңды ялтырат.
- Тауышым көр, тип гел гөрләмә - һандуғастар араһында ҡарға булып ҡуйырһың.

**Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.**

*ШИҒРИ ШӘЛКЕМ*

### БАЛА

Аҡ биләүгә биләп сабыйын,
Әсәкәйе шундай шатлана.
Бына бит ул уның дауамы,
Быма бит ул милләт башлана.

* * *

Эй, был ғүмер тигәндәре
Үтә лә китә икән.
Илатҡанында илатып,
Көлдөргәнендә көлдөрөп,-
Тетмәне тетә икән,
Сәстәрҙе өтә икән...

### ҠОРОТ

Ҡаҙанымда ҡайнатып,
Ап-аҡ ҡорот яһаным.
Ҡоротлап эс һурпаны,
Һин бит башҡорт балаһы!

### ТАЛҠАН

Талҡан ниңә тәмле, тиһәм,
Сере уның бик ябай:
Талҡандың да, икмәктең дә
Әсәләре бит бойҙай.

**Гөлнур РАЕВА.**
**Баймаҡ районы**
**Буранбай ауылы.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ЭШЛӘГӘНДӘ...
## йыр тыңлама

■ Йорт хайуандары булған өйҙәрҙә, ҡағиҙә булараҡ, бактериялар 20 тапҡырға күберәк. Таҙарлыу саралары етештереүсе компаниялар өсөн тикшеренеү үткәргән Лидс университеты ғалимдары килгән ошондай һығымтаға. Улар бер нисә йорттоң аш бүлмәһенең таҙалығын тикшергән. Балалары булмаған ғаиләләр 167 балл йыйһа, балалы йорттарҙың таҙалығы 232 балл менән баһаланған. Әгәр ҙә өйҙә йорт хайуандары булһа, был һан 2844-кә еткән. Был 6 миллион бактерия, тигән һүҙ, тип белдерә ғалимдар. Уларҙың фекеренсә, бактерияларҙың кимәле дөйөм тукланыу урындары йәки студент ятаҡтарындағы бәдрәфтәрҙәгенән юғарыраҡ. Шул уҡ ваҡытта таҙа сепрәк менән бүлмәне йыйыштырып алыу бактериялар иҫәбен 10 мең тапҡырға кәметә.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәметә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә Америка ғалимдары белдәүенсә, эш эшләгән ваҡытта яратҡан көйөңдө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьҫирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған. Белгестәр әйтеүенсә, көй яңғырап торған саҡта мейе бер юлы бер нисә мәсьәлә башҡара һәм уның когнитив функцияларының һөҙөмтәлелеге кәмей.

■ Урманда һәм башҡа йәшел зонала йөрөү агрессияны кәметә һәм төрлө психик сирҙәрҙе булдырмай, тип белдерә Урман тикшеренеүҙәре институты ғалимдары. Бынан тыш, урман буйлап йәйәү йөрөү иммун системаһын нығыта, тәбиғи күҙәнәктәр һанын һәм уларҙың әүҙемлеген арттыра, яман шеш күҙәнәктәрен юҡҡа сығара. Терапевтар хроник стрестан һүң сирлеләргә тәбиғәт ҡосағына йышыраҡ сығырға кәңәш итә. Артериаль ҡан баҫымы, йөрәк тибеше, мускулдар көсөргәнеше һәм гормондар кимәле лә тәбиғәттә тиҙерәк нормаға килә.

■ Австралия табиптары раҫлауынса, кесә телефоны аша оҙаҡ һөйләшеү ҡолаҡ шауына килтереүе ихтимал. Мәғлүмәттәр буйынса, ҡолаҡтың ишетеү һәләте боҙолоуы менән халыҡтың 10-15 проценты яфалана. Был ишетеү ағзаларының, мәҫәлән, эске ҡолаҡтың йөрәкхәте һөҙөмтәһе булыуы ихтимал. Антибиотиктар ҙа ҡолаҡ шауына килтереүе бар. Белгестәр әйтеүенсә, кесә телефондары ла ишетеү һәләтенә насар йоғонто яһай ала. Австралияның Экологик медицина институты тикшеренеүселәре асыҡлауынса, кесә телефондары менән ҡулланыусылар быңдай сиргә йышыраҡ тарый, етмәһә, оҙаҡ һөйләшеүҙәр (көнөнә 10 минуттан артыҡ) был хәүефте тағы ла арттыра. Әгәр ҙә кеше 4 йыл дауамында даими кесә телефоны менән ҡулланһа, хәл тағы ла киҫкенләшә төшә.

■ Израиль табиптары мәғлүмәттәренә ярашлы, организм тәмәке тартыуға өйрәнә алмай, был психик сәбәп кенә. Ғалимдар үткәргән тикшереүҙәр күрһәтеүенсә, тартырға теләү көсө организмдағы никотин кимәленә бер нисек тә бәйле түгел, бары кеше уны ниндәйҙер башҡарылырға тейешле йола кеүек ҡабул итә генә.

■ Ҡытай һәм Япон халҡы араһында айҙың һәр дүртенсе көнө бәхетһеҙ, тигән ышаныу йәшәй. Табиптар был фекерҙең кешеләрҙең һаулығына йоғонто яһаймы, юҡмы икәнлеген тикшереп ҡараған. Улар 200 мең үлем тураһындағы таныҡлыҡты өйрәнеп, шуны асыҡлаған: һәр айҙың дүртенсе көнөндә үлем осраҡтары йышыраҡ теркәлгән. Ошондай уҡ статистика Европа халҡы араһында ла бар, тик ул 13 һаны менән бәйле.

СӘЛӘМӘТ БУЛ!

**Йәйге эҫелә балалар ҙа, ололар ҙа туңдырма менән һыйланырға ярата. Диетологтар фекеренсә, әгәр ҙә дөрөҫ итеп ҡуллана белһәң, туңдырма артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусыларға ла файҙалы була ала. Был татлы аҙыкта һөткә ҡарағанда углеводтар дүрт тапҡыр күберәк һәм ул, һөт менән сағыштырғанда, организм тарафынан күпкә яҡшыраҡ үҙләштерелә. Файҙаһы нимәлә?**



# ТУҢДЫРМА ТӘМЛЕ ЛӘ...
## тик файҙалымы?

Туңдырма - "бәхет гормоны" - серотонин эшләп сығарырға һәләтле, шуға ла табиптар уны кәйефте күтәреүсе сара булараҡ та ҡулланырға тәҡдим итә. Туңдырмала файҙалы элементтар һәм витаминдар, мәҫәлән, кальций, L-триптофан, лактоза, минераль тоҙҙар һәм еңел үҙләштерелеүсе аҡһымдар күп. Шулай уҡ туңдырма ауырға ҡалыу менән бәйле проблемаларҙы ла хәл итә, тип иҫәпләнә.

Бер илдә артыҡ ауырлыҡ менән яфаланыусы бер нисә кешенең диетик менюһына туңдырма өҫтәйҙәр. Эксперимент аҙағында көн һайын туңдырма ҡулланыусыларҙың тиҙерәк ябығыуы асыҡлана. Бәҡтиһән, һөт аҙыҡтарында һәм туңдырмала булған кальций организмдағы артыҡ майҙарҙың яныуына булышлыҡ итә икән. Телевизор алдында ултырғанда кәнфит ашарға ғәҙәтләнгәнһегеҙ икән, уны туңдырма менән алыштырып ҡарағыҙ. Туңдырма асығыу тойғоһон оҙаҡҡа баҫа, көүҙәгеҙ ҙә һомғол көйө ҡалыр. Табиптар әйтеүенсә, диабет менән ауырыусыларға ла туңдырма файҙалы, бирерәк тә соя һөтө нигеҙендә эшләнгәне. Был татлы аҙыкты ашҡаҙан һәм эсәк ауырыуҙары мәлендә лә ашарға кәрәк. Күптән түгел барлыҡҡа килгән йогурт нигеҙендәге туңдырма кеше организмын тере бифидо-бактериялар менән байытыусы һәм иммунитетты күтәреүсе иң файҙалы аҙыҡ иҫәпләнә.

Туңдырманың файҙалымы, юҡмы икәнлеген асыҡлау өсөн уның ниндәй продукттарҙан яһалыуын ҡарайыҡ. Уның составына, иң тәү сиратта, һөт инә. Тимәк, туңдырмала A, B, D, E, P витаминдары, минераль матдәләр йәки магний, калий, фосфор, тимер, натрий бар.

Туңдырма балалар аҙығы иҫәпләнһә лә, ул ярайһы уҡ туҡлыҡлы аҙыҡ. Шуға ла сабыйығыҙ нимәнеләр ашауҙан баш тартып мыжый икән, уға туңдырма булһа ла тәҡдим итегеҙ. Туңдырма кәйефте күтәреү һәләтенә эйә, тип әйткәйнек инде. Ысынлап та, танауығыҙ төшөп йөрөгән мәлдә бер генә эскимо ашағыҙ һәм шунда уҡ үҙегеҙҙе күпкә бәхетлерәк тоя башлаяҫаҡһығыҙ.

Шуныһы ҡыҙыҡ, отоларингологтар туңдырма ярҙамында тамаҡты сыныҡтырырға ҡуша. Шулай ҙа туңдырманың юғары калориялы булыуын иҫәпкә алып, уны күп ашарға ярамай. Бөтә төрҙәре араһынан, пломбир иң майлыһы. Уның калориялығы - 100 грамға 340 ккал. Һөтлө йәки емеш-еләк туңдырмаһының майлылығы - 230-250 ккалдан артыҡ түгел. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, иң күп ҡулланылған туңдырма сорты булып ҡаймаҡлы туңдырма тора. Унда, пломбирға ҡарағанда, майҙар аҙыраҡ, ә тәм сифаттары ярайһы уҡ юғары.

### Туңдырма тураһындағы мифтар

Туңдырма ашағанда үҙегеҙҙе бер нисә минутҡа ғына булһа ла бала итеп тойғанығыҙ булдымы? Шуға ла уны барыһы ла ярата, тик ҡайһы берәүҙәр уның файҙаһына ҡарағанда зыяны күберәк тип иҫәпләй. Был ысынлап та шулаймы икән, әйҙәгеҙ, туңдырма тураһында киң таралған уйҙырмаларға күҙ һалайыҡ.

**1-се уйҙырма. Туңдырманан тамаҡ ауырта.**

Киреһенсә, әгәр ҙә уны яйлап ҡына ялаһаң, тамаҡты сыныҡтырырға мөмкин. Быны даими рәүештә эшләп торһаң, тамаҡтың лайлалы шекәрәһе сир таратыусы микробтарға бирешеп бармаясаҡ. Тик быны өсөн бер генә шарт бар: туңдырманы ҙур киҫәктәр менән ҡабаланып ашамағыҙ.

**2-се уйҙырма. Туңдырмала бер ниндәй ҙә витамин юҡ.**

Унда һөттә булған бөтә файҙалы элементтар бар. В витамины насар кәйеф менән көрәшә, тире һәм сәстең торошон яҡшырта, А витамины күҙҙәр өсөн файҙалы, D витамины организмда кальций үҙләштерелеүенә ярҙам итә, Е витамины биттең иртә йыйырсыҡланыуынан һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙарынан һаҡлай.

**3-сө уйҙырма. Туңдырма татлы булырға тейеш.**

Мотлаҡ түгел. Кулинарҙар был ҡалыпҡа күптән сик ҡуйған. Әгәр ҙә теләгең булһа, бөгөн рестарандарҙа ҡыҙҙырылған картуф, һуған, анчоус, хатта бәпембә тәме сығып торған туңдырма тәмләп ҡарарға мөмкин. Тик ундай туңдырманы һеҙҙең ашағығыҙ киләме һуң?

**4-се уйҙырма. Туңдырманан һимерәләр.**

Был уйҙырмаға ҡайһы яҡтан ҡарайһың инде. Ғөмүмән, аҙыҡтан түгел, ә уны күп итеп ашауҙан һимерәләр. Ысынбарлыҡта туңдырмала шәкәрҙең кимәле байтаҡ ҡына. Тик уны башҡа татлы һәм майлы аҙыҡ менән сағыштырғанда, әйтәйек, торт менән, унда тәүгеһе лә, икенсеһе лә аҙыраҡ кимәлдә. 100 грамм торт һеҙгә 450 ккал бүләк итһә, бер стакан туңдырма 200-ҙән күберәк түгел. Әйткәндәй, 1 банка татлы газлы һыу калориялығы яғынан туңдырманан бер ҙә ҡалышмай.

### Дөрөҫ һайла

● Туңдырманың ҡабын иғтибарлап уҡығыҙ. Һөт туңдырмаһы 3-8 процент майҙан һәм яҡынса 20 процент шәкәрҙән торорға тейеш. Ҡаймаҡлы туңдырма - 10 процент май һәм 15 процент шәкәрҙән, ә классик пломбир 15 процент майҙан һәм 14 процент шәкәрҙән тора.

● Сифатлы туңдырмала үҫемлек майҙары булырға тейеш түгел. Уның составындағы кокос, пальма һәм башҡа үҫемлек майҙары туңдырманың сифатлы булмауы тураһында һөйләй. Әлбиттә, быңдай туңдырманан ағыуланмаясаҡһығыҙ, әммә быңдай продукт туңдырма тип аталырға хаҡлы түгел. Яҡшы туңдырма аҡ майҙан ғына тора, ә һөт тик тәбиғи булырға тейеш.

● "Дөрөҫ" туңдырмала бөтә ингредиенттарҙың ауырлығы грамдарҙа күрһәтелә. Ҡайһы бер етештереүселәр кимәлде миллилитрҙарҙа яҙа.

● Тәм биреүселәрһеҙ булған туңдырма һатып алып булмаһа ла, уларҙың тәбиғиҙәренә, мәҫәлән, желатин йәки агар-агарға өҫтөнлөк бирегеҙ.

● Шоколадлы туңдырма 6 процент шоколад йәки 2,5 процент какаонан торорға тейеш.

● Туңдырманың ҡабына иғтибар итегеҙ. Әгәр ҙә туңдырма стаканының формаһы үҙгәргән икән, тимәк, ул бер нисә тапҡыр иретелеп туңдырылған. Йәки тейешле температурала һаҡланмаған. Ә ирегән туңдырма микробтар үрсеү өсөн яҡшы урын.

● Әгәр ҙә туңдырманың төҫө ҡағыҙ төҫөнән айырылмай икән, ул һөттән түгел, ә соя концентратынан яһалған. Яҡшы туңдырма ап-аҡ төҫтә була алмай.

● Сифатлы туңдырма тиҙ ирергә тейеш түгел.

● Шоколад менән ҡапланған туңдырманың шоколады ҡойолоп торһа ла, туңдырманың сифатлы булыуына шикләнә алаһығыҙ.

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ҮПКӘЛӘТМӘ...

## һәм үпкәләмә



**Йөрәк - Аллаһы Тәғәлә йыш күҙ һала торған урын. Әгәр баҫалҡы, изге кешенең күңелен хаҡһыҙ рәнйетһәләр, уны Аллаһ үҙе һаҡлай. Кәмһетелгән һәм хаҡһыҙға рәнйетелгән ҡолдоң доғаһы, уның иманлымы, юҡмы булыуына ҡарамаҫтан, Аллаһ тарафынан мотлаҡ ҡабул ителә. Бәйғәмбәр (саллаллаһу ғәләйһи вә сәлләм) ғәҙелһеҙ рәнйетелгәндәрҙең доғаһынан һаҡланырға ҡушҡан, сөнки уларҙың доғаһына пәрҙә юҡ. "Ҡәғбә - Ибраһим бәйғәмбәр ҡулдары менән яһалған бина. Ә йөрәк - Аллаһы Тәғәлә ҡараған урын. Йөрәкте ярыу - Ҡәғбәне емереүгә ҡарағанда ла ҙур енәйәт", - тип әйтелә хәҙистә.**

Аллаһ ҡаршыһында хаҡһыҙға рәнйетелгәндәр төп урын биләй. Аллаһтың ризалығын эҙләгән кеше уны рәнйетелгән һәм күңеле ҡайтҡан кешеләрҙә ҡыуандырып таба ала. Муса (ғәләйһи сәләм): "Эй, Аллаһ! Һинең рәхмәтеңде ҡайҙан эҙләргә?" - тип һорағанда, Аллаһы Тәғәлә уға: "Йөрәктәре яраланып рәнйетелгәндәрҙән", - тип күрһәткән.

Ихлас ҡолдарын хөрмәт иткән, ҡәҙерләгән кешеләр һәм ҡәбиләләр өсөн Аллаһтың нигмәте кәмемәҫ.

Бер ҡудси-хәҙистә: "Әгәр берәү минең инанған ҡолома дошмандарса ҡараһа, мин уға ҡаршы һуғыш асырмын. Ҡолом минә мотлаҡ ғәмәлдәрҙән (фарыҙ) башҡа бер нәмә менән дә яҡынлаша алмай. Ул шулай уҡ минә өҫтәлмә ғәмәлдәр (нәфиле) менән дә яҡынлаша ала. Мин ҡоломдо яратһам, уның ҡолағы, күҙҙәре, ҡулдары, аяҡтары кеүек булырмын. Һәм ул минән нимә һораһа ла, һис шикһеҙ, яуап бирермен. Әгәр минең һаҡлауымды һораһа - һаҡлармын", - әйтелә.

Әгәр кеше ауыр хәлгә тап булһа, был ниндәйҙер хатанан йәки яуыз ниәттән барлыҡҡа килә, тигәнде аңлатмай. Быға бәйғәмбәрҙәрҙе миҫалға килтерергә була. Улар - тәбиғәттәре буйынса гонаһһыҙ, изге күңелле, халҡы өсөн борсола, әммә нәҡ улар бөтәһенән дә күберәк мыҫҡыллауға, ғәйепләнеүҙәргә дусар була.

Ерҙәге тормош һынау ғына. Михнәттәр кешенең рухи үҫешенә булышлыҡ итә, камиллыҡҡа ынтылырға ярҙам итә.

Телмәребеҙҙән кешене рәнйетерлек һүҙҙәр ысҡынырға ғына тора. Туҡта. Үлсә. Уйлан. Һинең маҡсатың лайыҡлы булырға тейеш - һүҙҙәр менән яҙаламаҫҡа, ә башҡаларҙың йөрәген үҙеңдең йөрәгеңдә һаҡларға. Һинең һүҙҙәрең эшләгән эштәреңә тура килергә тейеш. Әгәр ҙә үҙеңдең әйләнә-тирәңә яҡшылыҡ ҡына бүләк итһәң, һинең күңел торошоң да күркәм буласаҡ!

Әгәр ҙә һин ҡаршылыҡтар килеп сыҡҡан ваҡытта үсләшһәң, һәр бер ауырлыҡҡа асыуланһаң, һәр әҙәпһеҙлеккә йөҙ емерә башлаһаң, һин нисек көҙгө булып торасаҡһың?

Камил йөрәк шундай булырға тейеш: ул нәҡ мәңгелек донъяла зарар күреүсе залимдарҙың йәне һәм намыҫһыҙ кешеләр өсөн өҙгөләнә...

Бына хуш еҫле нәфис роза еҫе... Үҙенең еҫен роза сәскәһе энәләре изгелектән, дуҫлыҡтан ала. Роза тураһында шундай риүәйәт бар. Розалар шулай уйлай: "Нинә минә энәләрем өсөн борсолорға әле? Мин үҙемдең сабырлығым арҡаһында ҡыуанырға өйрәндем: сәнскеле энәләремде ҡабул иттем. Һәм шул ваҡыт Хоҙай минә донъяға ғәҙәти булмаған хуш еҫ таратырға насип итте..."

Гонаһлыларға көйөнөү урынына, уларҙы ҡанаттары яраланған ҡош тип ҡабул итеп, үҙеңдән йөрәк һарайына алыу һәм йылытыу яҡшыраҡ түгелме ни?..

Ә ул йөрәк өс сифатҡа эйә: "Беренсеһе - ул үпкәләтмәй, икенсеһе - үпкәләмәй, өсөнсөһө - изге эштәр өсөн бер ниндәй ҙә бүләкләүҙәр көтмәй һәм быны тик Аллаһы Тәғәлә ризалығы өсөн генә башҡара".

Эй, Аллаһ! Беҙҙең йөрәктәребеҙҙе изгелек һәм яҡтылыҡ ҡына һибеүсе ит! Беҙҙе үпкәләтмәү һәм үпкәләмәүҙең бөйөк сәнғәтенә өйрәт!

### СОЛАТАН ТУНӘДЖИНА ДОҒАҺЫ -

**теләһә ниндәй ауырлыҡтан ҡотҡарыу һәм изгелек һорау - көнөнә 40 тапҡыр уҡы!**

"Аллаһуммә салли ғәлә Сәйединә Мөхәмәҙин (үә ғәлә әли Сәйединә Мөхәмәҙин) солатан тунәджина биһә мин джами-ғиль әһүәәли үәль афәәт,

Үә тәкди ләнә биһә мин джамиғиль хаджаат,

Үә тутах-хируна биһә мин джамигис-сәйәәт,

Үә тарфа-уна биһә әли дәррәджәәт,

Үә тубәллиғунә биһә аҡсаль ғайаати мин джамиғиль хайраати филь хайаати үә бәғдааль мамаат"

"Хәсби Аллаһу үә нигәмәль Вәкиль (3 тапҡыр),

Нигәмәль Мәүлә үә нигәмәль Насир,

Ғуфранәкә, Раббана, үә ғәләйкаль масир".

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Ни өсөн изгелек һәр өлкәлә лә йоғошло

**Әгәр һеҙ зифағыҙ буйынса эшләргә тейеш булмаған, әммә ул ниндәйҙер проблеманы хәл иткән эште башҡараһығыҙ икән, бының өсөн өҫтәмә түләү талап итергә тейешһегеҙме?**

Әгәр ҡунаҡ китап кәштәгеҙҙә һеҙ уҡыған һәм ҡайҙа ҡуйырға белмәгән китап менән ҡыҙыҡһынһа, һеҙ унан аҡса түләтер инегеҙме?

Һеҙҙе хеҙмәтләндергән официант - үҙ эшенең оҫтаһы. Ул һеҙгә менюны аңлата, өҫтәлде сервировкалауҙағы етешһеҙлектәрҙе төҙәтә, десерт буйынса кәңәштәрен бирә һәм барыһы ла яҡшы булыуын күҙәтә. Уға сәйлек аҡсаны йәлләмәҫһегеҙме?

Өҫтәмә аҡса алмаҫҡа, китап өсөн аҡса түләтмәҫкә, официантҡа сәйлекте ғәҙәттәгенән күберәк бирергә сәбәп бар. Ул етәксеңдең, ҡунағыңдың, официанттың һеҙгә мөнәсәбәтендә, Ижадсының мөнәсәбәтендә сағыласаҡ.

Ни өсөн шулай килеп сыға, быға бер генә белешмә лә, энциклопедия ла, философик трактат та яуап бирмәҫ. Кеше тәжрибәһе шуны асыҡлай: Ижадсы изгелекте бүләкләмәй ҡалмаясаҡ, ә был бүләкләү мул буласаҡ.

"Бәйғәмбәр" китабының авторы Хәлил Джебран яҡынса шулай тиғән: ашҡа байҙарҙы саҡырмағыҙ. Улар ҙа һеҙҙе яуап итеп саҡырыр. Ярлыларҙы саҡырығыҙ - улар һеҙҙе ашҡа ала алмай һәм һеҙгә Ғаләм бурыслы булып ҡала. Ғаләм һеҙгә мотлаҡ түләр. Был ҡанун, ерҙең тартыу көсө кеүек үк, шикһеҙ.

Был эшлекле кешеләр үҙ тауарҙарын йәки хеҙмәтен бушҡа бирһен йәки эшләһен, тигәнде аңлатмай. Улай улар бик тиҙ ярлыланыр, ә был төҙәүҙе, ә емереүҙе аңлата. Һөҙөмтәлә донъя тормош өсөн кәрәкһеҙерәккә әйләнер.

Ә бына һеҙгә рәхмәтегеҙҙе, ярҙамығыҙҙы бушлай бирергә кәрәк. Ҡайһы берҙә бушлай булған өсөн дә нимәгәлер хаҡ түләргә кәрәк. Мәҫәлән: Көнбайыш дәүләт университетының баш китапханасыһы, дәүләттең килеме кәмеү сәбәпле, барлыҡ дәүләт учреждениеларына бирелгән дәүләт ассигнованиеларының ҡырҡа кәмеүе проблемаһы менән күҙмә-күҙ осраша. Ул бында тиҫтә йылдан ашыу эшләгән була һәм уның тырышлығы арҡаһында китапхана илдәге иң ҙурына әүерелә.

Хәҙер уға яңы китаптар килеүҙән туҡтау, баҫмаларҙың кәмеүе, китапхананың эш сәғәте ҡыҫҡарыуы хәүефе янай. Башҡа бүлексәләрҙең етәкселәре, шундай уҡ проблема менән осрашып, ҡулдарын һәлендереп, танауҙарын төшөрөп: "Нимә булһа ла булыр", - ти. Ә был китапханасы ундайҙарҙан булмай.

- Мин ҡорбан булырға түгел, ә проблемаларҙы хәл итергә тейешмен, - ти ул үҙ-үҙенә һәм башҡаларға ла. Ул барыһын да китапхананың хәле менән таныштырып, ҡулланыу өсөн йыллыҡ 30 доллар иғәнә билдәләй. Уға аҡса аға башлай. Хатта бер ваҡытта ла китапханаға йөрөмәгән кешеләр ҙә китапхананың абруйын һаҡлап ҡалыу өсөн иғәнә индерә. Ошо ыңғай фекерләгән, проблемаларҙы хәл итергә әҙер булған кеше арҡаһында университет, бюджет ассигнованиеларын ҡырҡыуға ҡарамаҫтан, хәҙер ҙә илдә иң яҡшы китапханаларҙың береһенә эйә.

**Роберт СТОУН.**

БЫЛ - ГОНАҺ!



# КИСЕРЕРЛЕК СӘБӘПҺЕҘ УРАҘА ТОТМАУ

**Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Рамаҙан айында кисерерлек сәбәбе булмай тороп ураҙаһын бер көнгә генә лә ҡалдырған кеше, хатта бөтә ғүмере буйына ураҙа тотһа ла, уны аҡлай алмаясаҡ".**

"Бер намаҙҙан икенсе намаҙға, бер йоманан икенсе йомаға, бер Рамаҙан айынан икенсе Рамаҙан айына тиклем ҙур гонаһтарҙы эшләүҙән ҡасҡан кешенең бәләкәй гонаһтары ярлыҡанасаҡ".

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) шулай ти: "Ислам биш бағанаға нигеҙләнгән: Аллаһтан башҡа илаһ юҡ һәм Мөхәммәт (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) уның бәйғәмбәре тип таныҡлыҡ килтереү; намаҙ ҡылыу; зәкәт түләү; рамаҙан айында ураҙа тотоу; хаж".

Ибн Ғәббәс (радиаллаху анху) һөйләй: "Ислам асылы һәм уның нигеҙе өс терәктән тора: Аллаһтан башҡа илаһ юҡ тип таныҡлыҡ биреү; намаҙ уҡыу; зәкәт түләү. Шуларҙың берәүһенән булһа ла баш тартҡан кеше яңылышасаҡ".

Аллаһ илсеһе (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм): "Әгәр кеше алдашыуҙан, хәйлә буйынса эшләүҙән туҡтамаһа һәм үҙенең көфөрлөгөнән баш тартмаһа, уның аҙыҡтан һәм эсемлектән баш тартыуы Аллаһҡа кәрәкмәйәсәк", - тип әйткән.

"Рамаҙан айына тиклем йәшәп тә ярлыҡанмаған кешегә бәлә булыр".

Бөтә мосолмандар ҙа, Рамаҙан айында кисерерлек сәбәбе булмай тороп ураҙанан баш тартыусы зина ҡылыусыға, башҡаларҙың мөлкәтенә ҡул һуҙыусыға, йәки эскесегә ҡарағанда ла насарыраҡ, тигәнде ҡабул итә. Бындай ҡылыҡтар уның иманында шик тыуҙырыуы һәм уны динһеҙҙәр рәтенә индереүе мөмкин.



## 16 АВГУСТА
## ПОНЕДЕЛЬНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Жди меня"
21.00 "Время"
21.30 "Танго с ангелом", 13-я серия. Драма
22.30 "Химик", 5-я серия. Детектив
23.30 "Бунт Енисея. Хроника укрощения"
00.40 "Любовь и неприятности"
02.20, 03.05 "Принцесса"
03.00 Новости
04.00 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 117-я серия
18.05 "Ефросинья", 126-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Дыши со мной", 11-я и 12-я серии
23.05 "Городок"
00.05 "Вести+"
00.25 "О самом главном"
01.25 "Плохая репутация". Боевик
03.20 "Честный детектив"
03.55 "Deadline". "Черная" комедия

### НТВ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 13.30**

13.30 "Супруги". Детективный сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Глухарь". Сериал
20.30 "Знахарь", 9-я, 10-я и 11-я серии. Сериал
23.15 "Сегодня"
23.35 "Город соблазнов"
01.10 "Футбольная ночь"
01.45 "Свояки"
04.00 "Молодые и злые"

### БСТ

**Уважаемые телезрители! Телеканал приносит свои извинения за перерыв в работе в связи с профилактикой до 14.00**

14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Художественный фильм
17.00 "Виктория"
17.45 Мультфильм
18.00 "Полезные новости"
18.15 Художественный фильм
20.15 "Историческая среда"
20.45 "Сэнгелдэк"
21.00 "Деловой форум"
21.30 Новости
22.00 "Спортивный интерес"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.00 Российское кино на канале БСТ
00.45 Прогноз погоды

## 17 АВГУСТА
## ВТОРНИК
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Раньше всех"
09.50 "Жить здорово!"
11.00 "Модный приговор"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Танго с ангелом". Драма
22.30 "Химик", 6-я серия. Детектив
23.30 "Олег Табаков. Зажигающий звезды"
00.40 "Застрял в тебе". Комедия
02.50, 03.05 "Кабинетный гарнитур"
03.00 "Новости"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00, 00.25 "О самом главном"
11.00 "Вести"
11.40 "Местное время. Вести-Башкортостан"
12.00 "Маршрут милосердия". Сериал
13.00 "Формула любви"
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 118-я серия
18.05 "Ефросинья", 127-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Дыши со мной", 13-я и 14-я серии
23.00 "Ледоруб для Троцкого. Хроника одной мести"
00.05 "Вести+"
01.20 "Правое дело". Триллер
03.20 "Вавилон-5. Призыв к оружию"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Квартирный вопрос"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Криминальное видео". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.00, 19.00 "Сегодня"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Глухарь". Сериал
20.25 "Солнечный удар". Боевик
22.15 Футбол. Лига Чемпионов УЕФА. "Зенит" (Россия) - "Осер" (Франция). Прямая трансляция
00.25 "Знахарь", 12-я серия
01.20 "Сегодня"
01.40 "Город соблазнов". Сериал
03.25 "Лига Чемпионов УЕФА. Обзор"
03.40 "Сталин. Live"
04.25 "Молодые и злые"

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 Новости (на русск. яз.)
09.10 "Полезные новости"
09.25 "Виктория"
10.10 "Родословная малой Родины"
10.30 "Детский фильм"
11.55 "Информационный стенд"
12.00 Новости (на башк. яз.)
12.10 "Планета Земля"
13.05 "Дети войны". Презентация книги
13.55 "Информационный стенд"
14.00 "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск.яз.)
15.10 Художественный фильм
17.00 "Информационный стенд"
17.05 "Виктория"
17.55 "Информационный стенд"
18.00 "Полезные новости"
18.15 Художественный фильм
20.15 "Времечко"
20.45 "Сэнгелдэк"
21.00 "Паблисити" с Азаматом Саитовым
21.30 Новости (на русск.яз.)
22.00 "Криминальный спектр"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.00 Фестивальное кино на БСТ
00.35 Прогноз погоды

## 18 АВГУСТА
## СРЕДА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Раньше всех"
09.50 "Жить здорово!"
11.00 "Модный приговор"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять. Простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 "Время"
21.30 "Танго с ангелом". Драма
22.30 "Химик", 7-я серия
23.30 "Владимир Мигуля. Обратный отсчет"
00.40 "Елизавета". Историческая драма
02.50, 03.05 "Спасите Грейс"
03.00 Новости

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Назад в молодость"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.40 "Местное время. Вести-Башкортостан"
12.00 "Маршрут милосердия". Сериал
13.00 "Формула любви"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.35 "Дворик", 119-я серия
18.05 "Ефросинья", 128-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши"
21.00 "Дыши со мной", 15-я и 16-я серии
23.05 "Бомба для певца. Владимир Мигуля". Док. фильм
00.05 "Вести+"
00.25 "О самом главном"
01.20 "Гори, гори, моя звезда". Трагикомедия
03.15 "Вавилон-5. Легенда о Рейнджерах"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Дачный ответ"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Криминальное видео". Сериал
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Глухарь". Сериал
20.30 "Знахарь", 13-я, 14-я и 15-я серии
23.15 "Сегодня"
23.35 "Город соблазнов". Сериал
01.20 "Сталин. Live"
02.20 "Мертвые до востребования"
04.00 "Молодые и злые". Сериал

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 Новости (на русск. яз.)
09.10 "Полезные новости"
09.25 "Виктория"
10.10 "Родословная малой Родины"
10.30 "Детский фильм"
11.55 "Информационный стенд"
12.00 Новости (на башк. яз.)
12.10 "Планета Земля"
13.00 "Сокращая расстояния"
13.45 Мультфильм
13.55 "Информационный стенд"
14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск.яз.)
15.10 Художественный фильм
17.00 "Виктория"
17.55 "Информационный стенд"
18.00 "Полезные новости"
18.15 "Историческая среда"
18.45 "Пятая четверть"
19.20 "Действующие лица"
20.00 "Час президента". Прямой эфир
21.00 "ВЦВ"
21.30 Новости
22.00 "Малый бизнес сегодня"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.00 Художественный фильм
01.05 Прогноз погоды

## 19 АВГУСТА
## ЧЕТВЕРГ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Раньше всех"
09.50 "Жить здорово!"
11.00 "Модный приговор"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "След". Сериал
19.00 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят" с Андреем Малаховым"
21.00 Время
21.30 "Танго с ангелом". Драма
22.30 "Химик", 8-я, закл. серии
23.30 "Обмани меня", 19-я серия. Сериал
00.30 "Чокнутый профессор-2. Семейка Кламп". Комедия
02.20, 03.05 "Поле мечты"
03.00 Новости
04.20 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Ауаз"
10.00, 00.25 "О самом главном"
11.00, 14.00, 17.00 "Вести"
11.35 "Местное время. Вести-Башкортостан"
12.00 "Маршрут милосердия"
13.00 "Формула любви"
14.30, 17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры"
17.35 "Дворик", 120-я серия
18.05 "Ефросинья", 129-я серия. Сериал
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дыши со мной", 17-я и 18-я серии
23.05 "2012. Сбудутся ли пророчества майя?" Док. фильм
00.05 "Вести+"
01.20 "Близкие враги"
03.30 "Вавилон-5. Затерянные сказания"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Следствие вели..."
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00, 19.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Криминальное видео"
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.30 "Глухарь". Сериал
20.35 "Я объявляю вам войну". Боевик
22.25 Футбол. Лига Европы УЕФА. ЦСКА (Россия) - "Анортосис" (Кипр). Прямая трансляция
00.25 "Знахарь", 16-я серия
01.20 "Сегодня"
01.40 "Город соблазнов"
03.25 "Сталин. Live"
04.20 "Молодые и злые". Сериал

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 Новости
09.10 "Полезные новости"
09.25 "Виктория"
10.10 "Родословная малой Родины"
10.30 "Детский фильм"
11.55 "Информационный стенд"
12.00 Новости (на башк. яз.)
12.10 "Планета Земля"
13.00 "Тай-тулак"
13.30 Мультфильм
13.55 "Информационный стенд"
14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск.яз.)
15.10 Художественный фильм
17.00 "Информационный стенд"
17.05 "Виктория"
17.55 "Информационный стенд"
18.00 "Полезные новости"
18.15 Художественный фильм
20.15 "Времечко"
20.45 "Сэнгелдэк"
21.00 "Формула успеха"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Точка зрения"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.00 "Шедевры мирового кинематографа"
01.00 Прогноз погоды

## 20 АВГУСТА
## ПЯТНИЦА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

05.00 "Доброе утро"
09.00 "Новости"
09.05 "Раньше всех"
09.50 "Жить здорово!"
11.00 "Модный приговор"
12.00 Новости
12.20 "Участок"
13.20 "Детективы"
14.00 Другие новости
14.20 "Понять, простить"
15.00 Новости
15.20 "Хочу знать"
15.50 "Обручальное кольцо". Сериал
16.50 "Федеральный судья"
18.00 Вечерние новости
18.20 "Поле чудес"
19.10 "Давай поженимся!"
20.00 "Пусть говорят"
21.00 Время
21.30 "Детектор лжи"
22.30 "Приют комедиантов"
00.00 "Сигнал из космоса". Концерт группы "Сплин"
01.20 "Ноттинг Хилл". Мелодрама
03.40 "Индеец, прячущий свое имя
04.30 "Спасите Грейс"

### РОССИЯ 1

05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.08, 08.36 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.05, 08.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
09.05 "Мусульмане"
09.15 "Мой серебряный шар"
10.00 "О самом главном"
11.00, 14.00 "Вести"
11.35 "Вести-Башкортостан"
12.00 "Маршрут милосердия"
13.00 "Формула любви"
14.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.50 "Каменская". Сериал
16.30 "Кулагин и партнеры". Сериал
17.00 "Вести"
17.15 "Местное время. Вести-Башкортостан"
17.35 "Дворик", 121-я серия
18.05 "Ефросинья", 130-я серия
19.00 "Слово женщине". Сериал
20.00 "Вести"
20.30 "Местное время. Вести-Башкортостан"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Дыши со мной", 19-я и 20-я, закл. серии
23.00 "Девчата"
23.50 "Сумасшедшая любовь". Мелодрама
01.45 "Мех: воображаемый портрет Дианы Арбус. Драма
03.55 "Горячая десятка"

### НТВ

06.00 "Рублевка. Live"
07.00 "Сегодня утром"
08.30 "Коктейль Молотова"
09.30 "Чистосердечное признание"
10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
10.25 "Профессия - репортер"
11.00 "Колодец". Короткометражный художественный фильм
11.20 "И была ночь". Короткометражный художественный фильм
12.00 "Суд присяжных"
13.30 "Супруги". Сериал
15.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
16.30 "Возвращение Мухтара". Сериал
18.30 "Обзор. Чрезвычайное происшествие"
19.00 "Сегодня"
19.30 "Следствие вели..."
20.30 "Одиночка". Боевик
22.30 "Назад в будущее-3". Фантастика
00.50 "Женский взгляд". "Надежда Бабкина"
01.35 "Сталин. Live"
02.35 "Черные береты"
04.00 "Мертвые до востребования"

### БСТ

07.00 "Салям"
09.00 Новости
09.10 "Полезные новости"
09.25 "Виктория"
10.10 "Родословная малой Родины"
10.30 "Детский фильм"
11.55 "Информационный стенд"
12.00 Новости (на башк. яз.)
12.10 "Райхан"
12.40 "Артылыш"
13.10 Мультфильм
14.00 Дневной канал "Хорошее настроение"
15.00 Новости (на русск.яз.)
15.15 Художественный фильм
17.00 "Йома"
17.30 "Узаман"
17.55 "Информационный стенд"
18.00 "Полезные новости"
18.15 Художественный фильм
20.15 "Времечко"
20.45 "Сэнгелдэк"
21.00 "Лжепророки"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Криминальный спектр"
22.30 Новости (на башк. яз.)
23.00 "Киноколлекция Оскар"
00.55 Прогноз погоды

## 21 АВГУСТА
## СУББОТА
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Мастер из Кламси"
06.40 "Год теленка"
08.10 "Дисней-клуб"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.40 "Слово пастыря"
10.00, 12.00 Новости (с субтитрами)
10.10 "Смак"
10.50 "Владимир Мигуля. Обратный отсчет"
12.10 "Офицеры. Одна судьба на двоих"
15.50 "Язык запахов"
16.30 "Скульптор смерти". Детектив
18.00 "Знакомство с родителями" с Розой Сябитовой
19.00 "Брачные игры"
20.00 "Среда обитания"
21.00 "Время"
21.20 "Здравствуйте, девочки!"
22.40 Футбол. Чемпионат России. XVIII тур. "Спартак" (Москва) - "Томь"
00.40 "Аферисты Дик и Джейн развлекаются". Комедия"
02.20 "Казанова". Мелодрама
04.20 "Спасите Грейс"
05.10 "Детективы"

### РОССИЯ 1

05.00 "Сумка инкассатора". Детектив
06.45 "Вся Россия"
07.00 "Сельское утро"
07.25 "Диалоги о животных"
08.00 "Вести"
08.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
08.20 "Военная программа"
08.45 "Субботник"
09.25 "Украденный месяц"
09.40 "Пограничный пес Алый". Приключения
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан"
11.20 "Паблисити с Азаматом Саитовым"
11.40 "Качество жизни"
11.55 "Дела и люди"
12.05 "Рецепты здоровья"
12.15 "Комната смеха"
13.10 "Сто к одному"
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Мужики!.." Мелодрама
16.20 "Субботний вечер"
18.15 "Дом с сюрпризом". Мелодрама. (В перерыве 20.00 "Вести")
22.20 "Спасибо за любовь". Мелодрама
00.30 "Ниндзя". Боевик
02.20 "Вымогательство". Криминальная драма
04.30 "Обидеть королеву. Вия Артмане"

### НТВ

05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Сказки Баженова"
08.00, 10.00, 13.00 "Сегодня"
08.20 "Золотой ключ". Лотерея
08.45 "Их нравы"
09.25 "Смотр"
10.20 "Главная дорога"
11.00 "Кулинарный поединок"
12.00 "Квартирный вопрос"
13.25 "Особо опасен!"
14.05 "Лучший город Земли"
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Преступление будет раскрыто". Детективный сериал
18.10 "Очная ставка"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Самые громкие русские сенсации"
21.00 "Ты не поверишь!"
21.40 "Выйти замуж за генерала". Комедия
23.55 "Легенды видео". "Полицейская академия-7. Миссия в Москве". Комедия
01.35 "Типа крутые легавые". Комедия
04.00 "Мертвые до востребования"

### БСТ

08.00 Новости (на русск. яз.)
08.10 "Сельский час"
08.25 "Ребятам о зверятах"
09.00 Мультфильм
10.30 "Советы садоводам"
11.00 Б. Бикбай. "Кодаса". Спектакль Башкирского государственного академического театра драмы им. М. Гафури
13.00 "Фотолик"
14.30 "Летняя Зоолимпиада"
15.25 "Дарю песню"
16.40 "Сулпылар"
17.00 Мультфильм
17.10 Хит-парад "Етеган"
18.00 "Аркаим"
18.40 "Вестник Газпрома"
19.00 Новости (на башк. яз.)
19.20 "Дарю песню"
20.45 "Сэнгелдэк"
21.00 "ВЦВ"
21.30 Новости (на русск. яз.)
22.00 "Новое кино"
22.25 Семейная комедия на БСТ
00.25 Прогноз погоды

## 22 АВГУСТА
## ВОСКРЕСЕНЬЕ
### ПЕРВЫЙ КАНАЛ

06.00 Новости
06.10 "Екатерина Воронина"
07.50 "Армейский магазин"
08.20 "Дисней-клуб"
09.10 "Здоровье"
10.00, 12.00 Новости
10.20 "Пока все дома"
11.10 "Счастье есть!"
12.10 "Фазенда"
12.50 "Олег Табаков. Я все делаю с удовольствием"
13.50 "Испытательный срок"
15.40 "Кого ударит молния"
16.30 "Прилетит вдруг волшебник"
18.00 "Знакомство с родителями" с Розой Сябитовой"
19.00 "Брачные игры" с Анастасией Заворотнюк и Дмитрием Дибровым"
20.00 "Горящее лето-2010"
21.00 "Время"
21.30 "Дорога перемен". Мелодрама
23.40 "Футбол. Чемпионат России. XVIII тур. "Локомотив" - "Динамо"
01.40 "Зуд седьмого года". Комедия
03.40 "Женщины хотят танцевать"

### РОССИЯ 1

05.40 "Расследование". Детектив
07.05 "Смехопанорама Евгения Петросяна"
07.35 "Сам себе режиссер"
08.25 "Утренняя почта"
09.00 "Республика Шкид". Трагикомедия
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести-Башкортостан". Неделя в городе"
11.50 "Городок"
12.20 "Искушение". Драма
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести-Башкортостан"
14.30 "Честный детектив"
15.00 "Неспетая песня Анны Герман"
16.00 "Смеяться разрешается"
17.50 "Здравствуйте вам!" Мелодрама
20.00 "Вести"
20.25 "Ее сердце". Мелодрама
22.15 "Неидеальная женщина". Мелодрама
00.15 "Улицы в крови". Криминальная драма
02.15 "Невидимый цирк"
04.05 "Городок"

### НТВ

05.45 "Рублевка. Live"
06.45 "Люди Икс: эволюция"
07.30 "Дикий мир"
08.00, 10.00, 13.00, 16.00 "Сегодня"
08.20 "Русское лото"
08.45 "Их нравы"
09.25 "Едим дома!"
10.20 "Первая передача"
11.00 "Кремлевские жены. Екатерина Калинина. Рабочая из высшего света"
12.00 "Дачный ответ"
13.00 "Сегодня"
13.25 "Впервые замужем". Драма
15.05 "Своя игра"
16.00 "Сегодня"
16.20 "Преступление будет раскрыто"
18.10 "И снова здравствуйте!"
19.00 "Сегодня"
19.25 "Чистосердечное признание"
20.00 "Дорожный патруль" "Расплата". Детективный сериал
23.50 "Авиаторы"
00.25 "Брачный контракт". Сериал
02.15 "Чак и Ларри: пожарная свадьба"
04.25 "Молодые и злые"

### БСТ

08.00 Новости (на русск. яз.)
08.10 "Салям"
08.30 "Ребятам о зверятах"
09.00 Мультфильм
10.10 "Бабушкин сундучок"
10.45 "Тэмле"
11.15 "Сулпылар"
11.30 "Семер"
11.50 "Байтус"
12.30 "Артылыш"
13.00 "Автолегенды"
13.30 "Дарю песню"
15.00 Художественный фильм
17.00 "Байык"
18.00 "Дарю песню!"
19.10 "Вечер.com"
20.00 "Ловцы душ"
20.45 "Сэнгелдек"
21.10 "Урал Лото 6 из 40"
21.30 "Ватан". События недели"
22.10 "Приключенческое кино"
00.10 Прогноз погоды

Хеҙмәттәшебеҙ - Өфө ҡала округы Совет районы хакимиәтенең социаль һәм гуманитар мәсьәләләр буйынса идаралығы начальнигы Айрат Искәндәровтың, атаһы

**Рим Сәйетбаттал улының**

вафаты айҡанлы, ауыр ҡайғыһын уртаҡлашабыҙ.

Өфө ҡала округының Совет районы хакимиәте коллективы.

**Донъя бер мосафирханалыр, инсан да рухтар ғәләменән, әсә ҡарынынан, балалыҡтан, йәшлектән, ҡартлыҡтан, ҡәбер ғәләменән әхирәткә күсеп киткән бер юлсылыр. Ауыр тупрағы еңел булһын!**

КИТАБЕННАС

# АС-ЯЛАНҒАС КӨЙӨ ЛӘ...

## һуғыштағыларҙы хәстәрләгәндәргә мәҙхиә был

**Быйылғы йыл нисек кенә төрлө ваҡиғаларға бай булмаһын һәм төрлө үҙгәрештәре менән һушты алмаһын, улар барыбер йылдың иң төп ваҡиғаһы - Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығының әһәмиәтен төҫһөҙләндерә алмай. Миллиондар ҡаны менән яуланған был Еңеү тарихы фонында башҡа ваҡиғалар көндәлек, ғәҙәти ығы-зығы рәүешендә генә ҡабул ителә. Тик ҡызғаныс, беҙ ана шул ығы-зығыға бәйләнеп, уның әйләнсегендә зыр өйрөлөп, онотолоп та китәбеҙ. Еңеүҙе, тимәк, бөгөнгө көнөбөҙҙө яулаған ҡаһармандар иҫтәлеген беҙ 9 майҙа ғына түгел, ә йыл буйына, киләһе йылдар, быуаттар буйына ла оноторға хаҡыбыҙ юҡтыр, сөнки тыныс тормош, ирек һәм азатлыҡ өсөн, хурлыҡлы ҡоллоҡҡа төшмәҫ өсөн тарихыбыҙҙа ошо һуғыштан да фажиғәлеһе башҡа булмағандыр. Һәм булмаһын да.**

"Ерҙә һуңғы һалдат йәшәгәнгә тиклем, атай-олатайҙарын юғалтҡан һуңғы бала, ейән йәшәгәнгәсә тиклем һыҙлаясаҡ ул һуғыш яралары. Аҙаҡ тарихтың мәңгелек утлы мөһөрө булып ҡаласаҡ". Был юлдар танылған шағирә, журналист **Зөһрә Ҡотлогилдинаның** ошо көндәрҙә З. Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә баҫылып сыҡҡан **"Һуғыш балалары - тарих яралары"** тигән китабынан алынды. Был йыйынтыҡҡа автор Бөйөк Еңеүҙең 65 йыллығына 65 тыл ветеранының - һуғыш йылдарында тылдағы бөтә ауырлыҡтарҙы үҙ иңдәрендә күтәргән ҡатын-ҡыҙҙарҙың һәм балаларҙың иҫтәлек-хәтирәләрен туплаған.

"28 йәшендә генә гүр эйәһе булған, аңлы тормошомда үҙем бер тапҡыр ҙа "атай" һүҙен әйтмәгән атайыма, 25 йәшендә генә тол ҡалып, үҙе аяҡһыҙ ҡалһа ла ике ҡыҙын аяҡҡа баҫтырған әсәйемә, бик күп тол ҡатындарға, етем балаларға, ҡаһарман тыл ветерандарына, уларҙың ҡаҡшамаҫ рухтарына бер йәдкәр булһын", - ти З. Ҡотлогилдина ошо йыйынтығына бағышлау һүҙендә.

Әйткәндәй, авторҙың был йыйынтыҡты туплай башлаған мәлендә уның ҡайһы бер өҙөктәре тәүләп "Совет Башҡортостаны" гәзитендә рәттән бер нисә һанда донъя күргәйне. Шул ваҡыт ошо мәҡәләгә ҡарата гәзит уҡыусыларҙан редакцияға яуған шаңдау хаттары йыл почтаһының иң күп өлөшөн тәшкил иткәндәр. Яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге дәүләт премияһы лауреаты Рәшит Солтангәрәев та Зөһрә Ҡотлогилдинаның был изге эшенә фатиха биреп, хуплап сыҡҡайны ул саҡ. Һәм бына, ниһәйәт, йыйынтыҡ беҙҙең ҡулда. Хәтирәләр авторҙары үҙҙәренә генә хас һөйләү стиле, хикәйәләү үҙенсәлектәре менән уҡыусының алдына килеп баҫҡандай, ә ваҡиғалар теҙмәһе ҡыҫҡа метражлы кинофильмдағы кеүек, бер-бер артлы күҙ алдынан үткәндәй. Әйе, хас та кинолағы кеүек былар бөтәһе лә бөгөнгө уҡыусы өсөн. Ҡызғаныс та, ултырып иларлыҡ фажиғәле лә, ләкин шул уҡ ваҡытта халҡыбыҙҙың рухи ныҡлығын, ниндәй генә хәлдәрҙә лә изгелеккә, яҡшылыҡҡа һәм яҡтылыҡҡа һүнмәҫ ышаныс-оптимизмын, ниндәй генә хәлдәрҙә лә йәшәүгә ынтылышын сағылдыра һәр бер хикәйәт.

Шуныһы айырыуса таң ҡалдыра: ас, ярым яланғас көйө ауыр тыл эштәрен башҡарған ҡатын-ҡыҙ һәм үсмерҙәрҙең күңеле ҡатмай, изгелек эшләүҙән кәре ҡайтмай. Улар яҡты уйлы, эскерһеҙ, хис-тойғоға бай кешеләр булып ҡала алған.

"Ашағаныбыҙ - үлән, балтырған да кесерткән, серек картуф. Бүре күп ине, малдарҙы ҡырҙы. Үлгән мал итен ашаныҡ... Көҙ яңы картуф ҡаҙып алғас, уны дәүләткә тапшырабыҙ. Туҡмас һымаҡ турап, мейестә киптерәбеҙ. 8 кг тапшырырға кәрәк, киптергәс, енеләйә. Йыйылған бөтә картуфыбыҙ шуға китеп бөтә..."

Үҙҙәре ашамаһа ла, һуңғы ризыҡтарынан өҙөп, фронтҡа ебәрә тылдағылар. Һыйыр, үгеҙ егеп ер һөрөү тиһенме, утын ҡырҡыу, торф сығарыуҙа булһынмы, тәүлегенә 12-шәр сәғәт вагондан тонналап күмер бушатыуҙа, элеваторҙан ҡарлы-боҙло һыу кисеп, тоҡлап орлоҡ йөкмәп ҡайтыуымы, аслыҡтан ҡырылған кешеләрҙең мәйеттәрен күмеүме, бер уҡ ашлыҡ өсөн төрмәгә ултырыуҙарҙы - бөтәһен дә кисерә, бөтәһенә лә түҙә тылдағылар.



Йыйынтыҡҡа тыл геройҙарының хикәйәттәренән тыш, яҙыусы Рәшит Солтангәрәев, профессор Әхмәт Сөләймәнов, хеҙмәт ветераны Р. Яуымбаевтың мәҡәләләре, шулай уҡ Зөһрә Ҡотлогилдинаның атаһы Сәлимйән Ҡотлогилдиндың бер шәлкем шиғырҙары тупланған.

Шағирә яҡыраҡ тыуған яғында - Көйөргәҙе районы Ялсыҡай ауылында булып, аҡ ҡорбан салдырып, һуғыш һәм тыл ветерандарының изге рухына, ата-әсәһе рухына бағышлатып аят уҡытып, яҡташтары - әле иҫән ҡалған китап геройҙарына ошо йәдкәрҙе таратып, изге ғәмәл башҡарып ҡайтты.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

ТӘГӘРМӘС

# ҠАЙЫШТАРЫҒЫҘ...

## эләктерелгәнмее-ееү?

**Бөтәһе лә ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәренең артҡы ултырғыста бала ултырған "Волга" машинаһын туҡтатыуынан башлана. Өс йәшлек баланың ҡайышҡа эләктерелмәүен инспектор юл хәрәкәте ҡағиҙәһен боҙоу, тип таба.**

- Мин баланы балалар креслоһында йөрөтөргә кәрәк икәнде беләм, ләкин минең 1994 йылда сығарылған "Волга" машинаһында хәүефһеҙлеклек ҡайыштары ҡаралмаған, - тип аңлатып ҡарай Кирилл. Әммә ЮХХДИ хеҙмәткәре уның дәлилен нигеҙһеҙ тип һанай һәм протокол төҙөп, 500 һум штраф һала.

- Законда, автомобилдә баланы 12 йәшкә тиклем махсус тотоп торорусы ҡоролмала йөрөтөргә кәрәк, тип асыҡ әйтелгән, - тип аңлаталар БР буйынса Эске эштәр министрлығы матбуғат хеҙмәтендә. - Әгәр машина иҫке булып, унда махсус ҡайыштар булмаһа ла, кресло һатып алырға һәм уны дөрөҫ итеп урынлаштырырға кәрәк, шул ваҡытта ул баланың хәүефһеҙлеген тәьмин итер.

Әммә Кирилл ЮХХДИ хеҙмәткәренең фекере менән килешмәй: "Эш аҡсала түгел. Махсус ҡайыштары булмаған машинала баланы нисек кенә эләктермә, ул барыбер ҡурҡыныс аҫтында буласаҡ", - тип һанай йәш егет. Ул судҡа мөрәжәғәт итә. Эштең айышын тикшергәндән һуң Өфө ҡалаһының Октябрь районы суды, ысынлап та, водитель юл хәрәкәте ҡағиҙәләрен боҙмаған, тигән ҡарар сығара. "Әгәр артта ултырыусылар өсөн хәүефһеҙлек саралары булып та водитель уларҙы ҡулланмаһа, ҡағиҙә боҙолор ине. Кирилдың машинаһында бындай мөмкинлек булмаған, шуға күрә суд был осраҡта юл хәрәкәте ҡағиҙәһе боҙолдо, тип тапманы", - тип аңлата хоҡуҡ белгесе Вячеслав Петров. Шулай итеп, Кирилдың ялыуы ҡәнәғәтләндерелә, ә ЮХХДИ сығарған ҡарар кире ҡағыла.

Әлбиттә, ЮХХДИ хеҙмәткәрҙәре элеккесә водителдәрҙе ошондай осраҡтарҙа гәйепләй ала, әммә килешмәүселәрҙең судта үҙ хоҡуҡтарын яҡлау мөмкинлеге барлығын да беләбеҙ хәҙер.

ЙӘШЕЛ ДАУА

# КИШЕР

**Кишер файҙалы ризыҡ булараҡ һәм, ғөмүмән, дауалау маҡсатында киң ҡулланыла. Кишер каротинға һәм унан барлыҡҡа килгән А витаминына бай. Ул тағы ла сабыйҙарҙың үсеүенә ҙур йогонто яһай. Кишер составындағы каротин күҙҙәргә яҡшы тәьсир итә. Тағы ла ул пантолий һәм никотин кислоталарына, төрлө микроэлементтарға бай. Кишер пектиндары һәм күҙәнәктәре ашҡаҙан һәм эсәк эшмәкәрлеген яҡшырта.**

**Миокард инфаркты.** Ауырығандан һуң көнөнә 2 тапҡыр ярты стаканлап яңы һығып алынған һутты 1 балғалаҡ үсемлек майы менән ҡушып ҡабул итергә. Бер аҙ һуңыраҡ сәй урынына эҫәлек емештәре төнәтмәһен эсергә кәрәк.

**Стенокардия.** 1 ҡалаҡ кишер емешен 1 стакан һыуға һалырға, ҡайнатырға. 2 сәғәт төнәтергә. Көнөнә 3 тапҡыр 3 ҡалаҡ ҡабул итергә.

**Веналарҙың варрикоз киңәйеүе.** Кишерҙең 2 ҡалаҡ ҡоро һабағына 0,5 л ҡайнаған һыу ҡойоп, ҡапҡас менән ябып, 8-10 сәғәт төнәтергә. 1-2 ай дауамында стакандың өстән бер өлөшөн көнөнә 4-5 тапҡыр ашарҙан 20 минут алда эсергә.

**Ауыҙ боҙолоу.** Имсәк балаларҙың ауыҙы боҙолғанда кишер һутын балға болғап, ауыҙ тирәһенә һөртәләр.

Бронхит, ларингит. Бер стакан яңы һутҡа 2-3 ҡалаҡ бал бутарға. Көнөнә 4-5 тапҡыр 1 балғалаҡ ҡабул итергә.

**Ашҡаҙандағы яман шеш, ҡурылдай.** Кишер һутын һөт йәки бал менән бутап, көнөнә 4-5 тапҡыр ярты стакан булһа ла эсергә кәңәш ителә. Был организмдың көсөн тотоп тороусы өҫтәмә сара ғына түгел, ә ысынлап та тәьсир итеүсе дауа.

**Һөт биҙе яман шеше.** Әгәр ҙә ниндәй ҙә булһа сәбәптәр арҡаһында операция килеп сыҡмаһа, һөт биҙе яман шеше булған осраҡта уға иң беренсе яңы таҙартылған кишер һалырға кәңәш ителә. Был процедураны көн һайын, кишер шештең тарҡалған ҡалдыҡтарын ашап бөткәнсе дауам итергә кәрәк.

Күп төрлө дауалау һәләтенә эйә булһа ла кишерҙе һаҡ ҡулланырға кәңәш ителә. Яңы кишерҙе һәм уның һутын ашҡаҙандың сей яраһы, бөйән эсәге, юғары кислоталы гастрит булғанда, эс киткәндә ҡулланырға ярамай. Шулай уҡ шәкәр диабеты булған осраҡта ла кишерҙән баш тартырға тура килә. Кишерҙе кәрәгенән күп ашаған осраҡта балаларҙа температура күтәрелеү, ҡоҫоу, тирләү күҙәтелеүе мөмкин.

# МӘТРҮШКӘ

**Медицина фәне таныуынса, мәтрүшкә невроз, йоҡоһоҙлоҡ, баш ауыртыуынан, шулай уҡ гастрит, үт юлдары дискинезияһы, холециститтан ярҙам итә. Уны бронхит, үпкә шешкәндә, бронхоэктаз ауырыуҙары, көслө респиратор ауырыуҙары, фарингит, тонзиллит ауырыуы булған осраҡтарҙа ҡулланалар.**

Халыҡ медицинаһында ла мәтрүшкә киң ҡулланыла. Һанап үтелгәндәргә бауыр ауырыуҙары, күремдең ауырттырып үтеүе һәм тотҡарланыуы, насар кәйеф һәм хатта психиканың боҙолоуы ла өҫтәлә.

**Таркау склероз, диэнцефаль пароксизм.** 10 г үләнгә (йәки 2-3 балғалаҡ) 300 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һарҡытырға. Көнөнә 3 тапҡыр ашауҙан 15 минут алда 100 мл эсергә. Ошо уҡ дарыу эпилепсия ваҡытында ла ярҙам итә.

**Гератрия (картлык).** Мәтрүшкәнең ҡоро япраҡтарын сәй кеүек бешерергә. Көнөнә ике тапҡыр 1 стакан ҡабул итергә.

**Ҡара ҡылау (катаракта).** Мәтрүшкә уның үсешенә ҡамасаулай. Төнәтмәһен (бер стакан ҡайнар һыуға 1 балғалаҡ үлән) көнөнә 2-3 тапҡыр 1/3 стакан эсергә.

**Балаларҙың баш һөйәге эсендәге гипертоник ауырыуы.** 1 балғалаҡ үләнде бер стакан ҡайнар һыуға һалып бешерергә - был 7-10 йәшлек балаға 2-3 көнлөк өлөш (ҡалаҡ менән көнөнә бер нисә тапҡыр эсерергә, төнәтмәне һалҡын урында һаҡларға йәки яңыһын әҙерләргә кәрәк). Ҙурыраҡ йәштәге балаларға 1 ҡалаҡ үләнде бер стакан ҡайнар һыуға бешерергә, был 1-2 көнлөк доза. Бөтә осраҡтарҙа ла төнәтмәне йоҡларҙан ярты сәғәт алда эсергә кәңәш ителә.

**Баш ауыртыуы.** 1 ҡалаҡ үләнгә 250 мл ҡайнар һыу ҡойорға, 2-3 минут ҡайнатырға, йылымыс булғансы һыуытырға һәм шул һыу менән, баш тиреһен һәм сәс тамырҙарын ныҡыраҡ һыулатырға тырышып, башты йыуырға, башты яулыҡ менән урарға һәм ярты сәғәт тоторға. Хатта мигрень булған осраҡта ла ярҙам итә.

✓ *Талҡаҫтың Ирәндек яҡлап яры бигерәк тә борсолоу тыуҙыра, сөнки был яҡлап төрлө инеш-шишмәләр бәреп сыға һәм улар күлде тулыландырып тора. Элек был яҡ яр ябыҡ булған, хәҙер иһә унда ла ял итеүселәр "батшалыҡ" итә...*



ЯҢЫ РУБРИКА: "ХУЖАҺЫ НИНДӘЙ..."

# ҮҘЕБЕҘ ҠӘҘЕРЛӘРГӘ ӨЙРӘНҺӘК,

## башҡалар ҙа беҙҙең өлгөгә эйәрер

**(Башы 1-се биттә).**

"Хужаһы ниндәй, ер-һыуы шундай" тип, Баймаҡ халҡының сәмәнә теймәксе булдыҡ әле. Әлбиттә, был гүзәл төбәктә илһөйәр һәм ерһөйәр халыҡ йәшәй. Уларҙың бик күп матур сифаттары рәтендә көслө рухлылыҡты, асылы менән ғорурлана белеүҙе айырыуса билдәләргә кәрәк. "Беҙ - баймаҡтар!" тип ҡабатларға ярата улар һәм был һүҙҙе әйткәндә үҙҙәренең ошо ергә, тәбиғәтенә, милләтенә һөйөү сикһеҙ булыуын да аңғарта. Шуға ла, беҙҙең ғорур баймаҡтарыбыҙҙың төбәктәге иң гүзәл тәбиғәт комарткыһы - Талҡаҫ күле буйындағы ҡырағайлыҡтарға күҙ йомоп ҡарауы бик ауыр кисерелә. "Күҙ йоммайбыҙ, әрнейбеҙ, - тиҙәр ошо һорауҙы төбәгәндәре, - тик беҙ ни эшләй алабыҙ?"

Ҡулдан килгәндә генә булһа ла эшләргә кәрәк! Бына, мәҫәлән, Талҡаҫ буйына һыу инергә килгән халыҡтың күл буйын сүпләргә лә, бысратырға ла була, тигән мөнәсәбәтенә, яуапһыҙлығына ҡаршы ошо ерҙең хужаһы булып күтәрел дә, ундайҙарҙы тәртипкә саҡырып, иҫкәртеп ҡуй! Ҡырағайлыҡтар һинең танау төбөндә ҡылына. Ә һин өнһөҙ...

Ә бына беҙ был юлы күргән күренеш бигерәк тә хайран итте. Һыуы кәмегәнлектән, Талҡаҫтың яр буйҙарында утраусыҡтар барлыҡҡа килгән. Шул утраусыҡтарҙың береһенә, тимәк, күл ситенә үк инеп ултырған Силәбе өлкәһенән килгән бик "текә" машина. Хужаһы, ҡатыны һәм балалары менән багажнигында һәм кабинаһындағы бар саңлы әйберҙәрен бушатып, тирә-яҡҡа йәйеп һалып, бик ентекләп тороп машинаны йыуа. Һыу ингәндәрен дә шәйләмәнек уларҙың, әйтерһең, улар бында машина йыуырға ғына килгән. Ә ер-һыуҙың хужалары "кунаҡ"тың был мыҫҡылын ситтә генә, ипле генә күҙәтә йә шәйләмәҫкә һалыша. Исмаһам, берәйһе барып, "кунаҡ"тың был эше тәртипһеҙлек һәм күлдән, ер-һыуҙан көлөү, мыҫҡыллау икәнен әйтеп китһә ине лә бит! Юҡ, бындай егетлекте күтәреп ала алманыҡ. Ә беҙҙең, ҡатын-ҡыҙ затының, "Һеҙ яр буйында машина йыуырға ярамай, тигән ябай ғына ҡағиҙәне лә белмәйһегеҙме ни?" тип барып өндәшеүенә машина хужаһы иғтибар ҙа итмәне, бер күҙ һирпеп ҡуйҙы ла, машинаһын ялтыратыуын белде...

Эйе, Талҡаҫ күле буйында хужа юҡ бөгөн. Кем нисек теләй, шулай урынлашып ала ла, сүпләй, бысрата, тәбиғәт мөғжизәһенең йәмен ебәрә. Талҡаҫтың Ирәндек яҡлап яры бигерәк тә борсолоу тыуҙыра, сөнки был яҡлап төрлө инеш-шишмәләр бәреп сыға һәм улар күлде тулыландырып тора. Элек был яҡ яр ябыҡ булған, хәҙер иһә унда ла ял итеүселәр "батшалыҡ" итә...

Талҡаҫ ҡайһы саҡта кешеләрҙең шулай ҡырағайҙарса ҡыланғанына ризаһыҙлыҡ белдереп ала ул алыуға. Беҙ барғанда ла ҡапыл ел сығып, Талҡаҫта тулҡындар уйнатып алды. Кемдәрҙер тулҡындарынан ҡурҡып, күлгә яҡынлашмауҙы хуп күрҙе. Уның бындай ҙа холҡо барлығын белгән урындағы халыҡ, киреһенсә, тулҡынында бәүелеп кинәнде. Туҙынды-туҙынды ла Талҡаҫ, янынан ярҙарына ҡайтты. Күрәһең, ярһыуын ғына баҫып ҡалманы ул, ә кешеләр ташлаған бысраҡтарҙан да үҙен таҙартып алды...

### ӘЙТКӘНДӘЙ...

**Бер Талҡаҫта ғына түгел, бындай күренеш Башҡортостандың башҡа күл-йылға буйҙарында ла ғәҙәти күренеш икәнен беләбеҙ. БР Президентының Интернеттағы блогына, мәҫәлән, Ҡандраҡүл, Асылыкүл буйындағы хужаһыҙлыҡ тураһында әсенеп яҙалар. Иң тәүҙә ер-һыуыбыҙҙы, тәбиғәтебеҙҙе һәм ундағы комарткыларҙы үҙебеҙгә ҡәҙерләргә өйрәнергә кәрәк шул. Юҡһа, беҙҙең хужа булыу тойғоһо йортобоҙ ихатаһынан сығып китеү менән юҡҡа сыға һәм беҙ битарафлыҡҡа соланабыҙ ҙа ҡуябыҙ. Шулай булғас, ер-һыуыбыҙҙы бысраталар, тәләфләйҙәр һәм йәмен ебәрәләр, тип, кемгә үпкәләмәк кәрәк?**

**Гөлбаныу ГӘРӘЕВА.**


“Текә”ләр шулай ҡылана...


Уларға ҡаҙҙар ҙа ризаһыҙлыҡ белдерҙе...


Кешеләрҙең битарафлығына Талҡаҫ бына шулай тулҡын ҡағып, ярһып ала...

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

## КӨТӨҮ БОРОЛҒАНДА...

### аҡһаҡ һарыҡ алға сыға

Ялған мең булһа ла бер хаҡлыҡты еңә алмай.

Һыуыҡ ҡолаҡтан алыр, һылыу йөрәктән алыр.

Яңы байығандан бурысҡа алма.

"Ярап торор"ға өй һалма, "ярап торор"ға бисә алма.

Ала ҡарҙа аласағың булһын, бирәсәгең булмаһын.

Яҡшы кешенең аҡсаһын алама тауар бөтөрөр.

Алға киткән кешенең эте үлән ашар, кирегә киткән кешенең килене урлап ашар.

Артҡа ҡарап ғибрәт ал, алға ҡарап шөһрәт ал.

Эшең кире китһә, эше алға барған менән кәңәш ит.

Арт йортто туйҙырған ҡатын ирҙе алға сығармаҫ.

Яман атҡа менгәнсе, йәйәү йөрө талғансы, яман ҡатын алғансы, буйҙаҡ йөрө ҡаңғансы.

Алғы итәгендә бала баҡһын, арт итәгендә мал баҡһын.

Алғыр кеше - алымынан, йылғыр кеше - аҙымынан.

Эсмәм тигән ҡоҙоҡтан өс әйләнеп эсерһең, ҡайтмам тигән иленә алйығас та ҡайтырһың.

Ир булған ир егерме биштә баш булыр, ир була алмаған ир иллелә лә йәш булыр.

Ҡулың күтәрә алмаған суҡмарҙы биләңә тыҡма.

Алты йәшәр юлдан ҡайтһа, алтмыш йәшәр күрешә килер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәлдәре).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Иса әл Хашими үҙенең ҡатынын бик яратҡан. Бер ваҡыт ул ҡатынына: "Әгәр ҙә һин матурлыҡ буйынса Айҙан ҡалышһаң, мин һине айырам", - тигән. Айҙан да һылыуыраҡ була алмағанын аңлаған ҡатыны уға: "Һин минең менән айырылдың", - тип яуап биргән һәм өйҙө ташлап сығып киткән. Иса был хәлгә бик ныҡ ҡайғырған һәм Мансур Хәлифкә барып, барыһын да һөйләп биргән. Хәлиф бөтә шәриғәт белгестәрен дә саҡырған һәм уларҙың фекерен һораған. Бөтәһе лә, ҡатын ирекле, тип әйткән. Тик бер кеше генә өндәшмәгән. Мансур унан: "Ни өсөн һин бер нәмә лә өндәшмәйһең?" - тип һораған. Ул кеше: "Эй, иманлыларҙың юл күрһәтеүсеһе! Бөйөк Аллаһы Тәғәлә: "Һис шикһеҙ, мин кешене иң гүзәл шәкелдә яралттым", - тигән. Шуға күрә кешенән дә гүзәлерәк бер кем дә, бер нәмә лә юҡ. Ай ҙа кешенән матурыраҡ була алмай". Мансур был һүҙҙәрҙе иң дөрөҫө тип тапҡан һәм Исаға кисекмәҫтән ҡатынын эҙләп табып, өйөнә алып ҡайтырға ҡушҡан".**


"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

Мөхәррирәт:
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: info@kiskeufa.ru
kiskeufa@ufacom.ru

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.


«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә. Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.


«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 3204